✓ *"Бер итексе танылған рәссам Апеллесҡа уның картинаһында итек һүрәтенең дөрөҫ эшләнмәүе тураһында әйтә. Апеллес уның был тәнҡитен ҡабул итә. Ләкин итексе, ҙур белгес һымаҡ ҡыланып, рәссамдың бөтөн картинаһын тәнҡитләй башлағас, Апеллес түҙмәй: "Әй, итексе, итектең кимәлен онотма", - тип уны туҡтата".*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19 - 25 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№25 (391)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Башҡорт халҡы...**

күтәрелеш осорон кисерә, - тине Президент



2

**Күп һүҙ менән мауыҡмайыҡ,**

йәки Беренсе Йәштәр ҡоролтайы хаҡында бер кәлимә һүҙ



6-7

**Башҡорт халҡына мөрәжәғәт**



8-9

**Салауат йыйынының...**

Торатауҙа үткәне



12-13

14 ТВ-программа

*ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ*

# ЗАМАН ҮҘГӘРӘ, АСЫЛ ҮҘГӘРМӘЙ,

## йәки III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайынан һуң уйланыуҙар

**1917 йылда бер-бер артлы уҙған I, II, III Бөтөн башҡорт ҡоролтайҙарының тарихи әһәмиәте Башҡорт автономияһын төҙөү менән бәйле. 20-27 июлдә Ырымбурҙа үткән I Бөтөн башҡорт ҡоролтайында башҡорттарҙың үҙ автономияһын төҙөү фарызлығы билдәләнһә, 25-29 августа Өфөлә үткән II Бөтөн башҡорт ҡоролтайында Башҡорт өлкә шураһы төҙөлә, уның органы булып "Башҡорт" гәзите сыға башлай. Ә инде ошо уҡ йылдың 8-20 декабрендә Ырымбурҙа үткән III Бөтөн башҡорт ҡоролтайында Башҡорт автономияһы һәм уның Хөкүмәте раҫлана. Шулай итеп, 1917 йылда бер-бер артлы үткән өс Бөтөн башҡорт ҡоролтайҙары Башҡорт автономияһын иғлан итеү һәм Башҡорт Хөкүмәтен төҙөү менән тамамлана. Әгәр ҙә үткән быуаттың аҙағында үткән - I, 2002 йылда үткән - II һәм яңыраҡ үткән III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайҙарын ошондай уҡ сылбыр рәүешендә ҡараһаҡ, ниндәй һығымта яһарға булыр ине икән? Йәғни 1995 йылдан алып 2010 йылға тиклем башҡорт йәмғәтселеге фекере ниндәй үҫеш этаптары кисерә, улар ҡоролтайҙарҙа нисек сағылыш таба һуң?**

Ошо һығымтаны икенсе төрлө итеп, "III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының әһәмиәте, уны быға тиклем уҙған башҡаларынан айырған төп үҙенсәлеге нимәлә?" тигән һорауға яуап биреү менән дә аңлатып булыр ине. Бының өсөн, әлбиттә, һәр өс ҡоролтайҙа ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы ҡарап сығып, уларҙы сағыштырып, ошо юҫыҡта өсөнсө ҡорҙоң башҡаларынан айырылған үҙенсәлеген дә билдәләп була. Әммә бында "Һәр бер сағыштырыу аҡһай", тигән логикаға бәйле, ҡорҙарҙа ҡабул ителгән ҡарарҙарҙа беҙ оҡшаш фекерҙәрҙе күп табыр инек. Сөнки башҡорт милләтенең проблемалары һәр саҡта ла уның рухи ҡиммәттәрен, ерен, тәбиғи һәм тарихи ҡомарҡтыларын һаҡлауға бәйле. Етмәһә, бер үк тарих быуат һайын һәр даим ҡабатланып тора. Заман үҙгәрһә лә, асыл шул килеш ҡала. Тағы ла шуныһы: үҙәктең унитаристик асылы ныҒыраҡ сағылған һайын, милләт һәм ошо хәлгә тарыған милләттәр берләшә, бер ҡорға туплана ғына бара. Властар, ахыры, бер хәҡиҡәтте аңламай: пружинаны ни тиклем ҡыҫһаң, уның кире ҡағыу, яҙылыу ҡеүәте лә арта. Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, ҡоролтайҙан ҡоролтайға сығыштарҙың ҡыйыуыраҡ, һәлмәгерәк йөкмәткеле була барыуын билдәләп була.

**(Дауамы 4-се биттә).**

*БАШҠОРТ ДОНЪЯҺЫ*

*Торатауҙың ап-аҡ таштарынан*
*Ейәндәрем, ана, ҡәлғә ҡора.*
*Ҡороп бөткәндәрен күтәһем бар,*
*Васыятымды әйтеп бөтәһем бар:*

*Олатайҙан һеҙгә - мираҫым, тип*
*Торатауҙы васыят итәһем бар.*
*Килеп торорһоғоҙ бында гел, тим,*
*Ошо хозур донъя - һеҙҙең ил, тим...*

**Булат РАФИҠОВ.**



**✓ Беҙҙең яҡындағы стратегик маҡсат - Башҡортостанды алдынғы төбәккә әйләндереү, Рәсәй Федерацияһын модернизациялау лидерҙары иҫәбенә индереү. Был республикабыҙ өсөн реаль, хәлдән килерлек бурыс!**



ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

**Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһы Өфөлә шаулап-гөрләп III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы ла үтеп китте. Юҡ-юҡ, ҡоролтай көндәре генә үтеп китте, ә ошо ысын мәғәнәһендә оло тарихи ваҡиғаға тиң халыҡ йыйыны күңелдәребеҙҙе рух күктәренә әйҙәне, йөрәктәребеҙҙе дәртлерәк типтерҙе, ил киләсәге хаҡындағы уй-фекерҙәребеҙҙе туплаңы, милли тойғоларыбыҙҙы, хис-кисерештәребеҙҙе яңыртты, маҡсатлы эш-ғәмәлдәргә кисекмәҫтән тотоноу зарурлығына инандырҙы. "Бындай эшлекле, принципиаль һәм һәр башҡортто алға әйҙәүсе, көс-дәрт өҫтәүсе йыйындарҙың күптән булғаны юҡ ине", - тип баһа бирә ҡоролтайға милләттәштәребеҙ. Тимәк, артабан һәр ҡайһыбыҙ үҙ урыныбыҙҙа, үҙ даирәбеҙҙә ҡоролтай ҡарарҙарына ярашлы эш башҡарырға бурыслыбыҙ. "Киске Өфө" гәзите "Ҡоролтай зыңғыры" рубрикаһында башҡорт донъяһының хәл-торошо, уны заманса яңыртыу мәсьәләләре буйынса асыҡтан-асыҡ һөйләшеүҙе дауам итәсәк. Ҡоролтайыбыҙҙа хөрмәтле ил ағаһы, Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Ғөбәйҙулла улы РӘХИМОВ республикабыҙҙың, халҡыбыҙҙың бөгөнгөһө һәм киләсәге менән бәйле фәһемле уй-фекерҙәре менән бүлеште. Һүҙебеҙҙе Президент телмәренең иң әһәмиәтле урындарынан алынған һығымталар һәм кәңәш-тәҡдимдәрҙән башлауҙы маҡсатҡа ярашлы булыр, тибеҙ.**

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫ...

## күтәрелеш осорон кисерә, - тине Президент



◆ Быуаттар дауамында башҡорттар иң мөһим мәсьәләләрҙе ҡоролтайҙа тикшергән, -тине Мортаза Ғөбәйҙулла улы. - Ата-олатайҙар васыят итеп ҡалдырған ҡоролтайҙар милләтте берләштереүҙең мөһим бер формаһы булып торған, килешеп, ҡарарҙар ҡабул итеү өсөн уның иң яҡшы вәкилдәрен йыйған. Тап ҡоролтайҙарҙа кешеләр ғәҙелһеҙлеккә һәм иҙеүгә ҡаршы бергәләп сығыш яһау өсөн һөйләшеп килешкән. Тап ошондай йыйылыш ҡарарҙары менән егермense быуат башында республикабыҙ - федератив Рәсәйҙең беренсе автономияһы төҙөлгән.

Беҙ башҡорт халҡының был күркәм традицияһын уңышлы тергеҙеүебеҙ менән ғорурланабыҙ. Бында беҙ башҡарылған эштәрҙе баһалай, фекер һәм тәжрибә уртаҡлаша, борсоған мәсьәләләрҙе уртаға һалып тикшерә алабыҙ. Ә иң мөһиме - артабанғы үҫеш перспективаларын билдәләй, киләсәккә яңы бурыстар ҡуя алабыҙ.

Уҙған йылдарҙа Башҡортостанда бик күп нәмә үҙгәрҙе. Башҡа төбәктәрҙән һәм сит илдәрҙән беҙгә килгән делегаттар ыңғай үҙгәрештәрҙе асыҡ күрәләр, тип уйлайым. Тамырынан ижтимағи үҙгәртеп ҡороуҙар осоронда республикабыҙ үҙ иҡтисади һәм рухи ҡеүәтен һаҡлап ҡалыу ғына түгел, уны күпкә арттырыуға өлгәште. Ә иң мөһиме - халыҡтың тормошон һиҙелерлек яҡшырта алды.

◆ 1917 йылға тиклем Рәсәйҙең сәйәси картаһында "Башҡортостан" төшөнсәһе бөтөнләй булманы. Ул халҡыбыҙ йөрәгендә генә яна ине. Ә хәҙер Рәсәй Федерацияһының сәйәси картаһынан Башҡортостан Республикаһын бер ниндәй көрсөк һәм һынылыш та һыҙып ташлай алмаясаҡ. Шуға күрә бөгөн милләтте тергеҙеү тураһында һөйләргә кәрәкмәй. Беҙ алдыбыҙға өсөнсө мең йыллыҡта башҡорт халҡының артабанғы алға ынтылышлы үҫеше тураһында мәсьәлә ҡуйырға тейешбеҙ!

Рәсәй Федерацияһы халыҡтарының туғандаш ғаиләһендә сәскә атыусы хәҙерге Башҡортостан - бына нимәнән ғибәрәт бар башҡорт халҡының ғорурлығы, бына нимә тураһында уның уй-ғәме, хәстәрлеге. Был беҙҙең асылыбыҙ, һәм икенсе, ниндәйҙер үҙенсәлекле идеялар эҙләү кәрәкме икән?

◆ Булған ҡаҙаныштарыбыҙҙы анализлағанда "уңыштан баш әйләнергә" тейеш түгел. Һәр халыҡ яулап алған ҡаҙаныштарын һаҡлай белергә лә тейеш! Һәм уларҙы яҡлау ғына түгел, артабан үҫтерергә лә кәрәк. Һәр талапҡа ярашлы булған аҡыллы яуап табырға өйрәнеү мөһим. Башҡорт халҡы алдында ҡуйылған заман талаптары бөгөн аҙ түгел!

Ошоноң менән бәйле башҡорттарҙың артабанғы этник консолидацияһын тәьмин итеүҙең зарурлығын иң тәүге маҡсаттарҙың береһе тип иҫәпләйем. Ҡайһы бер эшмәкәрҙәрҙең "ысын" һәм "ысын булмаған" башҡорттар, кемдеңдер йоғонтоһона эләккән башҡорттар һәм башҡа нәмә тураһында фекер йөрөтөүен тыңлауы оят. Бындай фекер әйтеү - тәрбиәһеҙлек, аңлап етмәү һөҙөмтәһе. Аңлашылып тора, бер ниндәй тел үҙенсәлеге, айырымлығына ҡарамаҫтан, күңелең менән башҡорт икәнеңде тояһың, аңлайһың икән, тимәк, һин - башҡорт.

◆ Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү мөһим проблема булып тора. Башҡорт халыҡ мәҡәлендә әйтелгәнсә: "Теле юҡтың - иле юҡ, иле юҡтың - көнө юҡ". Беҙҙең республикала башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү өсөн күп нәмә эшләнә. Шулай ҙа үҙебеҙ алдында ғәҙел булайыҡ. Күрелгән саралар ҡарамаҫтан, башҡорт телен ҡулланыу даирәһе тар булып ҡала. Башҡорт телендәге гәзит-журналдарҙы яҙҙырыусылар иҫәбе һиҙелерлек кәмей. Һәм бында уйланылған, комплекслы саралар кәрәк.

Федераль мәғариф стандартында төбәк компонентын бөтөрөүҙәре лә милли мәғарифтың бәкәленә һуҡты. Әммә проблема бында ғына түгел!

Милли телде, традицион халыҡ мәҙәниәтен көсләп, үрҙән "күрһәтмә буйынса" биреп булмай! Әгәр ҡалалағы йәки ауылдағы башҡорт ғаиләһе башҡорт телендәге гәзит-журналды яҙҙырырға, балаларын милли мәҙәниәт рухында тәрбиәләргә, ғаиләлә туған телмәренә өйрәтергә теләмәй икән, бында дәүләт нимә менән ярҙам итһен?

◆ Үҙебеҙгә тәнҡит күҙлегенән ҡарайыҡ - ҡайһы бер кире тенденцияларҙы һаман да үҙгәртә алманыҡ. Бик йыш башҡа төбәктәрҙәге башҡорттарҙың тел, рухи-мәҙәни ихтыяжын ҡәнәғәтләндереүгә бәйле ҡыйынлыҡтар осрай. Йәштәрҙең бер өлөшө мәҙәни үҙенсәлеген юғалтҡан. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы был мәсьәләләр менән ныҡышмалыраҡ шөғөлләнергә тейеш, тип иҫәпләйем.

Борсолоу тыуҙырған башҡа мәсьәләләр ҙә бар. Донъяның башҡорт халҡы тураһында халыҡ ансамблдәре һәм музей күргәҙмәләре аша ғына белеүе менән килешә алабыҙмы? Башҡорт халҡы хәҙерге заман менән йәшәүсе, динамикалы үҫешеүсе милләт булырға тейеш. Беҙ үткәндәр хаҡындағы иҫтәлектәр менән генә йәшәй алмайбыҙ. Иң мөһим ваҡиғалар - алда, тип ышанам. Маҡсатыбыҙ - бар милләтте модернизациялау!

◆ Үкенескә күрә, рухи-мәҙәни тормошта һуңғы арала үҙ-үҙебеҙҙе тынысландырыу билдәләре күҙәтелә. Беҙҙә бик шәп мәҙәниәт, фән һәм мәғариф учреждениелары бар, әммә талантлы драматургтар, режиссерҙар, актерҙар, композиторҙар, йырсылар һәм ғалимдар аҙ. Ысынлап та, фән докторҙары, Рәсәй һәм бар донъя масштабында тикшеренеүселәре булмаған тиҫтәләгән фән йүнәлешен һанарға мөмкин. Ижади бәхәстәр, аналитик тәнҡит, ғилми һүҙ көрәштереү, шиғыр кисәләре, музыкаль лекторийҙар, сәнғәт әһелдәренең халыҡ менән осрашыуҙары һирәгәйҙе.

Әйтергә кәрәк, киләсәк юғары рухи-мәҙәни ҡиммәттәр булдырған, компьютерҙар етештергән, Ер юлдашын орбитаға сығарған, генетика серҙәренә төшөнгән, атом серен асҡан милләттәр ҡулында. Халыҡты сәнғәт, фән һәм эшҡыуарлыҡҡа өйрәтеүгә курс алырға кәрәк. Йәштәр араһында һәләтлеләрҙе һәм гений осҡоно булғандарҙы эҙләү мөһим.

Башҡорт халҡы хәҙер күтәрелеш осоро кисерә. Һәм Башҡортостанды инновацион үҫеш нөктәһе, бөтә Рәсәйҙе модернизациялау усаҡтарының береһенә әүерелдереү беҙҙең үҙебеҙҙән тора.

◆ Рухи элита милләттең ижади энергияһын яңыны булдырыу юҫығына йүнәлтергә тейеш. Был - залда ултырыусыларҙың һәр береһенең бурысы! Беҙгә үҙ технополистарыбыҙ һәм фән ҡаласыҡтарыбыҙ кәрәк. Бының өсөн дәүләткә ҡарамаған биш йыллыҡ милли үҫеш пландары талап ителәсәк. Беҙҙең яҡындағы стратегик маҡсат - Башҡортостанды алдынғы төбәккә әйләндереү, Рәсәй Федерацияһын модернизациялау лидерҙары иҫәбенә индереү. Иманым камил, был республикабыҙ өсөн реаль, хәлдән килерлек бурыс!

Башҡорттарға хас маҡсатҡа ынтылышлылыҡ, белемгә, изгелек һәм ғәҙеллек идеалдарына ынтылыу арҡаһында Башҡортостан киләсәктә лә бөйөк Евразия державаһы сифатында аяҡҡа баҫҡан Рәсәй Федерацияһы составында лайыҡлы урын биләр, тип ышанам! Беҙҙең өҫтөнлөк - милләт-ара хеҙмәттәшлек! Беҙҙең маҡсат - республиканы һәм милләтте модернизациялау! Бына ни өсөн беҙ иртәгәһе көнгә ышаныс менән бағабыҙ!

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Мортаза Рәхимов Һамарҙа Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле ҡарамағындағы Совет ултырышында ҡатнашты. Ултырыштағы һөйләшеү илдә граждандар йәмғиәте институттарын үҫтереү һәм социаль йүнәлешле йәмәғәт берекмәләренә, коммерцияға ҡарамаған ойошмаларға ярҙам күрһәтеү мәсьәләләренә арналды.

✓БР Хөкүмәте Премьер-министры Раил Сарбаев РФ Спорт, туризм һәм йәштәр сәйәсәте министрлығының департамент директоры Елена Владимирская менән осрашты. Әңгәмәнең төп темаһы - Башҡортостан физкультура һәм спорт институтының үҫеш перспективалары. Елена Владимирская республиканың 30 проценты спорт менән әүҙем шөғөлләнеүен маҡтап телгә алды һәм был бөтә Рәсәйҙәге иң яҡшы күрһәткес, тип билдәләне.

✓Башҡортостан урмандарында янғын хәүефе юғары булыу сәбәпле, БР Урман хужалығы министрлығы Белорет, Әүжән, Кананикольск, Йылайыр урман биләмәләрендә һауа мониторингы ойошторҙо. Авиапатруль һәм янғын һүндереү хеҙмәте ярҙамында урман янғындары һүндерелде. Быйыл республика урмандарында 140 янғын теркәлгән, ут 2600 га майҙанды ялмаған.

✓Кикбоксинг буйынса донъя чемпионатында Өфө егете Вил Ғабдуллин етенсе тапҡыр донъя чемпионы исемен яуланы. Турнирҙа 21 илдән барлығы 400-ҙән ашыу спортсы ҡатнашҡан булған.

✓Быйыл Башҡорт дәүләт аграр университеты бюджет нигеҙендә белем алыу өсөн 1 мең 115 студент ҡабул итәсәк. Уларҙың 885-е көндөҙгө бүлеккә инәсәк. Бында өс яңы һөнәр тәҡдим ителәсәк: "һыу ресурстары һәм аквакультура (балыҡтарҙы өйрәнеү)", "биология (һунарсылыҡ)", "туризм". Уҡыу йортонда барлығы 25 һөнәр буйынса бюджет урындары булдырылған.

✓Республикала ауыл йәштәре менән эшләүселәр араһында бәйге иғлан ителгән. Ул ике этаптан торасаҡ: беренсеһе 15 августа тиклем - район, икенсеһе 1 октябргә тиклем республика кимәлендә үтә. Финалға иң яҡшы биш ауыл биләмәһе сығасаҡ. Тулыраҡ мәғлүмәттәр менән БР Йәштәр сәйәсәте, спорт һәм туризм министрлығының www.minsport02.ru сайтында танышырға мөмкин.

*АҘНА ШАҢДАУЫ*

# ӨСӨНСӨ КӨС КЕМДЕҢ ҠУЛЫНДА,

## йәки Йәмғиәтте тағы ла нимәнән мәхрүм итеп була?

**Йәй ҡыҙыу башланды, йәмәғәт. Тирә-яҡта атыш, үлтереш, һуйыш, әр һәм ыҙғыш. Беҙҙе береһенән-береһе ҡурҡыныс ваҡиғалар уратып алды. Алыҫта, йәғни Алыҫ Көнсығышта ла атыш. Яҡында ғына - Урта Азияла, Ҡырғыҙстанда ла һуйыш, үлтереш. Ни эшләп үҙ илебеҙ ят ерҙәрҙән алыҫыраҡ булып сыҡты әле, тип һорайһығыҙмы? Мәскәү менән Владивосток араһы, йәмәғәт, 10 мең саҡырым самаһы. Ә Бишкектән Мәскәүгә хәтлем ни бары 4 мең саҡырым ғына. Унда ут ҡабынһа, төтөнө һә тигәнсә беҙгә килеп етәсәк. Хәйер, төтөнө генәме - осҡондары! Ә беҙҙә, Рәсәйҙә, йәй быйыл былай ҙа ҡыҙыу тора, тоҡаныу өсөн күп кәрәкмәй.**

Тәүҙә яҡындағыларға, ут күршеләребеҙгә күҙ һалайыҡ. Ҡырғыҙстанға, тимәк. "Ут күрше", тип арттырыбыраҡ ебәрҙем, буғай. Уларға ҡуҙ артынан йөрөгән юҡ. Йышыраҡ улар беҙгә мөрәжәғәт итә. Бөгөн унда хәлдәр шәптән түгел. Ҡырғыҙҙар үзбәктәрҙе һуямы? Әллә тажиктар, ҡоралланышып, үзбәк менән ҡырғыҙ халыҡтарын үҙ-ара сәкәштерәме? Тегеләре лә ата, былары ла. Тегеләрҙе лә һуялар, быларҙы ла. Шуныһы аяныслы, бер ни ҙә эшләп булмай. Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзаларының ултырышында Үзбәкстан президенты Ислам Кәримов асыҡтан-асыҡ әйтте бит, был Ҡырғыҙстандың эске эше, унда бер кем дә ҡыҫыла алмай, тип. Ә унда, Ҡырғыҙстандың Ош һәм Йәләләбад ҡалаларында үзбәктәрҙе ҡыралар, Ислам Кәримовтың милләттәштәрен. Йәшәгән йорттарынан ҡыуалар. Яңылыҡтарҙы телеэкрандан иғтибар менән ҡарап барыусылар абайлағандыр - был ҡалаларҙа үртәлгән йорттарҙың стеналарына, диуарҙарға "Үзбәктәргә - үлем!" тип яҙылған хатта. Шуға ҡарамаҫтан, Ислам Кәримов Ҡырғыҙстандағы үзбәктәрҙең яҙмышын ҡурсаларға ашыҡмай. Дөрөҫөрәге, ҡурсаларға теләүен күрһәтмәй. Ул ни эшләй ала һуң? Үҙ илендә хәлдәр шәптән түгел. Ә Ҡырғыҙстандан ҡасҡындар күпләп килә башлаһа (улар бөгөн үк дүрт йөҙ меңдән ашҡан тигән мәғлүмәт бар), халыҡ-ара ойошмаларҙан, донъя йәмәғәтселегенән ярҙам һорарға мөмкин. Иҡтисады күптән инде салҡан ятҡан Үзбәкстанға бер нисә тиҫтә миллион доллар ҡамасауламаясаҡ ул.

Ҡырғыҙҙар, дөрөҫөрәге, Ҡырғыҙстандың яңы етәкселеге (аныҡлап әйтәйек, ваҡытлы хөкүмәте) бөгөн үҙ илендә тәртип урынлаштырырға һәләтһеҙ. Был һуңғы ваҡиғалар барышында асыҡтан-асыҡ күренде. Үҙ халҡын ауыҙлыҡлар өсөн башҡа илдәрҙән, шул иҫәптән, Америка Ҡушма Штаттарынан, Рәсәй Федерацияһынан ярҙам һорап аптыраттылар хатта. Улар бит үҙҙәренең ҡырғыҙҙарына ҡаршы сит ил ғәскәрҙәрен йүнәлтергә самалай. Ә был Америка Ҡушма Штаттары өсөн икенсе Вьетнам. Ә Рәсәй өсөн? Йә, ниндәй фараздар бар? Илебеҙҙә бөгөн Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарынан тыш, тағы ла "афғандар", "чечендар" бар. Беҙгә тағы ла "ҡырғыҙҙар" кәрәкме? Шулай булғас, Рәсәй әрмеһендә хеҙмәт иткән балаларығыҙҙың хәлен белешеп кенә торoғоҙ, тимәксемен. Әлбиттә, "Рәсәй үҙенең хәрби көстәрен Ҡырғыҙстанға индермәйәсәк", тип нығыта әйтеүселәр булманы түгел, булды ул. Ләкин беҙҙә өҫтән әйткәндәргә һис шикһеҙ ышанырға мөмкинме һуң?

Әйткәндәй, ни өсөн Ҡырғыҙстан ваҡытлы хөкүмәте илдең көньяғындағы боларыштарҙы, ҡан ҡойошто туҡтата алмай икән? Шул хаҡта уйланғанығыҙ булманымы? Ҡырғыҙстанда власть алмашынды алмашыныуын, ә бит дәүләттең тотанағы һәм таянысы булған репрессив аппарат - именлек хеҙмәте, милиция, ниһайәт, армия (әлбиттә, ул дәүләтте тышҡы дошмандарҙан һаҡларға тейеш, әммә уны эске дошмандарға ҡаршы йүнәлтеү өсөн тейешле бойороҡ биреү ҙә етә) элекке властан ҡалған да баһа. Ғаиләлә нисек? Йорт башлығы алышынһа, тәрбиәүи (репрессив, тип аңларға кәрәк) ҡоралдарҙың береһе - ҡайыш яңы хужаға шулай уҡ тоғро хеҙмәт итәсәк тә баһа. Уға ҡаршы күтәрелмәй, уның ҡулында власть символы булып, элеккесә шажлап торасаҡ. Ә армияла, милицияла тере кешеләр эшләй. Улар ҡайһы бер осраҡтарҙа уйларға һәләтле. Ҡай саҡ уларға түрәләрҙең бойороҡтары оҡшамай йәки аңлашылмай. Йәки улар бирелгән әмерҙәрҙе үтәүҙән баш тарта. Сөнки был уларҙың эске ышаныстарына, уй-фекерҙәренә тап килмәй. Шул саҡта инде дәүләт үҙенең абруйын юғалта. Һәм власты ҡулда тотоу өсөн ярҙамды ситтән һорарға мәжбүр була.

Ғәйепплеләр тураһында. Ҡырғыҙстандағы ҡан ҡойошто ойоштороуҙа ғәйеплеләрҙе эҙләү ихлас бара. Әлеге ваҡытлы хөкүмәт ағзалары боларыштарҙы ойоштороуҙа элекке президент Ҡорманбәк Баҡыевтың һәм уның яҡындарының ҡулын күрә. Ҡайһы бер сит ил күҙәтеүселәре иһә Ҡырғыҙстанда Рәсәй эҙен абайлай. Беҙҙең журналистар һәм ҡайһы бер сәйәсмәндәр Америка Ҡушма Штаттары Урта Азияла үҙенең "донъя жандармы" ролен башҡара, тип фаразлай. Өсөнсө көстө күреүселәр ҙә юҡ түгел.

Өсөнсө көстө Алыҫ Көнсығышта ла эҙләйҙәр. Унда бер нисә аҙна буйына ысын мәғәнәһендәге "партизан һуғышы" барҙы. Дөрөҫөрәге, "һуғыш" күберәк ваҡытлы мәғлүмәт саралары һәм интернетта ойоштоpолдо. Рәсәй көнөндә генә Алыҫ Көнсығыш "партизандары" төркөмөн юҡ итеү тураһында хәбәр ителде. Уларҙың ҡайһы берәүҙәре ҡулға алынды, икенселәре үлтерелде, үҙҙәренә ҡул һалыусылар ҙа булды. Аңлап тораһығыҙҙыр, был ваҡытлы матбуғат саралары хәбәр итеүенсә генә. Кем кемде үлтергән, кемгә ҡул һалғандар һәм кемде ҡулға алғандар - аныҡ ҡына билдәле түгел. Ғөмүмән, кемдәр улар - бандиттармы, әллә партизандармы - әлегә асыҡлап булмай. Аңлайһығыҙҙыр, бандиттарҙың башында, Василий Шукшиндың геройы әйтмешләй, "урларға, эсергә һәм төрмәгә", тигән уйҙан башҡа бер нәмә лә булырға тейеш түгел. Ә быларҙы бит изге идея өсөн көрәшселәр тип атайҙар. Йәнәһе, улар ваҡытында милиция тарафынан ғәйепһеҙгә ҡыйырһытылған булған - туҡмалған, йәберләтелгән. Быға түҙмәй, ҡорал алып тайғаға киткәндәр. Икенсе бер мәғлүмәттәр буйынса, Алыҫ Көнсығыш "партизандары" - неонацистар. Улар башҡа милләт кешеләрен (айырыуса, Урта Азиянан сыҡҡандарҙы) туҡмағандар, үлтергәндәр, һуйғандар. Шуға ла уларҙы милиция ҡулға алған булған. Ни өсөн ваҡытлы матбуғат сараларында, интернетта уларҙы "партизан" тип атайылар һуң? Быға тиклем беҙҙең ил халҡы өсөн "партизан", тимәк, Ковпак һәм Даян Мурзин, пионер-геройҙар Валя Котик һәм Леня Голиков, батыр комсомолка Зоя Космодемьянская һәм башҡалар ине. Ә Алыҫ Көнсығышҡа килгәндә, граждандар һуғышы ваҡытында уҡ паровоз топкаһында яндырылған Сергей Лазо күҙ алдына баҫа. Ә былар егерме беренсе быуатҡа аяҡ баҫҡанда ниндәй идеалдар өсөн көрәшә һуң? Рәсәйҙе бер генә милләт йәшәгән фашистик дәүләткә әүерелдерер өсөнмө?

Милиция "партизандар"ҙы әллә бер аҙна, әллә ун көн буйына эҙәрлекләне. Һуңынан тере ҡалғандарын ҡулға алғас, тайгала улар боҫоп ятҡан урындарҙы асыҡланы. Унда аҙыҡ-түлек һәм ҡорал менән бергә, нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, төрлө фашистик һәм неонацистик әҙәбиәт, листовкалар һ.б. тапҡандар, имеш. Әйткәндәй, тағы ла бер төркөм неонацистар үткән аҙнала Санкт-Петербургта ла ҡулға алынды. Улар ҡала буйлап Африка һәм Урта Азия халыҡтарының вәкилдәрен үлтереп йөрөгән.

Илебеҙҙе милләтселәр баҫып алған. Улар ҡара тәнлеләрҙе, башҡа милләт кешеләрен һуйып, үлтереп кенә ҡалмай, хатта дәүләттең таянысы булған милицияға ҡаршы партизан һуғышы аса. Был ысынлап та шулаймы? Әлбиттә. Мәскәүҙә, башҡа үҙәк ҡалаларҙа неонацистар ысынлап та баш күтәрә икән. Ҡайһы бер төбәктәрҙә башҡа милләт вәкилдәре ҡараңғы төшкәс урамға сығырға ҡурҡа, имеш. Ысынлап та хәлдәр шулай ныҡ ҡурҡынысмы? Әллә был турала хәбәр итеү, шау-шыу күтәреү кемгәлер кәрәкме? Кемгәлер файҙалымы? Ҡырғыҙстандағы боларыштар менән файҙаланып, беҙҙекеләр шулай уҡ үҙ маҡсаттарына ирешеп ҡалырға ынтылмаймы шул?

Партизан һуғышын, уның ваҡытлы матбуғат сараларында ихласлап яҡтыртылыуын һуңғы арала булған ҡайһы бер ваҡиғалар менән бәйләп ҡарайыҡмы әллә? Күптән түгел Дәүләт Думаһы депутаттарының пленар ултырыштарына йөрөмәүе, асылда, депутат эшмәкәрлеген инҡар итеүҙәре хаҡында мәғлүмәт донъя күргәйне. Ул да тиҙ арала киң таратылды. Төрлө фараздар яңғыратылды. Ултырыштарға йөрөмәгән депутаттарҙың исемлеген баҫтырып сығарыу тураһында ла һүҙ булғайны. Һуңынан был идеянан тиҙ генә баш тарттылар. Әммә ултырыштарҙа ҡатнашмаған, үҙҙәренең тауыш биреү карточкаларын башҡаларға биргән депутаттар тураһында мәғлүмәт халыҡтың башына инеп ҡалды. Һуғыш менән сағыштырһаҡ, был ниндәйҙер оло һөжүм алдынан үҙенсәлекле артиллерия әҙерлеге булды инде.

Рәсәй властарының логикаһы аңлашыла. 1990 йылдың 12 июнендә ҡабул ителгән һәм 1993 йылда Конституция тарафынан нығытылған күп кенә демократик ҡаҙаныштарҙы улар төрлө сәбәптәр менән бәйләп юҡҡа сығарырға тырышты. Һәм тырыша. Төбәк башлыҡтарын тәғәйенләү, һайлаусыларҙы "бөтәһенә лә ҡаршы" тауыш биреүҙән, һайлауҙың мажоритар системаһын һәм бер мандатлы округтарҙа һайлауҙан мәхрүм итеү, власть вертикален урынлаштырыу тигән маҡсат менән төбәктәрҙең үҙ аллылығын тартып алыу һәм һуңғы йылдарҙа ойошторолған ҡайһы бер инициативалар тәүҙә ошондайыраҡ "әҙерлек"тән башланды бит.

Бөгөн беҙҙе нимәгә әҙерләйҙәр? Думаны былай ҙа партия исемлектәре буйынса һайлай башланыҡ бит. Ә бәлки, уларҙы ла тиҙҙән тәғәйенләүгә күсерҙәр? Ә неонацистар менән көрәш әләме аҫтында илдә булған бар милли ойошмаларҙы шик һәм һаҡ аҫтына алмаҫтармы? Рәсәйҙә ниндәйҙер ғәҙәттән тыш хәл урынлаштырыу, власты "ҡаты ҡулға" тапшырыу өсөн Ҡырғыҙстан ситуацияһын ҡабатламаҫтармы? Абай булайыҡ, йәмәғәт.

**Таһир ИШКИНИН.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Республика мәктәптәрендә Берҙәм дәүләт имтихандары тапшырыу тамамлана. Рус теленән барлығы 28709 бала БДИ тапшырҙы, шуларҙың 900-ҙән ашыуы билдәләнгән сикте үтә алманы. Математиканан 27214 бала имтихан тотто, 977 бала уны тапшыра алманы. Белеүегеҙсә, рус теленән һәм математиканан БДИ мотлаҡ булып һанала, уларҙы тапшыра алмағандар аттестат ала алмай. Химия фәненән республикала 3564 бала БДИ тапшырған, уларҙың 122-һе ҡуйылған сикте - 33 балдан үтә алмаған. Сит телдәр буйынса 1213 бала БДИ тапшырған, 35 ҡатнашыусы минималь баҫҡысҡа - 20 балға тиклем күтәрелә алмаған.

✔ Суд приставтары федераль хеҙмәтенең Башҡортостандағы идаралығында тәүлек әйләнәһенә "ышаныс телефоны" эшләй:(347) 273-59-82. Халыҡ менән бындай бәйләнеш төрлө енәйәттәре иҫкәртеү, шулай уҡ суд приставтары араһындағы коррупцияны асыҡлауға ла ярҙам итә.

✔ Республикала тыуым арта барыу тенденцияһы күҙәтелә. Мәғлүмәттәр буйынса, биш айҙа 22820 бала тыуған, был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 832 балаға күберәк. Балалар үлеме кәмей бара. Биш ай эсенә был күрһәткес 6,4 промилле тәшкил иткән (былтыр ул 7 промилле булған).

✔ Шағир, өс китап авторы Хисмәтулла Юлдашев Төркиәлә үткән Халыҡ-ара хазар поэзияһы фестивалендә ҡатнашты.

✔ Июнь башынан алып "Өфө-Самара- Санкт-Петербург" маршруты буйынса йөрөүсе поезда Өфөнән Санкт-Петербургҡа юлланған пассажирҙар өсөн махсус яңы вагон тәғәйенләнгән.

✔ БР Мәғариф министрлығы һәм БР-ҙың Мәғарифты үҫтереү институты биология, география һәм химия уҡытыусылары араһында уҡыу-уҡытыу һәм тәрбиәләү процесында милли-төбәк компоненттарын файҙаланыу буйынса экологик, социаль-иҡтисади, мәғариф тикшеренеү проекттары бәйгеһе үткәрә. Проекттар айырым кешеләр йә төркөмдәр тарафынан эшләнергә мөмкин. Эштәр 15 октябргә тиклем баҫма йә электрон төрҙә ҡабул ителә. Бәйге шарттары менән БР-ҙың Мәғарифты үҫтереү институты сайтында www.irorb.ru таныша алаһығыҙ.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# БАШ ҠАЛА УРАМДАРЫНДА...

## троллейбустар күбәйә

**Ҡала Советы депутаттары 2015 йылға тиклем Өфөнөң коммуналь-инфраструктура үҫешенең комплекслы программаһын ҡабул итте. Уға ярашлы, ҡала транспорты, юл селтәре һәм баш ҡаланы йылылыҡ, газ, электр энергияһы менән тәъмин итеү ҡарала. Коммуналь инфраструктура үҫешенә 78 миллиард һумдан ашыу аҡса бүленгән. Ул Рәсәй, Башҡортостан һәм предприятиеларҙың үҙенең һәм ситтән йәлеп ителгән аҡсаларынан тупланасаҡ.**

**Транзит төр транспорт - ысын мәғәнәһендә баш ҡалабыҙ өсөн бәлә ул. Ауыр йөк машиналары ҡала ситенән йөрөһә лә, барыбер ҡала автомобилселәренә ҡамасаулай һәм тығын килтереп тыуҙыра.** Шуға ла ҡалала бер нисә урау юл төҙөлөшө ҡарала. Көнбайыш яҡтан Өфөнө Благовещен районындағы Ағиҙел йылғаһы аша күпер буйлап урап үтергә мөмкин буласаҡ. Көнсығыш яҡтан Төньяҡ сәнәғәт районын һәм Өфө - Бөрө -Яңауыл трассаһын урап үтеүсе юл һалынасаҡ. Көньяҡ тимер юл һәм Яңы Иглин - Загорная линияһы барлыҡҡа киләсәк. Лихачев һәм Төньяҡ сәнәғәт узелынан сығыусы транзит тимер юл транспорты ҡаланан ситтәге линияларҙан йөрөйәсәк. Бушаған тимер юлдар ҡала халҡын ташыуҙа файҙаланасаҡ.

**Программаны эшләүселәр тарафынан ҡала халҡының теләктәре һәм ялыуҙары иҫәпкә алынған.** "Өфөлә троллейбустар кәмене" тип ризаһыҙлыҡ белдерә бик күптәр. Хәҙер уларҙы тынысландырырға ла була. Өфөлә булған бөтә троллейбус һәм трамвай линиялары һаҡлап ҡалдырылыу ғына түгел, артабан һуҙыласаҡ. "Мөгөҙлө" транспорт Шаҡшала, Нижегородкала пәйҙә буласаҡ, ә Һупайлы, Богородский, Иҫке Өфө, Затон биҫтәләрендә улар һаны байтаҡҡа артасаҡ. Троллейбус селтәре оҙонлоғо 112 километрға тиклем (әлеге көндә 89 км) һуҙыласаҡ.

**Әлеге программала ҡаланың элекке проблемалары ла билдәләнеш алған. Хәҙер шул асыҡланды: 2015 йылда Өфөлә буласаҡ метро фәҡәт хыялда ғына тороп ҡаласаҡ.** 15,1 километр оҙонлоғондағы ер аҫты юлы Октябрь проспекты аҫтынан "Беренсе май" станцияһынан "Уң яҡ Ағиҙел" станцияһына тиклем һуҙылырға тейеш ине. Метрополитен төҙөү өсөн Октябрь проспектын 8-9 йылға ябып ҡуйыу талап ителәсәк. Ә был иһә тейешле кимәлдә үҫешкән инфраструктураһы булмаған ҡала өсөн бер нисек тә ҡулай түгел. Транспорт селтәрен киңәйтеү өсөн тимер юлды файҙаланыу маҡсатҡа ярашлыраҡ, тип табылды. Ҡаланың ҡатмарлы рельефы арҡаһында автобус туҡталыштарынан пассажирҙар перронға махсус лифттар ярҙамында төшәсәк.

Бынан тыш, "Өршәк" станцияһынан "Аэропорт" станцияһына тиклем электричка армыты төҙөү планлаштырыла. Яҡын араларҙа гараж бокстарынан арынып, күп ҡатлы ер аҫты гараждары төҙөлөшөнә өҫтөнлөк биреләсәк. Өфөлә ошондай троллейбус маршруттары асыу көтөлә: СССР-ҙың 50 йыллығы урамынан алып Менделеев урамы буйлап; Һупайлы - Бикбай - Гагарин - Жуков - Өфө шоссеһы - Невский урамдарынан. Был линия Һупайлы биҫтәһенән Урман паркы районы, Лихачев сәнәғәт районы һәм Черниковка менән тоташтырасаҡ.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# ЗАМАН ҮҘГӘРӘ, АСЫЛ ҮҘГӘРМӘЙ,

## йәки III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайынан һуң уйланыуҙар



**(Дауамы. Башы 1-се биттә).**

Быға тиклем яҙғаныбыҙса, Лениндың Башҡорт автономияһы хаҡындағы Килешеүҙе "ҡағыҙ киҫәге" тип атауы менән Владимир Путиндың "власть вертикале" бер үк мәғәнәгә эйә. Ҡоролтайҙа был хаҡта күп әйтелде. Германияла, мәҫәлән, власть вертикале тик бер осраҡта ғына - ил һуғыш шарттарында йәшәгәндә генә тормошҡа ашырыла. Был хәл Германияның Конституцияһына ла теркәлгән. Унда ҡаралғанса, Германия ниндәйҙер ил, дәүләт менән һуғышҡа инһә, федерация субъекттарының власть вәкәләтлеге тулыһынса үҙәккә күсә. Был күҙлектән ҡарағанда, беҙ Владимир Путин власҡа килгәндән алып һуғыш шарттарында йәшәгәнбеҙ һәм әле лә йәшәйбеҙ булып сыға. Тик дошманыбыҙ кем һуң? Американы? Ҡытаймы? Иранмы? Донъя капиталымы? Террорсылармы? Гастарбайтерҙармы?

Шулай уҡ 1917 йылда үткән өс Бөтөн башҡорт ҡоролтайҙары менән яңы шарттарҙа үткән өс ҡоролтай араһында шундай параллелдәр ҙә үткәрергә мөмкин булыр ине:

- ике осраҡта ла Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайҙары Рәсәй Хөкүмәте, уның үҙәк власы менән яңыса мөнәсәбәт зарурлығын һыҙыҡ өҫтөнә ала һәм ул мөнәсәбәтте һәр ваҡыт ике яҡлы килешеү формаһында ғына күрә;

-Башҡортостан Республикаһы, башҡорт милләте киләсәктә үҙенең һаҡланып ҡалыу мөмкинлеген тик дәүләтселек институтында һәм милли-территориаль ҡоролош берәмеге формаһында ғына күрә, һ.б.

1995 йылда үткән I Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, асылда, 78 йылдан һуң Бөтөн донъя башҡорттарының яңыса шарттарҙа тәүге тапҡыр йыйылып, милләттең барлығын, уның үҙ киләсәгенә ышаныслы аҙымдар менән атларға хоҡуҡлы, хаҡлы булыуын белдереү, бар донъяға иғлан итеү булғандыр ул. Шуға күрә лә тәүге ҡоролтайҙағы тик байрамдарға хас рух күтәренкелеген, күңелдәр балҡыуындағы эйфория шауҡымын аңларға ла мөмкин. Ошо уңайҙан мәшһүр йырсыбыҙ Мәғәфүр Хисмәтуллиндың 90-сы йылдар башында "Аҡ тирмә" клубында шығырым тулы залға әйткәне хәтерҙә: "Өфө урамдары буйлап йөрөгәнемдә мин үҙемде яңғыҙмын, бер бөртөк башҡортмон, тип хис итә инем. Яңылышҡанмын икән, баҡтиһәң, беҙ, башҡорттар, шул тиклем күпбеҙ икән ул...", - тигәйне йырсы ул саҡта күҙҙәренә йәш алып.

2002 йылда үткән II Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында иһә милләтебеҙҙең проблемалары тәрән өйрәнелеп, үҙебеҙҙең арала әйтелеп кенә үтелде, әле килеп, III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында күп кенә милләт проблемалары сиселеше объекты булған Рәсәй Федерацияһы властарына, уның Дәүләт Думаһына, Федерация Советына туранан-тура дәғүәләр ҡуйылды. Ныҡ итеп, бар донъяға ишеттерерлек итеп әйтелде ул дәғүәләр. Улай ғына ла түгел, 1917 йылдан алып төрлөсә сикләүҙәрҙә, тыйыуҙарҙа, баҫымдарҙа, ҡалыптарҙа һәм шартлылыҡтарҙа йәшәргә мәжбүр ителгән милләт фекере 93 йылдан һуң хәҡиҡәттең үҙе булараҡ бар донъяға яңғыраш алды. Һәр хәлдә, ҡоролтай ултырыштарының "Юлдаш" космик каналы аша тура эфирҙа күрһәтелеүе, һәр бер әйтелгән фекерҙең шундуҡ Интернет каналында урын ала барыуы шул хаҡта һөйләй. Әйтәйек, беҙ мәғлүмәт технологияларының был алымдарын I һәм II Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайҙарында тулы көсөндә файҙалана алманыҡ. XXI быуатты юҡҡа ғына "Мәғлүмәт быуаты" тип атамайҙар. "Мәғлүмәтле - батша, мәғлүмәтһеҙ - ҡол", тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр бит. III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының башҡаларынан айырылған төп үҙенсәлеге лә шундалыр: беҙ милләтебеҙҙең, республикабыҙҙың проблемаларын оло донъя кимәленә күтәреп, был проблемаларҙы дөйөм кешелек проблемаларының бер өлөшө итеп күрһәтә алдыҡ, буғай. Боҙ урынанан ҡуҙғалды...

**НИҺАЙӘТ...**

**Йәштәргә юл бирелде. III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы менән бер рәттән Башҡорт йәштәре ҡоролтайы ла үтте. Хәйер, 1917 йылда милләтебеҙ яҙмышын хәл иткән ҡоролтайҙарҙа төп көстәр ҙә шул уҡ йәштәр булған бит. Вәлидигә - 27, Халиковҡа - 23, Бикбовҡа - 28, Бабичҡа - 22...**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн ваҡытында түләмәүсе 29 ғаиләне фатирҙарынан сығарырға йыйыналар. Был ғаиләләрҙе суд ҡарарынан һуң махсус торлаҡтарға урынлаштырасаҡтар. Июнь башына судҡа торлаҡ өсөн бурыстар буйынса 1184 эш тапшырылған. Бындай бурыстарҙың дөйөм суммаһынан сығып ҡарағанда, ярты йылдан ашыу торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләмәүселәр 41 процент тирәһе.

✓2010 йылдың 14 октябренән 25 октябргә тиклем Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу үтәсәк. Өфөлә әлегә һайлау участкалары урынлашасаҡ махсус пункттар әҙерләнә башлаған. Баш ҡала халҡын иҫәпләү өсөн Өфөлә бөтәһе 4,5 мең кеше ҡатнашасаҡ. Белгестәр белдереүенсә, улар студенттарҙан, урындағы үҙидара органдарынан һәм һайлауҙарҙа ҡатнашырға теләк белдереүселәрҙән торасаҡ. Бының өсөн райондың дәүләт статистика органдарына мөрәжәғәт итергә кәрәк.

✓ЮНЕСКО эштәре буйынса Башҡортостан Республикаһы комитеты һәм "Скиф" нәшриәте әҙерләгән Башҡортостан буйынса белешмә донъя күрҙе. Ул сәйәхәтселәргә һәм туристарға, шулай уҡ республика, уның тәбиғи ҡомартҡылары, тарихы, кешеләре, йолалары менән яҡынданыраҡ танышырға теләүселәргә тәғәйенләнгән. Белешмәлә Башҡортостан ҡала һәм районДары тураһында мәғлүмәт тә тупланған.

✓Һаулыҡ һаҡлау системаһы үҫеше мәсьәләләре буйынса Башҡортостан Республикаһы Советының күсмә ултырышы быйыл баш ҡалала үтәсәк. Дәүләт Советы маршрутында ҡунаҡтар быйыл 4-се инфекция дауаханаһы, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре менән яфаланыусылар һәм юл-транспорт фажиғәһенә тарыусыларға комплекслы реабилитация ярҙамы күрһәтеүсе 5-се дауахана, 1-се һәм 46-сы поликлиникаларҙың эшмәкәрлеге менән танышасаҡ.

✓Өфөлә Параолимпиясыларҙы әҙерләү үҙәге төҙөлә башлаясаҡ. Проект эшләүгә дәүләт контракты төҙөү хоҡуғына тендер үткәрелде лә инде. Параолимпиясылар өсөн спорт үҙәген Затон биҫтәһенең Ҡамышлы урамында төҙөү планлаштырыла. Комплекс бер нисә залдан торасаҡ, трибуналарҙа тамашасылар урыны иҫәбе 1500 буласаҡ. Шулай уҡ ошонда 200 урынлыҡ ҡунаҡхана төҙөү ҙә күҙҙә тотола.

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

**Быға тиклем үткән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайҙарында эшҡыуарлыҡ үҫешенә тейешенсә иғтибар бүленмәгәйне. Был юлы эшҡыуарлыҡ өлкәһенең башҡорт халҡының киләсәген тәьмин итеүсе тармаҡ булыуын, яңы башҡорт образы әүҙем йүнсел булырға тейешлеген яҡшы аңлап, Ҡоролтай сиктәрендә "Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡтың үҫеш мәсьәләләре" тигән секция эшләне. Унда башҡорт эшҡыуарлығына ҡағылышлы төрлө мәсьәләләр күтәрелде, проблемалар ҡаралды, тәҡдимдәр индерелде, маҡсаттар ҡуйылды. Был секцияла ҡатнашҡан делегаттарҙың фекерҙәрен тәҡдим итәбеҙ:**

# БИЗНЕС ҺӘМ ВЛАСТЬ -

## улар йәнәшә генә йөрөй



**Руслан ҠАСИМОВ, Ленинград өлкәһе Гатчина ҡалаһы:**
- Ленинград өлкәһендәге башҡорт эшҡыуарлығын мин өс төркөмгә бүлер инем. Беренсе төркөмдә Башҡортостандан ситтә үҫкән эшҡыуарҙар тәшкил итә. Мәҫәлән, мин үҙем дә шундайҙар рәтенәнмен. Беҙ урындағы халыҡтан ҡалышмайынса, уларға ҡарағанда ла яҡшыраҡ йәшәргә тейешбеҙ, тигән ҡараштан сығып эш итәбеҙ. Быны беҙгә атай-әсәйҙәребеҙ ҙә, туғандарыбыҙ ҙа аңлы рәүештә күңелебеҙгә һеңдергән. Икенсе төркөмгә республикала үҙ урынын, үҙ юлын тапмаған эшҡыуарҙар инә. Улар бында йәшәгән башҡорт эшҡыуарҙарына ярҙам һорап мөрәжәғәт итә һәм үҙҙәренә юл ярып алғас, бер-ике йылдан бүтән башҡорттарҙы ла саҡырып алып, уларға ла нығынып китергә ярҙамлаша. Өсөнсө төркөмдө республиканан килеүсе студенттар тәшкил итә. Улар уҡып бөткәс, кире тыуған илдәренә ҡайтырға ашыҡмай, ошонда эшкә ҡалыу яғын ҡарай. Бының сәбәбе - Башҡортостанда эш урындары табыу мөмкинлегенең сикләнгәнлеге. Бына ошо өс төркөм дә берләшеп, арҡаға арҡа терәшеп эшләү - бынаһы киләсәк эше. Был беҙҙе көсәйтер ине, тигән өмөт бар.

**Дамир АЛЛАЯРОВ, Әбйәлил районы:** Беҙҙең барыбыҙҙың да ҙур мөмкинлектәре булған дәүләттә йәшәгебеҙ килә. Мин дә халҡымдың бай йәшәүен теләйем. Рәсәй, донъя кимәлендә үҙебеҙҙең милли бизнес-элита булырға тейеш, тип иҫәпләйем. Әммә, үкенескә ҡаршы, ҡайһы бер субъектив һәм объектив сәбәптәр арҡаһында беҙ юл ситендә тороп ҡалдыҡ. Бөгөн беҙҙең милләт вәкилдәре араһынан власть органдарында, етәксе урындарҙа эшләүселәр бик аҙ тәшкил итә. Бизнес һәм власть - улар икеһе йәнәшә йөрөгән төшөнсә. Бөгөн мин эшҡыуар, тимәк, иртәгә власта буласаҡмын, иртәгә мин властамын икән, тимәк, бизнестамын. Хәҙер бизнес власты булдыра. Эшҡыуарлыҡ өлкәһендә 20 йыллыҡ тәжрибәм булараҡ, беҙгә ҡарата властың ҡарашы үҙгәрә һәм, әйтергә кәрәк, яҡшы яҡҡа үҙгәрә башланы, тип әйтер инем. Беҙ үҙ яҙмышыбыҙҙы үҙ ҡулдарыбыҙға алырға тейешбеҙ.

Бөгөн үткән тарихыбыҙ тураһында уйлап илашып, хәҙерге тормошҡа зарланып ултырыр заман түгел. Үнкәселдәрҙе һәр ваҡыт тукмайҙар. Беҙгә туп-тура алға ҡарай ҡыйыу атларға кәрәк. Күберәк йәштәр менән эшләргә, улар араһынан лидерҙар тәрбиәләргә кәрәк. Үҙебеҙҙең полковниктарыбыҙ, генералдарыбыҙ, адмиралдарыбыҙ булырға тейеш. Шуға ла беҙгә илашырға түгел, ә берләшеп эш итергә кәрәк.

**Миннулла ҒӘБИТОВ, Ырымбур өлкәһе Александровка районы:** Мин үҙем ғүмер буйы ергә бәйле эштә эшләнем. Халҡыбыҙ бер ваҡытта ла үҙ ерен, тыуған тупрағын һатмаһын, үҙ ерендә эшләп, шунан үҙенә лә, халҡына ла файҙа алырға өйрәнһен ине. Күршең бай булһа, һинән үтескә һорамаҫ, тип әйтәләр бит. Беҙгә балаларҙы йүнселлеккә, аҡса табырға өйрәтергә кәрәк. Арабыҙҙа эшҡыуарҙар күбәйһә, илебеҙҙең һәр өлкәһе бынан файҙа күрер, тип уйлайым. Мәсеттәр һалыныр, китаптар сығыр, мәктәптәр төҙөлөр, гәзит-журналдарҙы күберәк алдырырҙар.

**Азамат ХЫЗЫРОВ, Мәскәү ҡалаһы:** Әлеге ваҡытта мин отставкалағы подполковник булараҡ, артабан тормошомдо нисегерәк дөрөҫ ҡорорға тигән уй менән янам. Мин уны эшҡыуарлыҡта күрәм, тик ул минең өсөн яңы өлкә булғас, өйрәнеп йөрөйөм, асылына, серенә төшөнәм. Ғүмер буйы ҡырҙа дәүләт хеҙмәтендә йөрөп, үҙемә бер ни тиклем карьера эшләнем, хәҙер үҙем өсөн, халҡым өсөн эшләп алырға ваҡыттыр, тип уйлайым. Секция ултырышындағы сығыштарҙан эшҡыуарлыҡтың милләт киләсәген тәьмин итеүсе бер тармаҡ булыуын аңлап, рухланып, күңел күтәрелеп китте. Хәҙер ошонда ҡуйылған маҡсаттарҙы бергәләшеп тормошҡа ашырыу буйынса эш итмәксе инде.

**Лидия БАЙҒУЖИНА, Силәбе өлкәһе Озерск ҡалаһы:** Озерск ҡалаһы илдең ядро ҡалҡаны булып тора. Беҙҙә ядро ҡалдыҡтарын эшкәртәләр. 1945 йылда Советтар Союзының бөтә аҡыллы баштары, элитаһы был ҡаланы төҙөүгә йүнәлтелә. Башҡортостандың уртаһында тиерлек урынлашҡан ҡалаға башҡорттар ҡара эшкә килә. Минең атай-әсәйемдәр ҙә бында ябай эшселәр булараҡ килеп төпләнә.

Беҙ, Озерск ҡалаһындағы башҡорт эшҡыуарҙары, үҙебеҙсә милләттәштәребеҙҙең аңын уятыу, рухын күтәреү өсөн төрлө саралар ойоштораБыҙ, байрамдар уҙғарабыҙ. Мин "Күңел моңдары" тигән ансамблде тергеҙҙем. Шулай уҡ "Умырзая" ижад коллективы эшләп килә. Быйыл Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына арнап, ике ансамбль бергә байрам концерты ойошторҙоҡ. Был сараға һөнәрселек лицейынан башҡорт балаларын саҡырҙыҡ. Унда яҡын-тирә ауылдарҙан йыйылған балалар уҡый. Улар был байрамға шул тиклем шатланышып, ашҡынып килделәр, бер кемде лә өгөтләп, йәки көсләп килтерергә тура килмәне. Унда башҡорт яугирҙары, батырҙары тураһында һөйләнек, башҡорт йырҙарын яңғыраттыҡ. Балаларҙың, алдындағы бер ризыҡты ла ҡапмайынса, йотлоғоп тыңлап ултырыуҙары беҙҙе тетрәндерҙе. Улар беҙҙән бындай сараларҙың йышыраҡ үткәрелеүен һораны. Беҙ уларҙың үҙ халҡының тарихын, мәҙәниәтен белеп, уның лайыҡлы улы һәм ҡыҙҙары булып үҫеүҙәрен теләйбеҙ. Шуға ла әле Башҡортостанда Ҡоролтай булыуын ишеткәс, беҙҙе делегат итеп һайламаһалар ҙа, үҙ хәстәребеҙ менән килдек. Бөтә донъянан шул тиклем башҡорт халҡы йыйылған сарала ҡатнаша алыуыбыҙға ҡыуанып бөтә алмайбыҙ, милләттәштәребеҙҙең ялҡынлы сығыштарын, аҡыллы һүҙҙәрен тыңлап киндек, рухландыҡ. Был беҙгә артабан эшләргә, йәшәргә көс-ҡеүәт бирҙе.

**Венера ЙОСОПОВА, Бөрйән районы хакимиәтенең иҡтисад бүлеге начальнигы:** Бөгөн халыҡ ҡайҙандыр эш биргәндәрен көтөп ятыу файҙаһыҙ икәнлеген, үҙ эшенде йүнләргә кәрәклеген аңланы. Ниндәй ҙә булһа ла өлкәлә үҙ эшен асырға теләүселәр көндән-көн күбәйә башланы. Географик урынлашыуы буйынса беҙҙең район эре предприятиелар төҙөүгә ҡулайлы түгел, шуға ла уның иҡтисады бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа бәйле. Быйыл йыл башынан ғына 50 яңы эшҡыуар теркәлде, районда бөтәһе 380-дән артыҡ эшҡыуар иҫәпләнә. Улар араһында теркәлгәненән бигерәк теркәлмәгәндәре лә бар бит әле. Мәҫәлән, ауылдарҙа халыҡ районға килгән туристарға төрлө продукция һата, көнкүреш хеҙмәте күрһәтә - был да бит үҙенә күрә бәләкәй эшҡыуарлыҡ һанала. Беҙҙә бөтә республикаләр кеүек үк сауҙа өлкәһе киң үҫеш алған. Унан ҡала ағас эшкәртеү киң йәйелдерелгән, һәр ауылда тиерлек пилорама бар, район буйынса уларҙың һаны 90-ға етә. Бура бурап һатыусылар күп. Ағасҡа ғына йәбешеп ятып булмай, икенсе төр продукция етештереп сығарыу ысулын да уйлап табырға тейешбеҙ. "2008-2010 йылдарҙа Бөрйән районында туризмды үҫтереү" тигән республика программаһына ярашлы, туризм өлкәһен үҫтереүгә ныҡлап тотондоҡ. Бәләкәй эшҡыуарлыҡта ла туризм буйынса эшләүселәр бар. Быға тиклем беҙҙә автосервис юҡ ине, ул барлыҡҡа килде. Халыҡты тукландырыу өлкәһе аҡһай ине. Хәҙер район үҙәгендә хәләл ризыҡтар кафеһы асылды. Шулай итеп, халыҡ үҙ күнөн үҙе күрергә, юҡты бар итергә, булмағанды булдырырға, тормошто сағыу төҫтәргә күмергә өйрәндә.

**Динара ЯҠШЫБАЕВА яҙып алды.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

### Мастопатия булһа



2 ҡалаҡ бәйгәмбәр тырнағын (ногтки календулы) 1-әр ҡалаҡ татлы тамыр (корень солодки) мәтрүшкә үләне һәм сәскәһе, ҡарағат япрағы, левзея тамыры, 1 балғалаҡ сөйәл үләне (чистотел) алып 1 литр ҡайнар һыу менән бешекләп, ике сәғәт тотҡас, көнө буйы эсеп бөтөргә. Дауалау курсы - ике аҙна.

Аналыҡта шеш булғанда табип күҙәтеүе аҫтында түбәндәгесә дауаланырға була: 1/3 стакан кедр сәтләүеге ҡабығын ярты литр ҡайнар һыу менән бешекләп, талғын утта 5 минут ҡайнатҡас һөҙөп, көнөнә 3 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә. 10 көн ял иткәс, дауаны тағы ҡабатларға.

Ғөмүмән, мәтрүшкә, бесәй ҡойроғо (шалфей), ҡайын еләге япрағы, ҡомалаҡ катын-ҡыҙ үләндәре һанала.

❖ 10 грамм мәтрүшкә, 10 грамм ҡайын еләге япрағы алып, 3 стакан ҡайнар һыу менән төнәтеп, көнөнә 3 тапҡыр эсергә. 10 көндән һуң ял итеп алырға кәрәк.

❖ 2 балғалаҡ ҡомалаҡты 1 стакан ҡайнар һыу менән төнәткәс, ике өлөшкә бүлеп, төш ваҡытында һәм кис эсергә. Дауалау курсы - 10 көн.

❖ 1 балғалаҡ шалфейҙы 1 стакан ҡайнар һыу менән 20 минут төнәткәс, 10 көн буйы көнөнә 3 тапҡыр стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә.

### Йөрәк һәм бал

Төрлө йөрәк ауырыуҙары булғанда, бал хәлһеҙләнгән йөрәк мускулдарын нығыта. Шәкәр диабеты булғанда ла балдан баш тартырға ярамай, сөнки ул йөрәк эшмәкәрлеген көйләй. Бик ауыр йөрәк сирле кеше 1-2 ай дауамында тәүлегенә 40-50 грамм бал ашаһа, хәле яҡшыра.

### Бал һәм гөлйемеш

Бер ҡалаҡ гөлйемешкә 2 стакан ҡайнар һыу өҫтәп 10 минут ҡайнатҡас, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә лә, 10 грамм бал өҫтәп, һәр кис һайын 1-әр стакан эсергә. Шулай уҡ 40-50 грамм эремсекте бал менән ҡушып ашаһаң да файҙаһы ҙур.

**Алһыу ҒӘЗИЗОВА.**

*✓ Ирек Зарипов башҡорттоң һынмаҫ рухын, ысын батырлығын кәүҙәләндереүсе кеше булараҡ күңелдәргә рух өҫтәне. Уға ошонда уҡ башҡорт бүреген кейҙереү - үҙе үк боронғо йыйыындар йолаһын хәтерләтте.*



ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

**Шаулап-гөрләп I Башҡорт йәштәре ҡоролтайы ла үтеп китте. Оҙаҡ әҙерләнелде уға, ә уның үтеп киткәнен береһе лә һиҙмәй ҡалды. Барыбер ҙә ваҡыт бик аҙ бирелде был сара өсөн, йәштәр йәштәрсә гөрләп-бәхәсләшеп тә өлгөрмәне. Тик эш унда түгел, бәхәсте матбуғат биттәрендә лә, интернет-форумдарҙа ла ҡороп була. Яҡын арала Йәштәр ҡоролтайының үҙенең сайты булыр, тип ышанам, шунда туйғансы аралашырбыҙ, бәхәс ҡорорбоҙ, яңы осрашыуҙар билдәләрбеҙ. Иң мөһиме ул түгел. Иң мөһиме - баш ҡалабыҙ уртаһында ете йөҙҙән ашыу ғәйрәтле, рухлы башҡорт йәштәренең бергә йыйылып, бер-береһенең тын алышын, рухын тойоп ултырыуы. Нимә генә тимәгеҙ, залдағыларҙың барыһы ла тарихи ваҡиғаға шаһит кешеләр итеп хис итте үҙен.**

# КҮП ҺҮҘ МЕНӘН МАУЫҠМАЙЫҠ,

## йәки Беренсе Йәштәр ҡоролтайы хаҡында бер кәлимә һүҙ



Башҡорт йәштәре ҡоролтайы ысынлап та башҡорт рухында үтте. Һәм һәр тарихи ваҡиға кеүек, был сара тәрән мәғәнәгә, символикаға эйә булды. Ҡоролтай башланыр-башланмаҫ элек "Күк бүре" ойошмаһы егеттәре үҙҙәренең лидеры Азат Сәлмәновты, ә "Туған тел" клубы ағзалары үҙҙәренең етәксеһе Тимур Мөхтәровты президиумға ултыртыуҙы талап итеп, ҡыҙыу сығыш яһап алдылар. Һөҙөмтәлә, Тимур Мөхтәров президиумдан урын алды, ә Азат Сәлмәнов егеттәре менән залдан сығып китте. "Күк бүре" ойошмаһын хәҙер инде белмәгән кеше юҡтыр. Эсмәгән, тартмаған, спорт менән шөғөлләнгән башҡорт егеттәре һәм ҡыҙҙары ойошмаһы ул. Уларҙың сығып китеүе үҙе үк бер символик күренеш булды. Башҡорт ҡыҙыулығын, яугирлеген һынландырҙы улар. Әммә уларға сабырлыҡ етешмәне. Артабан егеттәр ҡыҙыулыҡ һәм ғәйрәт менән генә эш итмәһендәр ине, ойошманың абруйын күтәрер өсөн, әлбиттә, аҡыл үә сабырлыҡ та күрһәтергә кәрәк.

Ә бына ҡоролтайҙа делегат булып ҡатнашҡан, президиумдан урын алған Параолимпия чемпионы Ирек Зарипов башҡорттоң һынмаҫ рухын, ысын батырлығын кәүҙәләндереүсе кеше булараҡ күңелдәргә рух өҫтәне. Уға ошонда уҡ башҡорт бүреген кейҙереү - үҙе үк боронғо йыйыындар йолаһын хәтерләтте. Батырға - оло бүләк.

Заманыбыҙҙың кире һәм ыңғай яҡтарын кәүҙәләндергән, фәһемле, шул уҡ ваҡытта ҡыҙыу сығыштар ҙа күп булды Йәштәр ҡоролтайы эшендә. Нимәһе күңелде ҡырҙы: йәштәребеҙ оло быуындан күп һәм пафослы һүҙ һөйләү өлгөһөн яҡшы үҙләштергән. Был әлеге көндә беҙҙең иң ҙур етешһеҙлек. Үҙенең ҡоролтайында, һәр сығышта йәштәр ҡыҙыҡлы тәкдимдәрҙе уртаға һалып һөйләшергә тейеш ине. Күрәһең, был - киләсәк эше, иң мөһиме, беҙ үҙебеҙҙең алдынғы башҡорт йәштәренең төп етешһеҙлеген белдек. Ул - күп һүҙлелек менән мауығыу. Диагнозды белмәйенсә, сирҙе дауалап булмай, бына хәҙер диагнозын белдек инде, уға аҙып китергә ирек бирмәҫкә, йәштәрҙең көсөн, ғәйрәтен халҡыбыҙ, йәмғиәтебеҙ өсөн файҙалы, аныҡ эш эшләүгә йүнәлтергә кәрәк.

Сабырлыҡ, тигәндәй. Был көндө ҡоролтайҙы алып барыусы Фәнзил Әхмәтшинға ошо һүҙҙе йыш ҡабатларға тура килде. Дини йәштәребеҙҙең ҡыҙыулығын баҫыу, урынһыҙ сығыш яһаусыларҙы бүлдереү еңелдән булманы Фәнзилгә. Үҙенең йомғаҡлау сығышында ла сабырлыҡ тураһында һөйләне ул. Эйе, сабырлыҡ, аҡыл менән эш итеү, һүҙҙе үлсәп һөйләү һымаҡ күркәм сифаттар бик кәрәк беҙҙең йәштәребеҙгә, шуны барыһы ла аңлаһын ине лә бит. Ә Фәнзил Әхмәтшин ошо йәһәттән матур өлгө күрһәтте барыбер ҙа - үҙ-үҙен тотошо, ораторлыҡ оҫталығы менән башҡорттоң сабыр аҡылын, толерантлыҡ һәм дипломатия һәләтен кәүҙәләндерҙе.

Ҡоролтайҙағы сығышы ваҡытында Президентыбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы, башҡорт милләтенең юғары үрләүе алда әле, тине. Тарихта яҙылыуынса, башҡорттар бөтә илгә һәм донъяға ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итеү өлгөһө булып торған. Хәҙер ҙә тап башҡорттар Рәсәй федерацияһын ҡотҡарырға тейеш.

Шуға ла башҡорт йәштәре алдында ысынлап та тарихи миссия тора. Был миссияны атҡарып сығарабыҙмы, әллә ҡәҙерле ваҡытыбыҙҙы яңғырауыҡлы һүҙҙәр һөйләп үткәреп, бер заман бөтөнләй икенсе илдә уянырбыҙмы - быны һәр кем үҙ аҡылы, йөрәге һәм намыҫы менән аңларға тейеш. Иң мөһиме, ике ҡоролтай башҡорт йәштәренә ике лидерҙы асыҡ билдәләне. Улар - Азамат Ғәлин һәм Фәнзил Әхмәтшин. Беҙгә хәҙер күп һүҙ менән мауыҡмайынса, артыҡ амбицияларға бирешмәй, Оло ҡоролтайҙың һәм Йәштәр ҡоролтайының башҡарма комитеттары эргәһендә тиҙерәк туплanырға һәм ғәмәли эштәр атҡарырға ваҡыт.

Ҡоролтайҙа бөтә мәсьәләләрҙе хәл итеп булмай, кәрәк тә түгел. Мәсьәләләрҙе хәл итер өсөн беҙгә көндәр, айҙар, йылдар насип булһын, тип теләйек. Ғәйрәтебеҙгә, яугир рухыбыҙға сабыр аҡыл ҡушып, милләттәшебеҙ Ирек Зарипов кеүек ныҡышмал булайыҡ. Һәм иң мөһиме - күп һүҙ менән мауыҡмайыҡ.

**Зөһрә ДИҠҠӘТОВА.**

УЙЛАНАЙЫҠ...

# АУЫЛ ХӘЛЕ АУЫР

## Уны яҡшыртыу юлдары бар

**Алдыбыҙҙа торған иң оло мәсьәләләрҙең береһе, борсолоуыбыҙ сығанағы - демографик хәлебеҙ. Буш хәбәр теҙмәһе менән ҡаңғыртмаҫ өсөн факттарға мөрәжәғәт итәм һәм миҫалға тыуған ауылым Темәсте килтерәм. Һандарҙы иғтибар менән тыңлауығыҙҙы һорайым.**

Алдыбыҙҙа торған иң оло мәсьәләләрҙең береһе, борсолоуыбыҙ сығанағы - демографик хәлебеҙ. Буш хәбәр теҙмәһе менән ҡаңғыртмаҫ өсөн факттарға мөрәжәғәт итәм һәм миҫалға тыуған ауылым Темәсте килтерәм. Һандарҙы иғтибар менән тыңлауығыҙҙы һорайым.

Темәс ауыл советында ошо йылдың 31 майына ҡарата бөтәһе 5911 кеше теркәлгән, шуларҙың 2890-е - ир-егет, 3021-е - ҡатын-ҡыҙ. Башҡорттар 5381, шуларҙан 2628-е - ир-егет, 2753-ө - ҡатын-ҡыҙ.

Ошонан һуң ҡайҙан артһын милләтебеҙҙең һаны? Тел сарлап ҡына һан арттырып, башҡа, йәнәһе, "продвинутый" милләттәрҙең ят ғәҙәттәрен үҙләштереп кенә халҡыбыҙ сифатын күтәреп булмай. Халыҡтың сифатын иманлы булып, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе, милли үҙенсәлектәребеҙҙе һаҡлап, намыҫ менән йәшәп кенә күтәреп була. Быны өсөн тәү сиратта ғаилә ҡорорға кәрәк. Ә йәштәребеҙ өйләнешергә ашыҡмай. "Йәштәребеҙ", тиеүемде "ир-егеттәребеҙ" тип аңлағыҙ. Сөнки бөтә эш башында - яҡшыһында ла, яманында ла - ир-егеттәр тора. Егеттәребеҙ тәүәккәл түгел, ир-ат яуаплылығын тоймайҙар. Атай-әсәй, туғандар, милләтебеҙ, еребеҙ, һыуыбыҙ алдындағы яуаплылыҡты оноттолар. Замана шауҡымына һылтанып, 25-28, хатта 35 йәштәренә ҡәҙәр "егет булып" йөрөүселәр хаттин күп. Көсәнмәй генә, тәмәке көйрәтеп, һыра, араҡы эсеп, төрлө эске мәжлестәре ҡороп, ураған һайын яңы ҡатындар менән осраҡлы енси бәйләнештәргә инеп, йәш ҡыҙҙарҙы әүрәтеп, боҙоп, йәшәй бирәләр.

Анһат, ҡулай шулай йәшәүе, бер ниндәй бурыс та, яуаплылыҡ та юҡ - рәхәт тормош! Ә ҡыҙҙарыбыҙҙың сараһыҙҙан ир-егеттәрҙең ошондай мөнәсәбәтенә риза булыуҙан башҡа мөмкинлектәре юҡ. Ҡыҙҙарыбыҙ 18 йәшенә тулыһынса өлгөрөп етә, тәбиғәт уларға йөкмәткән бурыстарын үтәргә әҙер була. Ләкин замананың йәшәү ҡануны буйынса 22 йәштәренә ҡәҙәр уҡыйҙар. Ошонан да ҡалмай кейәүгә сығырға ине лә бит, ләкин... Егеттәребеҙ әле ихласлап донъя көтөрлөк булып етлекмәгән, күпселек осраҡта инфантиль булып ҡалалар. Аптыраған көндән күп ҡыҙҙарыбыҙ, статистика буйынса биш ҡыҙҙың береһе, башҡа милләт кешеһенә тормошҡа сыға, балалар табып, башҡа милләт һанын ишәйтә. Йә көнбайышҡа хас тормош алып барырға мәжбүрҙәр ("гражданский брак" тип йөрөтәләр быны), йә фәхишәлек юлына баҫалар. Шулай итеп, үҙ иркенә йәшәп йөрөгән башҡорт ир-егеттәребеҙ ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы төрлө аламалыҡтарға этәрә, кәмһетә. Ҡыҙғаныс.

Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер ир-егеттәребеҙ, үҙҙәре ғаилә башлығы булараҡ өлгө күрһәтергә эшкинмәүгә ҡарамаҫтан, башҡаларға аҡыл өйрәтеп маташа, милләт, тип оялмай хәбәр һөйләй. Нонсенс бит был! Үҙенең бәләкәй ғаилә-дәүләтен булдырмай ғына оло милләт ҡайғырталар, имеш.

Бер ай элек дәүләтебеҙ гөрләтеп Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығын үткәреп ебәрҙе. Ошо айҡанлы телевидение һуғыш тураһында төрлө кинофильмдар күрһәтте. Шул киноларҙың ҡайһы берҙәрендә беҙ хыянатсы һалдаттарҙы күрһәткән эпизодтарҙы нәфрәтләнеп ҡараныҡ: "Ҡайһылай яуыздар, хыянатсылар!" Хыянат иткән һалдаттар, аңлашыла, берҙән-бер ғәзиз йәндәрен һаҡлап алып ҡалыр өсөн шундай түбәнселеккә барған. Ә беҙ, бөгөнгөләр, милләтебеҙҙең аяныслы тарихы күҙлегенән үҙебеҙгә ҡарайыҡ әле. Еребеҙ-илебеҙ таланыу, ихтилалдар, меңәрләп яндырылған ауылдарыбыҙ, яуҙарҙан һуң күпләп ҡоллоҡҡа һатылған ҡатын-ҡыҙ, бала-саға, язаланған, аҫылған, ҡабырғаларынан эленгән, баштары сабып үлтерелгән ир-егеттәребеҙҙе иҫкә төшөрәйек... Улар күҙлегенән сығып ҡарағанда, кем һуң беҙ? Дөрөҫө шул: беҙ - үҙ иркебеҙ менән хыянат итеүселәр! Сөнки үҙ еребеҙҙә ысын хужа булып йәшәргә ынтылмайбыҙ.

90-сы йылдарҙан башлап ошоғаса байтаҡҡа үрсеп, йәлсеп ҡалырға мөмкинлек булды, ә беҙ ул мөмкинлекте ҡулдан ысҡындырҙыҡ. Үрсер урынға бик күп типһә тимер өҙөрлөк ир-егеттәребеҙ үлешеп-ҡырылышып бөттө. Бөтәһендә лә бер бәлә: араҡы-самогонға туймаҫ убыр тамаҡ. Кем аҫылынып, кем батып үлде, кем тонсоҡто, янды, тунды, ағыуланды, йә үҙе кеүек иҫерек баштарҙан туҡмалып үлде, йә иҫерек килеш техника йөрөтөп, фажиғәгә осраны... Кем, нимә ғәйепле һуң бында? Ситтән индерелгән, беҙгә бөтөнләй ят "ҡиммәттәр" буйынса йәшәүебеҙ ғәйепле. Ата-бабаларыбыҙ йәндәрен аямай еребеҙҙе һаҡлап алып ҡал-

| | |
|---|---|
| **Тыуым:** | **Никахлашҡандар:** |
| 2008 йылда - 103 бала. | 2008 йылда - 28 пар. |
| 2009 йылда - 91 бала. | 2009 йылда - 29 пар. |
| **Үлем:** | **Айырылышҡандар:** |
| 2008 йылда - 99 кеше. | 2008 йылда - 19 ғаилә. |
| 2009 йылда - 80 кеше. | 2009 йылда - 19 ғаилә. |

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

**Лира НИҒМӘТУЛЛИНА, Мәскәү ҡалаһы:**

- Минеңсә, замана башҡорт йәштәре иң алдынғы, белемгә ынтылыусан, әүҙем, тәүәккәл, маҡсатлы, фекерле, аңлы, ғорур булырға тейеш. Беҙгә мәүешләнеп йәшәргә ярамай, йоҡлап йөрөргә хаҡыбыҙ юҡ. Битараф булмау шулай уҡ мөһим шарт. Сит ерҙәрҙең йәшәйеше менән танышып, шул йәшәйештең кимәлен баһалап, һәйбәт яҡтарын үҙебеҙҙең республикабыҙ файҙаһына ҡуллана белеү кәрәк. Идара итеү, сәнәғәт, фән һ.б. өлкәләрҙә позицияларыбыҙҙы юғалтмаҫ өсөн үҙебеҙҙең милләттән булған юғары квалификациялы йәш белгестәр күп булыуы мөһим. Бөгөнгө көндә республикала ғына түгел, ә Мәскәү һәм Санкт-Петербургтың иң элиталы вуздарында уҡып йөрөүсе ябай башҡорт ҡыҙ һәм егеттәр тураһында ла әйтеп китергә кәрәк. Улар араһында ҡала балалары ғына түгел, ә баш ҡалала урынлашҡан гимназия, лицейҙарҙы тамамлаусы ауыл балалары булыуы бигерәк һөйөнөсләү. Уларҙың атаәсәләренең балаларының киләсәген хәстәрләүе һәм ул-ҡыҙҙарын ситкә уҡырға ебәреүе маҡтауға лайыҡ. Тик Мәскәү вуздарын тамамлаусы башҡорт йәштәре мотлаҡ республикабыҙға ҡайтырға тейеш. Һәр студент менән бәйләнеш тотоорға, уларҙы Өфөгә саҡырып, республика мәсьәләләрен бергәләп хәл итергә тырышырға кәрәк, сөнки аҡсалы ҙур ҡала милләт төшөнсәһен, үҙ халҡын өсөн борсолоу тойғоларын юҡҡа сығарыу һәләтенә эйә. Ниңә беҙгә, мәҫәлән, башҡорт йәштәренә ярҙам итеүсе фондтар төҙөмәҫкә? Беҙҙең быны өсөн мөмкинлектәребеҙ юҡмы ни? Мәҫәлән, Себер йәштәре Прохоров фонды иҫәбенә халыҡ-ара конференцияларҙа ҡатнаша, Мәскәүҙең иң яҡшы учреждениеларында практика, Швеция, Германия, Испанияла стажировка үтә. Йәғни, уларҙың баһалап бөткөһөҙ эш тәжрибәһе алыу мөмкинлеге бар. Был белгестәр Мәскәүҙә эшкә ҡала йәки Америка Ҡушма Штаттарына китә тип уйлайһығыҙмы? Юҡ, улар мотлаҡ тыуған иленә ҡайта. Был турала үҙҙәре менән һөйләшкәндән һуң, улар нимә тип яуап бирә, беләһегеҙме? Үҙ ерендә хужа булып йөрөүгә ни етә, ти улар. Хужа һүҙе етәксе тигәнде генә аңлатмай, ул - тәрән мәғәнәгә эйә булған һүҙ, шуны бар башҡорт йәштәре лә аңларға тейеш.

**Диана ӘБСӘЛӘМОВА, Күгәрсен районы:**

- Шундай бай тарихлы, мәҙәниәтле халыҡ вәкиленән булараҡ, башҡорт йәштәренең һәр береһендә халҡы менән ғорурланыу, уны һәр осраҡта яҡларға әҙер булыу, милләттәштәрен яратыу тойғолары булырға тейеш. Бына насип булғас, Йәштәр ҡоролтайына килеп, башҡа район йәштәре менән аралашып, фекерләшеп, тәжрибә менән уртаҡлашып, үҙебеҙгә көс-ғәйрәт алдыҡ. Районда, ауылда булған саҡта, нисектер, был хистәрҙе кисермәйһең, донъя мәшәкәтенә күмелеп йәшәй бирәһең. Ҡоролтайҙан һуң уянып киткәндәй булынды, киләһе көндәрҙә тормошҡа ашырырға ниндәйҙер маҡсаттар барлыҡҡа килде. Шуныһына иғтибар иттем: аҡыллы, аңлы, ҡыйыу фекерле, сит телдәрҙе яҡшы белгән башҡорт йәштәре бихисап. Уларҙың халҡыбыҙ өсөн янып, ошо йүнәлештә ниндәйҙер эштәр атҡарып йөрөүе мине бигерәк һөҡландырҙы. Минеңсә, башҡорт йәштәре тап шундай булырға тейеш.

**Руслан ЗЫЯНБАЕВ, Бөрйән районы:**

- Замана башҡорт йәштәре замандан артта ҡалмай, тәрлө өлкәлә камиллашып, белемле, аңлы, ҡыйыу, башҡорт рухлы булырға тейеш. Мин үҙем Рәсәйҙең тәрлө ҡалаларында йәшәп киттем. Ҡайһы бер ҡалаларҙа башҡорттарҙың ниндәй милләттән икәнен йәшерәү күренеше әле һаман бөтмәгән. Икенсе яҡтан, уларҙы аңларға була: улар унда аҙсылыҡты тәшкил итә, ярҙам иткән, уларҙы аңлаған кеше юҡ. Замана башҡорт йәштәре ҡайҙа ғына йөрөһә лә үҙ милләтенең бәсен төшөрмәй, милләтте танытып йөрөргә тейеш. Юғары белемле йәштәребеҙ тәрлө өлкәлә, тәрлө ойошмаларға урынлашып, милләтебеҙгә файҙа килтерерҙәй, уны үҫтерерҙәй эштәр башҡарырға тейеш. Беҙҙе донъя кимәлендә белергә тейештәр. Әхмәтзәки Вәлидиҙең һүҙҙәрен иҫкә төшөрөп китһәк, ул былай тигән: "Телегеҙҙе һәм динегеҙҙе һаҡлағыҙ, техник фәндәрҙе өйрәнегеҙ". Ысынлап та, замана башҡорт йәштәре техник фәндәрҙе яҡшы белергә тейеш.

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА яҙып алды.**

ған, ә беҙ тырышып, йәлсеп, үрсеп, ебебеҙгә ысын хужа булып йәшәр урынға йөрөйбеҙ үҙ еребеҙҙә үгәй балалар кеүек.

Хәлдәр шулай уҡ өмөтһеҙмә һуң? Юҡ, милләтебеҙҙең хәлен яҡшыртырлыҡ потенциалыбыҙ етерлек беҙҙең. Беҙгә үйһыҙ, вайымһыҙ булып йәшәргә ярамай. Һәр беребеҙ иҫәпле генә, шуға үҙ ҡәҙеребеҙҙе үҙебеҙ белеп, алама ғәҙәттәрҙән арынып, йәшең етеү менән ғаилә ҡороп, ишәйеп йәшәргә бурыслыбыҙ.

Күп балалы ғаиләләребеҙ ҡайҙа йәшәй? Ауылда. Ауыл - милләттең таянысы, шул таяныс нык, сәләмәт булһын өсөн ауылға иғтибарҙы арттырырға кәрәк. Беҙҙең ауылдарҙа, бигерәк тә көньяҡ райондарыбыҙҙа, тамамланған циклы етештереү предприятиелары булдырырға күптән ваҡыт. Ауыл халҡы эштең иң ауырын эшләй, тик эшенең файҙаһын ғына күрә алмай.

Мал аҫырау - ауыр эш. Кәртә-ҡураһын төҙө, бесәнен сап, башҡа аҙығын әҙерлә, иртә таңдан тороп ашат, эсер, аҫтын таҙарт, һыйырын һау... Мәшәҡәте һанап бөткөһөҙ, әммә хәләл малының мәнфәғәтен тейешенсә күрә алмай ул. Йә үҙ ауылының бай алыпһатары, йә әрһеҙ ҡара халыҡ ярты хаҡҡа алып китә етештергән итен, һөтөн, үҫтергән картуфын. Әгәр дәүләтебеҙ ярҙамы менән ауылдарҙа һыуытҡыс ҡоролмалар ҡуйылып, ит һәм һөт эшкәртеү цехтары булдырылһа, үҙебеҙҙең республика халҡына еткәндәй бына тигән тәрлө хәләл ризыҡтар етештереп булыр ине.

Ағас эшкәртеү буйынса ла шул уҡ хәл. Әле милләттәш эшҡыуарҙарыбыҙ район үҙәктәренә йөрөп, ҡағыҙ эшен рәтләп, рөхсәт алып диләнкә бүлеп алалар, мең михнәт менән ағасты ҡырҡалар, бүрәнәләрҙе тейәп, таҡта ярыу станоғына алып килеп таҡтаға, трансаға бысалар. Шунан һуң шул сей таҡталарҙы "Камаз"-дарға тейәп, осһоҙ ғына хаҡҡа һаталар. Уртаса 1 куб.м. таҡта - 2700 һум. Шулай итеп, улар эштең иң ауырын башҡаралар ҙа, аҡсаның иң аҙын алалар.Таҡтаны киптереп, артабан эшкәрткәндә, уның хаҡы күпкә арта. Мәҫәлән, евровагонканың бер квадрат метры хаҡы 250-660 һум. Ишектәр, тәҙрә рамдары, яңаҡтар, штакетник һәм башҡа ағас продукцияны таҡтаның үҙенән күпкә ҡыйбат. Тик быларҙы етештерер өсөн таҡта киптергес - сушилкалар, яҡшы станоктар кәрәк. Был ҡоролмаларҙы һатып алып эшләргә теләүселәргә Хөкүмәтебеҙҙең финанс менән нығытылған махсус программаһы кәрәк.

Былар бөтәһе демографияға туранан-тура бәйле. Кешенең ышаныслы, аҡсалы эше булһа - ашарына, кейеренә, торлағын нығытырға, ғаилә ҡороп уны аҫырарға, балалар табырға мөмкинлеге лә, теләге лә була. Ә ир-егет өйләнә икән, тимәк, бер ҡатын-ҡыҙыбыҙ ҡараулы, терәкле. Тимәк, бер ҡатын-ҡыҙ хата юлдан аралана.

Ер мәсьәләһе киҫкенләшә. Ҡабул ителгән федераль ер законы буйынса ерле һәм бөтөнләй ерһеҙ башҡорттарға бүлендек. Шул уҡ ваҡытта был закон башҡа милләт кешеләрен ерле итте. Әле ауылдар ситтәрендә арыу уҡ кәртәләнеп алынған ерҙәр күренә башланы. Күрәләтә ерһеҙ ҡалған милләттәштәребеҙҙең ҡарашы был хәлгә билдәле, улар риза түгел ундай ғәҙелһеҙлеккә. Был закондың һөҙөмтәһен халыҡ аңлап етмәйерәк тора, төшөнөп етһә, ни булыр, билдәһеҙ. Ошо мәсьәләләр буйынса ла фекер алышыу кәрәк беҙгә.

**Илсур ИРНАЗАРОВ,**

**I Башҡорт йәштәре ҡоролтайы делегаты.**

**Баймаҡ районы**

**Темәс ауылы.**

## ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ИВАН ЛЕПЕХИН СӘЙӘХӘТНАМӘҺЕ,

## йәки XVIII быуаттағы башҡорт донъяһына бер ҡараш

Ағиҙел йылғаһының һул яҡ туғайлы ярында уның Күсәнәк исемле ҡушылдығына ҡойған Мәселе йылғаһы буйында дүрт йыл элек Бөгәнәш исемле татар ауылы барлыҡҡа килгән. Был ауыл эргәһендәге көкөртлө сығанаҡтары менән билдәле. Ауыл ҡаршыһындағы ҙур майҙанды батҡыл һаҙлыҡ биләй, унда Мәсәле йылғаһынан 40 аҙымлап ерҙә тәрәнлеге дүрт сажин, киңлеге алты сажин булған соҡор бар. Шул соҡорҙоң төбөнән дүрт шишмә урғылып сыға, һәм уларҙың һыуы айырым йылғасыҡ рәүешендә Мәсәләгә ағып төшә. Соҡор ситтәрен дә, йылға эсендәге ваҡ таштарҙы ла көкөртлө ләм ҡаплай, әммә ул Соковскиҙағы көкөртлө сығанаҡтарҙағы кеүек күп түгел. Ошо соҡорҙан йөҙ саҡрым тирәһендә тигеҙ урында ер аҫтынан дүрт бәләкәй шишмә бүҫелеп сыға, уларҙа ла көкөртлө ләм бар. Был шишмәләрҙә туф тип аталған көкөртлө таш үрмәләр ята; бынан көкөрт киҫәксәләренең алыҫыраҡ урында һыу менән йыуылып төшөп, һаҙлыҡта көкөрт сығанағының булыуы мөмкин түгеллеге тураһында фекер йөрөтөргә була. Һаҙлыкты төшкөлөктән һәм көнбайыш тарафынан билдәле таштарҙан хасил булған таш өйөмдәре уратып алған: шуға ла көкөртлө материяның ошо таш өйөмдәрендә булыу мөмкинлеге хаҡында һығымта эшләү өсөн нигеҙ юҡ түгел. Бөгәнәш янындағы көкөртлө сығанаҡтар көкөрткә Соковскиҙағы кеүек бай булмаһа ла, крәҫтиән хужалығы өсөн берҙәй зыянлы: шуға ла Бөгәнәш татарҙарының ҡорт аҫырарға тырышыуынан бер нәмә лә килеп сыҡмай.

Табындан 50 саҡрымда, Ағиҙелгә Стәрле йылғасығы ҡойған ерҙә, 1767 йылда батша ғәли йәнәптәренең үҙ исеменә тәғәйенләнгән юғары бойороғо буйынса Сембер ауҙагәре, ә хәҙер коллежский советник булған Тетюшев пристань төҙөй, һәм унан яҙ көнө бында тиклем булау менән килтерелгән Илек тоҙо судноларҙа Ағиҙел буйлап ебәрелә ине: бында күп кенә типтәр олоҫтары беркетелгән була. Тоҙ ебәреүҙән башҡа, бында коломенка тип йөрөтөлгән ҙур булмаған суднолар яһайҙар, ә төҙөлөшкә яраҡлы ағасты Уралдан өс йөҙ саҡрым тирәһе ерҙәргә тиклем ағыҙып килтерәләр. Күп биналарҙан башҡа, был урында ҙур ғына ағас бысыу тирмәне ҡоролған, унан Ағиҙелгә тиклем биш саҡрым тирәһе генә булыр.

Стәрлетамаҡ пристаненән 11 саҡрымда, Ағиҙел йылғаһының таулы яры буйында Ырымбурҙан Өфөгә барған юлға яҡын ерҙә Тура Тау (Городковая гора) тип йөрөтөлгән бейек тауҙарҙың береһе күренеп тора (Бында һүҙ Торатау тураһында бара. - **Ред. иҫк.**). Уның башына менеү мөмкинлеге булған бер ни тиклем һөҙөгерәк яғынан ҡарағанда, тауҙың бейеклеге ике йөҙ сажин самаһы булыр. Башҡорттар ошо тауға айырыуса ихтирам менән ҡарай, уны изге урынға һанап, хөрмәт итә.



Уларҙың риүәйәттәре буйынса, боронғо дәүерҙә бында Нуғай хан үҙенең ғаиләһе менән йәшәгән; һуңынан был урын Аллаһы Тәғәләгә инаныусы һәм айырымланып көн итеүсе, әүлиә тип аталған мосолмандарҙың төйәге булған. Беҙҙе быға башҡорт риүәйәттәрен һөйләүсе һәм белеүселәрҙең береһе булараҡ танылыу тапҡан Исмаҡ исемле башҡорт ышандырырға тырышты. Ошо тауҙан саҡырым ярым тирәһендә тәбәнәк, әммә киң булған Ҡыҙҙар тауы тип йөрөтөлгән курган бар. Башҡорттар һөйләүенсә, ошо курганда Нуғай хан күмәк күнел асыу һәм һый мәжлестәре ойоштороған. Башҡорттар тарафынан изге тип хөрмәтләнгән Тура Тау беҙҙе мул тотоноруға һәм башҡорттарҙың ҡурҡыуға бирелмәүен шарап менән ҡуҙғытырға мәжбүр итте: уларҙан бер кем дә, үҙҙәренең тауға бирелгән нәҙерҙәренең әлегә үтәлмәүенә һылтанып, беҙҙең менән ошо тауға барырға теләмәне, сөнки үтәлмәгән нәҙере булған кеше тауға менә алмай; быны үҙенә үҙе яуызлыҡ теләгән кеше генә башҡара алыр ине. Башҡорттарҙың яңылышыуына үкенеп, эстән уларҙың тауға менеү ауыр булғанлыҡтан ғына ҡарышыуы хаҡында уйлап, уларға һуңынан тауҙан бер ниндәй ҙә зыян булмаясағын, уның бер ниндәй нәҙергә лә тормауын күрһәтергә тырыштым. Әммә үҙҙәренең тәбиғи булмышы менән шөһрәт ҡаҙаныған яратыусы башҡорттар, бигерәк тә улар араһында күпте белеүсе булып танылғандары, беҙҙең дәлилдәребеҙҙе артыҡ күңелләнеп тыңламаны һәм, ахырҙа, ошо тау тураһында күп яҙылған Сыңғыҙ китабын иҫкә алып тормайынса, ошо ерлектә тыуған миҫал сифатында ике ваҡиға тураһында һөйләүҙе кәрәк тапты. Ошо изге урынға ерәнеп ҡараусы бер татар кешеһе, башҡорттарҙың хөрәфәти ҡарашына үҫ итеп, тауҙа ярау иткән; әммә был ғәмәл уның өсөн буш ҡалмаған: ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә уның бөтә нәҫел-нәсәбе ҡырылып бөткән. Үләт уның улынан башланған, ул үлер алдынан тауҙан төшөп килеүсе тәрлө йыртҡыстарҙың уның һәм бөтә ғаилә ағзаларының кәүҙәләрен өҙгөсләп ташларға әҙер булғанын күргән. Икенсеһе, бер ниндәй ҙә нәҙер бирмәйенсә, төлкә артынан ҡыуып барып, бөтөнөһөн дә көлкөгә ҡалдырам тип, тауға барып менеү менән һоро айыу тарафынан ботарланып ташланған.

(Дауамы. Башы 21-22-се, 24-се һандарҙа).

***✓ Белемле, телдәрҙе һәм закондарҙы яҡшы белгән, иҡтисадта балыҡ кеүек йөҙгән, күп аҡса эшләй алған яңы башҡорт образын булдырыу зарурлығы тыуҙы хәҙер.***







**Хөрмәтле милләттәштәр!**

**Беҙ, Өсөнсө Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы делегаттары, Ер шарының төрлө төбәктәренән гүзәл һәм бай дәүләттәрҙең береһе - Башҡортостанға йыйылып, йөрәк түренән сыҡҡан ошо мөрәжәғәтебеҙҙе башҡорт халҡына еткерәбеҙ. Ҡоролтайҙа яңғыраған ҡарарҙар, теләктәр башҡортмон тигән һәр башҡортҡа, дуҫлыҡ һәм татыулыҡты хуп күргән башҡа милләт вәкилдәренә, ил башлыҡтарына барып етһә ине. Беҙ башҡорт иле - Башҡортостанға, милләттәштәребеҙгә, уның яҡты һәм уңышлы киләсәгенә ҙур өмөттәр бағлайбыҙ, әммә киләсәктә милләтебеҙҙе һаҡлай һәм яҡлай алырлыҡ дәүләт механизмы һаҡланып ҡалыуына тулы гарантия бирә алмайбыҙ. Ошондай шарттарҙа милләттең үҙен-үҙе һаҡлай һәм яҡлай алырлыҡ потенциалы барлығын иҫкә төшөрөү фарыз. Һәр башҡорт кешеһе мотлаҡ үтәргә тейешле бурыстарҙан, ҡағиҙәләрҙән, ғәмәлдәрҙән, ҡанундарҙан бар була башҡорт халҡының йәшәү программаһы. Ошо программаны үтәй алһаҡ, халҡыбыҙҙың киләсәге яҡты һәм өмөтлө буласаҡ.**

**Беренсе бурыс - тарихыңды өйрәнеү аша милли үҙаңды уятыу.** Бар бәләләребеҙ тарихи хәтерҙе юғалтыуҙан, үҙеңдең кемлегеңде белмәүҙән килә. Ҡарағыҙ, бөгөн һәр халыҡ үҙен боронғораҡ итеп күрһәтергә ынтыла. Боронғоһо менән ғорурланған халыҡты берәү ҙә еңә алмай икәнен белә улар. Беҙҙең оҙон ғүмерле булыуыбыҙҙы ғалимдар башҡорттоң Уралда формалашып, уны бер ҡасан ташлап китмәүенә, шулай уҡ тарихи хәтерҙең быуындан-быуынға һаҡланып килеүенә бәйләй. Беҙҙең көс - тамырҙарыбыҙҙа. Ата-бабаларыбыҙҙың киләсәк быуындар ҙа һоҡланырлыҡ тарихи ғәмәлдәре етерлек. Һәр башҡорт тарихтағы Еңеүҙәребеҙ хаҡында белергә, шуға ҡарап рухын яңыртырға, ғорурлығын арттырырға тейеш! түгел, ә башҡорт ерен һата. Ер һатыусыға һәм быға булышлыҡ итеүсе кешеләргә түҙеп торғоһоҙ мөнәсәбәт булдырғанда ғына был хәлде туҡтатып буласаҡ.

**Башҡорттоң борон-борондан яугир зат булғанын да онотторға ярамай.** Ғәскәри хеҙмәттә булыу, бигерәк тә ата-бабаларыбыҙҙың байтаҡ йылдар казачий сословиела торған йылдарында, милләтебеҙҙе бар донъяға таныта, уны данлы халыҡтар рәтенә индерә. Яугирлыҡ, ҡаһарманлыҡ- ул башҡорттоң йәшәү рәүеше. Ошо йәһәттән башҡорт казактары традицияларын тергеҙеүҙе халыҡты күтәрә торған бер сара итеп ҡарайыҡ.

**Һәр башҡорттан башҡорт телле башҡорт үҫһен. Туған тел - ул аралашыу теле генә түгел.** үек бик күп халҡыбыҙ менталитетына хас булмаған, ҡайһылыр бер осорҙа ҡылыҡтарыбыҙға "йоҡҡан" сифаттарҙан да ҡотолорға кәрәк.

**Туғанлыҡ тойғоһо көслө булған милләт беҙ.** Шуға ла милләттәштәргә үҙ туғаның итеп ҡарарға өйрәнәйек. Бигерәк тә был етәкселәребеҙгә ҡағыла. Әгәр ҙә һин ниндәйҙер баҫҡысҡа күтәрелгәнһең, дәрәжәле кеше икәнһең, әйләнә-тирәңә күҙ һалырға ла онотма: эргәңдә милләттәш туғандарың бармы, ул юғарылыҡҡа уларҙы ла алып менгәнһеңме, әллә аҫта торғоҙоп ҡалдырғанһыңмы? Билдәле тәбиғәт ҡанунын иҫеңдә тот: туғанын ҡәҙерләмәгән үҙе лә ҡәҙерһеҙ булыр.

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫНА





**Башҡортостандың Рәсәйҙә сағыштырмаса һил йәшәүе иң тәүҙә республикаға исем биргән халыҡтың башҡаларҙы аңлап, кисереп, түҙеп йәшәй алыуынан килә.** Республикаға Башҡортостан исеме бирелгән икән, уның нигеҙен тәшкил иткән милләткә иғтибар һис шикһеҙ күберәк булырға тейеш. Нисек кенә тиһәк тә, донъяла башҡорттарҙың үҙ-үҙен һаҡлай һәм үҫтерә торған бүтән иле, ере юҡ. Ҡасандыр бүтән ҡәүемдәр төрлө сәбәптәр арҡаһында беҙгә килеп үҙ төйәген тапҡан һәм ошо ерҙең төп халҡы уларҙың милли һәм социаль ихтыяжына аңлы ҡараш менән йәшәй икән, башҡалар ҙа төп халыҡҡа шундай уҡ мөнәсәбәттә булырға тейеш. Был - толерантлыҡтың асылы.

**Аҫабалыҡ - күп быуаттар дауамында башҡорттоң билдәле бер ергә хужа булыу хоҡуғы - милләтебеҙҙе һаҡлап, туплап тороусы мөһим фактор булған.** 1920 йылға тиклем үҙ еренә үҙе хужа булған башҡорт. Зәки Вәлиди етәкселегендәге тәүге Башҡортостан хөкүмәтенең төп бурысы аҫаба башҡорттоң тыныс тормошон тәьмин итеү була. Аҫабалыҡтан яҙҙырыу башҡортҡа иң ҙур байлығыбыҙ ер икәнен онотторҙо. Әле беҙгә тарихи мөмкинлек бирелде. Шуны иҫтә тотоп, һәр беребеҙ тыуған еребеҙҙә нимәлер эшләп өлгөрөргә, ергә нығынып ҡалырға бурыслыбыҙ. Бөгөн кемдер ерҙе һата икән, ул үҙенекен Ул - күңел нуры. Ул - беҙҙең ҡан теле, һәр күҙәнәгебеҙ, ҡан тамырҙарыбыҙ, булмышыбыҙ теле. Ошоно тойһон һәр әсәй, һәр атай. Туған телһеҙ кеше - рухи зәғиф кеше. Иҫеңдә тот: балаларың һәм ейәндәрең ниндәй милләт телендә һөйләшә - һин шул милләткә хеҙмәт итәһең.

**Башҡорт - тәбиғәт балаһы.** Башҡорттарҙы урман характерлы кешеләр, тип тә атап була. Урмандарыбыҙҙың күпләп ҡырҡылыуы, еребеҙҙең ҡолаяланға әүерелеүе милләттең характерында ла сағылыш таба. Тимәк, милләтебеҙҙе һаҡлау өсөн уның характерын ҡылыҡһырлаған урманын да һаҡларға кәрәк булып сыға. Ә урманды тик милләт кенә һаҡлай ала.

**"Урал батыр" кеүек эпостарыбыҙҙы өйрәнәйек, балаларыбыҙға өйрәтәйек.** Мифологиябыҙ, эпостарыбыҙ, үҙ фәлсәфәбеҙ халҡыбыҙҙы мәңгелек йәшәр халыҡтар рәтенә ҡуя. Шуға ла бөгөн "Урал батыр" эпосын фәнни яҡтан өйрәнеү үҙе үк башҡорт милли фәлсәфәһенең нигеҙен яҙыу буласаҡ.

**Беҙгә халҡыбыҙ менталитетына хас иң гүзәл сифаттарыбыҙҙы һаҡлап,** нимә менән ғорурланырға, нимәнән ҡотолорға кәрәк икәнде лә билдәләргә кәрәк. Беҙҙең күптәребеҙгә, мәҫәлән, дыуамаллыҡ, алабарманлыҡ, тәкәбберлек, көнләшеү, биргән һүҙҙә тормау, эреләнеү, сабатаны түргә элеү ке-

**Шәхесен күтәргән халыҡ үҙен дә күтәрә икәнен онотмайыҡ.** Бына, мәҫәлән, Әхмәтзәки Вәлиди үҙенең төп идеологы итеп Зәйнулла Рәсүлевты атай. Беҙ бөгөн Башҡортостан Республикаһы тип аталған милли дәүләтебеҙ булыуы менән дә иң тәүҙә Зәйнулла ишан кеүек зыялы заттарға бурыслыбыҙ. Зәйнулла ишан Рәсүлев Аллаһы Тәғәлә асылын белеүҙең иң юғары рухи бейеклегенә етеп, "Ҡотоп Заман" титулына лайыҡ булған. Был исем суфый иерархияһының иң юғары кимәленә етеүҙе белдереп, ошолай тип нарыҡланған шәхестең Хоҙай тарафынан һайлап алынғанлығын, уның Хоҙайға яҡын вәли зат булыуын аңлатҡан. Ошондай шәхестәребеҙҙе күтәреп, Хоҙай ризалығына өлгәшәйек.

**Заман башҡорто имиджы булдырайыҡ.** Башҡорт имиджы - ул башҡорт рухы, башҡорттоң донъяға таралған күңел сафлығы, тоғролоғо, рухи батырлығы. Ошондай күркәм сифаттарыбыҙҙы заманға яраҡлаштыра белергә тейешбеҙ. Хәҙер заман үҙгәреүгә бәйле күп кенә илдәрҙә һәм халыҡтарҙа дәрәжә, имидж, бренд проблемаларына иғтибар көсәйҙе. Белемле, телдәрҙе һәм закондарҙы яҡшы белгән, иҡтисадта балыҡ кеүек йөҙгән, күп аҡса эшләй алған яңы башҡорт образын булдырыу зарурлығы тыуҙы хәҙер.

**Ҡатнаш никахтар башҡорттоң төп бәләһенә әүерелде.** Башҡорт милләте донъялағы бик күп халыҡтарҙың, ҡәби-

# Мөрәжәғәт

ләләрҙең иң көслө һәм күркәм сифаттарын үҙендә берләштерә алған. Беҙ үҙебеҙ генә ошо феноменды баһалап бөтөрмәйбеҙ һәм милләтебеҙҙең ырыу-ара никах потенциалын файҙаланыу урынына, милләт-ара никахтарға өҫтөнлөк бирәбеҙ. Милләт-ара никахтар иһә, һәр осраҡта ла беҙҙең файҙаға түгел, сөнки милләт-ара никахлы ғаиләләрҙә ҡала шарттарында башҡорт позицияһы көслө түгел.

▸ **Шәжәрә байрамдары үткәреү тураһында Хөкүмәт ҡарарын ғәмәлгә ашырыу бик фәһемле эш булды.** Төрлө төбәктәрҙә көн итеүсе ҡан-ҡәрҙәштәребеҙҙең үҙ милли тамырҙарын табыуы, тормошобоҙҙағы ҡапма-ҡаршылыҡтарға, ауырлыҡтарға бирешмәүе, теленә, диненә һәм еренә тоғро ҡалыуы халҡыбыҙҙың милли үҙаңы үҫешенең асыҡ сағылышы ул. Әммә әле шәжәрәне башлыса айырым ғаиләләр эшләтә. Тыуған ауыл, ырыу шәжәрәләрен эшләйек. Ауылды берләштереүҙең ошондай шәжәрә төҙөү формаһын бигерәк тә республикабыҙҙың төньяҡ-көнбайышы төбәгендә файҙаланыу фарыз.

▸ **Халыҡтың күңелен ҡуҙғатыуҙың, йөрәген уятыуҙың иң йоғонтоло сараһы - дингә ҡайтыу.** Башҡорт динде күңеле, йөрәге менән ҡабул итә торған милләт. Башҡорт үҙенең күңеле, ҡылған ғәмәле менән дини асылына тоғро. Рухи ҡыйралыш динебеҙҙән ситләшкәс башлана. Беҙ йөрәктәребеҙҙе уятыусы, халыҡты туплаусы көс асҡысының диндә икәнлеген аңларға тейешбеҙ.

▸ **Иң сетереклеләрҙән һаналып, оҙайлы эш алып барыуҙы талап иткән төп проблемаларыбыҙҙың береһе - заман талаптарына яуап бирерлек милли кадрҙарҙың аҙ булыуы.** Милли кадрҙар сәйәсәтен дәүләт органдары һәм учреждениелары ғәмәлгә ашырырға тейеш, һәм беҙ быны уларҙың иҫенә төшөрөп торорға тейешбеҙ. Кадрҙар сәйәсәтен хәл итеүҙең төп юлы һәм ысулы һөнәри белем алыу өлкәһе менән бәйле. 1000 кешегә тура килгән юғары белемлеләр һаны йәһүдтәрҙә иң юғары булһа, яҡуттарҙа һәм буряттарҙа үҫә барып, 20 проценттан уҙып китте, ә башҡорттарҙа ул ни барыһы 10 процент самаһы ғына тәшкил итә. Шулай булғас, халҡыбыҙҙың белем кимәлен күтәреү өлкәһендә беҙ бөгөн ең һыҙғанып эшләргә бурыслыбыҙ.

▸ **Ислам тәғлимәте "Уҡы!" тигән саҡырыуҙан башлана.** Һәр башҡорт үҙ туған телендә сыҡҡан баҫмаларҙы алдырырға, уҡырға, улай ғына түгел, шул баҫмаларҙың уның ихтыяжына яуап бирерлек, һорауҙарына яуап табырлыҡ рух сығанағы булыуына өлгәшеү өсөн уларҙың нәшер эшендә ҡатнашырға тейеш.

▸ **Меҫкенлек психологияһын күңелебеҙҙән йолҡоп алып ташларға кәрәк.** Бахырланыусылар һәр милләттә бар. Беҙҙекеләр халыҡ исеменән бахырланырға яратыусан булыуы менән ҡурҡыныс. "Башҡорт шулай инде..." тип, халыҡ исеменән меҫкенләнеүҙе ҡәтғи тыйығыҙ. Күңелде төшөрә торған һүҙ - йоғошло сирҙән дә алама. Ялҡаулыҡ, меҫкенлек - кешенең үҙ-үҙен юҡ итеү программаһы ул. Халҡыбыҙ эсә, тип һөйләүҙән туҡтап, "Башҡорт эсмәй", тигәнгә ғәҙәтләнәйек, ошоно һәр милләттәшебеҙҙең ҡанына һеңдерәйек.

▸ **Йәштәребеҙҙе маҡсатлы йәшәргә өйрәтеү фарыз.** Иң тәүҙә йәштәребеҙ аңына "Һеҙ - республика хужалары, республика, милләт киләсәге һеҙҙең ҡулда" тигән инаныуҙы һалырға кәрәк. Башҡа бөтөн маҡсаттар ошо инаныуҙан башланырға тейеш. Ошо илдең хужаһы икәнһең, тимәк, һин уның яҙмышы, уның сәскә атыуы өсөн яуаплылыҡты ла үҙ иңеңә алырға тейешһең.

▸ **Күрше өлкәләрҙә йәшәүсе башҡорттарҙың балалары хатта үҙ телен предмет булараҡ өйрәнеү мөмкинлегенән дә мәхрүм.** Силәбе, Свердловск, Курган, Ырымбур, Һамар өлкәләрендә йәшәүсе милләттәштеребеҙ үҙ ата-бабаларының ерендә көн итә, уларҙың балаларын уҡытыу өсөн милли мәктәптәр закон нигеҙендә мотлаҡ булдырылырға тейеш.

▸ **Сығышы менән аҫаба башҡорт вариҫтары булған милләттәштәребеҙҙең 20 проценты тиерлек көнбайыш диалектында һөйләшә.** Беҙҙең менән бер төптән сығыуҙарын иҫтә тотоп, көнбайыш башҡорттары менән мөнәсәбәттәребеҙҙе айырым бер программаға нигеҙләп ҡороу зарур.

▸ **Хәҙер ауыл үҙ яйына ҡалдырылып, уның яҙмышы үҙ ҡарамағына тапшырылды.** Ауыл ерендә йәшәүселәр араһында эшһеҙҙәр күп. Улар ауыл хужалығы менән шөғөлләнеүҙән килем алып булмау арҡаһында ҡалаларға китеп, ҡаңғырып йөрөй. Йәштәрҙең күпләп ситкә китеүе арҡаһында ауылдар бәләкәйләнә, мәктәп йәшендәге балалар аҙайғандан-аҙая бара. Был бөтә дәүләт кимәлендәге мәсьәлә.

▸ **Башҡорттар араһында эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнеүселәр аҙ.** Бигерәк тә халҡыбыҙҙың ғәҙәти кәсептәрен тергеҙеү отошло булыр ине. Урал аръяғы төбәгендә, төньяҡ-көнсығышта сәнәғәт предприятиелары юҡҡа иҫәп. Шул уҡ ауыл хужалығы продукцияһын эшкәртеү предприятиелары төҙөүгә дәүләт инвестицияларын йәлеп итеү хаҡында һүҙ башлау кәрәк.

▸ **Милләт мәнфәғәттәренә зыян итер күренештәргә ҡаршы көрәшеүҙә ҡыйыулыҡ күрһәтергә кәрәк.** Бына, мәҫәлән, халҡыбыҙ бөгөн белем биреү стандарттарының милли-төбәк компоненты бөтөрөлөү менән риза түгел, һәм ошо хаҡтағы халыҡ фекере 260 мең шәхси имза менән нығытылған. Әгәр Федераль үҙәк ошо мәсьәләне хәл итергә теләмәй икән, беҙ уны яңынан күтәреп сығырға бурыслыбыҙ. Әгәр үҙ һүҙебеҙҙе өҫкә сығара алмаһаҡ, башҡорт телен һәм мәҙәниәтен үҫтереү мөмкинлеге менән бергә ватансыл йәштәр тәрбиәләүҙә лә ҙур юғалтыуҙарға дусар буласаҡбыҙ.

▸ **Көҙ көнө буласаҡ халыҡ иҫәбен алыу кампанияһына һәр башҡорт яуаплы ҡарарға бурыслы.** Үҙенең милләтен билдәләй алмай, аҙашып йөрөгәндәргә фәнни, архив материалдары менән ярҙам итеү ғалимдар эше тип кенә ҡарамағыҙ, хәҙер ул материалдар баҫылған китаптар күп, шул хаҡта мәғлүмәт бирә йөрөгөҙ. Был кампания ваҡытында беҙ күпмегә артыуыбыҙҙы ғына түгел, ә Рәсәй Федерацияһы составында үҙ республикабыҙҙың дәүләтселек идеяһын нығытыу мөмкинлеген дә күҙҙә торорға тейешбеҙ.

**Шулай итеп, башҡорттоң ҙур көсө - уның тәрән тамырҙарында. Әгәр ҙә беҙ боронғолоғобоҙҙа ниндәй көс ятҡанын, "башҡорт феномены" мөғжизәһенең серен аңлаһаҡ, шуны ҡайтара алһаҡ, XXI быуат башындағы дәүергә лә үҙебеҙҙе әҙерләй алыр инек. Беҙ хәҙер тағы ла яңырыу кисерергә тейешбеҙ. Бөгөн Башҡортостан Республикаһы бар икән, ул башҡорт халҡы булған өсөн генә бар. Аллаһы Тәғәлә беҙгә еребеҙҙе һаҡларға, халҡыбыҙҙы һаҡларға бурыс йөкмәткән, беҙҙең өҫтән әле лә был яуаплылыҡ төшмәгән. Шуның өсөн дә Башҡортостаныбыҙҙың һәм кешелектең яҡты киләсәге хаҡында һөйләшер өсөн ошо ҡорға йыйылдыҡ. Халҡыбыҙҙың тарихи үҙаңын тергеҙеү, уның милли үҙбилдәләнешкә хоҡуғының тейелгеһеҙ булыуын аңлатыу, ошо нигеҙҙә милләтте уның үтәлешен федераль властарҙан талап итә алыу кимәленә еткереү ҡоролтай эшмәкәрлегенең төп һөҙөмтәһе булыр тип ышанғы килә. III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы күтәреп сыҡҡан проблемаларҙы халҡыбыҙ Башҡортостан Республикаһы Президенты Хакимиәте, Хөкүмәт һәм республика парламенты менән берлектә хәл итеү юлдарын табыр, киләсәктә башҡа халыҡтар менән тиң хоҡуҡлы, ирекле һәм үҙ аллы милләт булараҡ йәшәүен дауам итер, тип ышанабыҙ.**

**(III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайында ҡабул ителде).**













✓ **_Резеда йорттан ауыр уйҙар менән килеп сыҡты. Аяҡтарына көсө етмәй. Ҡаршыһындағы бая ғына үҙенә көс өҫтәгән, дәрт биргән ҡая әле шул хәтлем ҡотһоҙ, ҡурҡыныс булып күренде._**





Гөлнара МОСТАФИНА

# ҠАЯҒА ҺЫЙЫНҒАН ҠАЙЫН

**(Повесть)**

Семен! Уның фотоһы бында нимә ҡарап тора? Башына ток менән бәргәндәй булды Резеданың. Үҙ күҙҙәренә ышана алманы. Артында - әлеге ҡая. Бына нисек таныш был урындар менән Резеда! Әй ул, иҫәр, әллә нәмәләр уйлап, әллә нәмәләргә юрап бөттө. Был фото Сәйеттә лә бар ине бит. Бына һинә, мә! Тимәк, Семен Ынйыбикә апайҙарҙы ла белә. Белә генә түгел, моғайын, Сәмиғулла еҙнәһе менән бергә эшләйҙәрҙер. Шунан сығып, Сәмиғулла еҙнәй ҙә бик үк һәйбәт эштәр менән шөғөлләнмәй, тигән һығымта яһарға урын ҡала түгелме? Сәмиғулла... Семен... Әллә икеһе бер үк кешеме? Резеда ҡабаланып бөтөн фотоларҙы эҙләргә кереште. Шул! Шик юҡ, Сәмиғулла еҙнәһе - Ынйыбикә апайҙың ире - Семен! Ә Семен бит Сәйеттән, Ирғәленән яҡшы әҙәм түгел! Ынйыбикә апаһы был турала беләме икән? Белһә, нимә уйлай? Резеданың мейеһе ҡайнап сыҡты. Тиҙерәк сығырға, ҡотолорға кәрәк был йорттан. Ул, ишеген дә ябып тормай, аҫҡы ҡатҡа уҡталды. Төшкәс тә уң яҡта урынлашҡан ҡунаҡ ҡабул итеү бүлмәһе күҙен арбаны. "Ҡунаҡ булып сыҡҡан" әҙәм ашанып ҡына ҡалмаған, ахырыһы! Юрған ята ойпаланып, яҫтыҡ бөтөнләй иҙәнгә төшөп киткән. Иҙәндә бысраҡ итек эҙҙәре. Күрәһең, ингән дә диванға ауған. Шунан тороп ашаған. Резеда яңынан кухняға инде, сәйнүкте тотоп ҡараны. Эҫе. Ул инер алдынан ғына сығып киткән! Илһамды алып килергә кәрәк булған шулай ҙа. Ҡурҡыуҙан шыбыр тиргә батҡан Резеда ян-яғына ҡарана-ҡарана соланға сыҡты. Кемдеңдер тексәйеп, тишерҙәй итеп ҡарауын тойоп, ҡатындың тәне зымбырҙап китте. Аяҡтары тыңлашмайынса, баҫҡан урынында бер нөктәгә төбәлгән килеш ҡатып ҡалды. Уның ғына ҡарашы! Тын алышынан да һиҙә уны Резеда. Бер нисек тә яңылыша алмай. Әммә уны үлде, тигәйнеләр бит? Ҡотолдом, тип ҡыуанғайны. Тукта, был нимә? Кемдер шаяртамы? Кемгә кәрәк бындай уйын? Кем булһа ла, бына ул, ишек алдында ғына тора. Резеда, бар көсөн йыйып, ҡапыл ғына һеләүһен тиҙлегендә ишеккә ташланды. Әммә артында уның һәр хәрәкәтен күҙ ҙә яҙлыҡтырмай күҙәткән әҙәм йылғырыраҡ булып сыҡты, Резеданы ҡулынан эләктереп, ауырттырғансы артҡа шаҡарып тотоп алды, икенсе ҡулы менән муйынынан урап тотто.

- А-а-а! Илһам! - тип ҡысҡырып ебәргәнен һиҙмәй ҙә ҡалды Резеда.

- Шым! Ҡысҡырма! - тип ыҫылданы таныш тауыш, ҡулын тағы ла ныҡыраҡ шаҡарып. Ҡатын ауыртыуҙан сытырҙатып күҙҙәрен йомдо. Ир ҡулын уның муйынынан алды, әммә бер нисә секундтан боғаҙы тәңгәленә һалҡын бысаҡ килтереп терәне. - Мине беләһең... - тип өҫтәне.

Белмәгән ҡайҙа! Уны нисәмә йылдар ҡоло кеүек тотҡонлоҡта тотҡан Сәйетте танымаҫҡа, белмәҫкә мөмкинме ни?! Тимәк, үлмәгән булып сыға. Алданылар Резеданы. "Ҡасып ҡына ҡара, ер аҫтынан да табырмын мин һине", - тип янауҙары ошомо? Быуындары ҡамыр хәленә әйләнгән Резеда, баҫып торорға көс тапмайынса, Сәйеттең тәне буйлап аҫҡа шыуҙы. Ләкин Резеданан ике башҡа бейек ир уға йығылырға ирек бирмәне, ҡурсаҡ кеүек кенә һелкетеп, һөйрәп торғоҙҙо.

- Белеп ҡуй, һин хәҙер минең ҡулда! Нимә генә эшләйем тиһәң дә, килеп сыҡмаясаҡ! - тип һаман ыҫылдауын белде Сәйет. Резеда күҙ ҡырыйы менән үҙен ҡыҫып тотҡан әҙәмде күҙәтте. Свитерының ең остары эт талаған кеүек теткеләнгән, әшәкеләнеп киткән, яҫы тырнаҡтары аҫтына бысраҡ тулған, сәстәре тиренә укмашып ҡатҡан. Һәр ваҡыт ҡара костюмда, көн дә йыуылған таҙа, үтекләнгән күлдәктә, галстукта йөрөүенә өйрәнгәнгәме, уны бындай ҡиәфәттә күреү сәйер.

- Хәҙер шым ғына өйгә инәбеҙ, өҫкә күтәреләбеҙ.

Сәйет ҡатындың муйынына бысаҡ терәгән килеш арты менән баҫҡыс буйлап күтәрелә башланы. Резеда абына-һөрөнә уға буйһондо. Башҡа сара юҡ, Сәйет бер нәмә алдында ла туҡтап ҡала торған кеше түгел. Йәш ҡатынды тәҙрәләре урам эсенә ҡараған бүлмәгә һөйрәкләп индерҙе. Резеданың башында бер генә уй: нисек ҡотолорға был ҡәбәхәттән? Ни ҡылып ҡарарға? Сәйет уны стенаға терәтеп ултыртылған яҫы карауатҡа йән көсөнә этеп ебәрҙе. Тегеһе тәкмәсләп барып ятты.

- Шунан? Менттарға һатырмын да, анһат ҡына ҡотолормон тип уйлағайныңмы? - тип ирен сите менән мыҫҡыллы йылмайҙы. - Минең менән шаярырға ярамай икәнен һаман аңламайһың, ахырыһы!

Былай ҙа тартылып торған йөҙө күҙгә күренеп һурыҡҡан, күҙҙәре өңөлөп эскә инеп киткән. Һаҡал-мыйыҡ урынын ҡара төктәр баҫҡан - ыпысын ҡасаҡҡа әйләнгән!

- Һин бит үлдең!

- Минме? Ха-ха-ха! - Күҙҙәрен аҡайтып, тексәйеп торғандан һуң йөмһеҙ тауыш сығарып ғыжылдап көлөп ебәрҙе. - Мине улай тиҙ генә үлтермәй торғоҙ! Мин - Сәйет бит әле! Юҡҡа "Бессмертный" тип йөрөтәләр тиһеңме?

Тап шулай! Нисә йәне барҙыр был йыртҡыстың! Резеданың йәне әрнене.

- Мине өйҙә көтәләр. - Ул тыныс һөйләшергә тырышты. Ҡарышһа, телләшһә, йүнле бер нәмә лә килеп сыҡмаясаҡ. - Зинһар, Сәйет, ебәр мине? - Мөлдөрәп карауат ситенә шылып ултырҙы. - Һинә бер зыяным да тейгәне юҡ бит... Мине эҙләп килеп етеүҙәре лә бар.

- Ебәр? Ха-ха-ха! Һин - тик минеке генә! Шуның өсөн генә лә бөгөнгә көндә тереһең бит һин! Юҡһа, күптән ер ҡуйынында ятырға тейеш инең. Мине менттарға тотторорға маташҡан мәлдә үк... - Резеда үҙенә табан бер нисә аҙым яһаған Сәйеттең тубыҡтарынан ҡосаҡлап алды. Бысраҡ джинсыһынан танауына әсе тир еҫе бәрелде.

- Сәйет! Ебәр мине! Зинһар! - тип күҙ йәштәренә быуыла-быуыла һамаҡлай башланы.

Сәйеткә уның шулай ялбарыуы ҡәнәғәтлек кенә килтерҙе. Уның кәмһенеүен кинәнес менән ҡарап торғандан һуң, аяғы менән тибеп ебәрҙе.

- Ебәрмәйем! Һин ғүмер буйы миңә хеҙмәт итәсәкһең! Ҡолом кеүек йәшәйәсәкһең! Ишетәһеңме?! - тип ыҫылданы күҙҙәрен алартып.

Ҡыҙ артҡа ҡолап, башы менән карауаттың осло ҡырыйына төкөлдө. Әммә тамсы ла ауыртыу тойманы. Ҡапыл күҙ алдына Илһам килеп баҫты. Сәйет маҡып тотҡан ерҙәр күгәреп сыҡһа? Башы ла шешеп сыҡмаҫмы? Ул ваҡытта ни тиер? Ҡоланым тип алдармы? Илһам ғәфү итмәҫ... Ғәфү итмәһә, Резеда өсөн тормош бөтәсәк, артабан йәшәмәһә лә була.

- Мине һатыуыңдың хаҡын шулай ҡайтарасаҡһың! - иҙәндә сеңләп илап ятҡан ҡатынға ҡарап торғандан һуң, йомшағыраҡ һөйләшеүгә күсте Сәйет. - Ә хәҙер миңә ярҙам ит! Ошонан имен-аман ҡотолһам, үҙеңде нисек тотоуыңа ҡарап... бәлки, ғәфү ҙә итермен ҡылығыңды...

- Нисек ярҙам итәйем һиңә? Элекке кеүек яңғыҙ түгел мин хәҙер - ирем бар!

- Хе-хе, - Сәйет кинәнеп кеткелдәне. - Күрҙем инде иреңде, торғаны менән бер быҙау! Ярай, уныһы һинең эш. Үҙең дә шунан артыҡ түгелһең. Күпме тырыштым, барыбер әҙәм була алманың!

- Миңә ошондай тормош оҡшай һәм унан баш тартасағым юҡ! - Бер аҙ тынысланған Резеда яңынан карауатҡа ултырҙы.

Әммә Сәйет уны тыңламаны, үҙ хәбәрен һөйләне:

- Мине береһе лә күрергә тейеш түгел. Бер нисә көндән минең арттан машина килә. Шуға тиклем ошонда йәшеренергә тура килер. Кейемде бында ла табырмын, ә бына ашау яғын... һиңә хәстәрләргә тура килер. Икмәк тә колбаса менән генә тамаҡ туймай, йылы аш кәрәк! Мунса төшкөм килә. Берәйһенә минең хаҡта өндәшһәң, быныһында ысынлап та тере ҡала алмаясаҡһың! Һин дә, теге быҙауың да. Хәйер, инде хәҙер һиңә ышанмаясаҡтар ҙа, сөнки мин барыһы өсөн дә - үлгән!

Резеда әкренләп үҙен ҡулға алды. Йәшле күҙҙәрен ең осо менән һыпырҙы. Әҙ генә иланы тип, ҡабаҡтары шешенеп тә өлгөргән. Танауы ла ҡыпҡыҙылдыр инде. Ире күрһә, ни тиер? Ул, бәлки, иғтибар ҙа итмәҫ, алдаһаң да ышаныр. Унда тағын ҡәйнәһе бар бит әле. Уның осло күҙҙәренән ҡасып ҡотола алһа ярай ҙа.

- Бөгөн кискә ҡарай мунса яҡ. Эҫеһе ныҡ булһын, һыу һалғанда шартлап торһон, - тип бойорҙо Сәйет. Әммә улар кисә генә мунса инделәр ҙә баһа. Нимә тип аңлатыр һуң?

- Булмай. Кесаҙнаһыҙ яға алмайым. - Унан ҡасып ҡотола алмаясағын аңлап, ҡыҙҙың күҙендәге өмөт саҡҡылары һүнде: бөттө, барыһы ла юҡҡа сыҡты: матур ғүмер кисереү, бәхетле булыу, бала һөйөү...

- Ә һин булдыр! - Сәйеттең ҡаштары ла һелкенмәне.

- Нисек? Бүтәндәр ни тиер бит?

- Унда минең эшем юҡ! Төнгөләккә ишеген асыҡ ҡалдыр. Һәм тағы: Ынйыбикәнең ҡайтыры ишетелгәс тә миңә хәбәр итәһең.

- Ул бит ҡайҙа нимә эшләп йөрөгәнен миңә хәбәр итмәй, ҡасан ҡайтырын ҡайҙан беләйем?

- Аңра! Телефон нимә өсөн? Шылтырат, белешеп тор!

* * *

Резеда йорттан ауыр уйҙар менән килеп сыҡты. Аяҡтарына көсө етмәй. Ҡаршыһындағы бая ғына үҙенә көс өҫтәгән, дәрт биргән ҡая әле шул хәтлем ҡотһоҙ, ҡурҡыныс булып күренде. Емереп ташлағыһы килде. Ул бит ошо ҡаяны Хоҙайҙың бер билдәһе тип ҡабул итә ине. Әле килеп... Күрә алмайым мин һине, ҡая! Һин миңә өмөт бирҙең дә тартып алдың. Их, был хаҡта алдан уҡ белгән булһасы... Өфөһөнән бер ҡайҙа ла китмәҫ ине. Иҫерек кеше кеүек сайҡала-сайҡала саҡ ҡайтып етте Резеда.

- Берәй нәмә булдымы әллә? - Сәй ҙә эсмәй балаларын көткән ҡәйнәһе уның хәленә шунда уҡ иғтибар итте.

- Юҡсы... - Резеда һүрән генә йылмайҙы. - Ҡапыл башым ауыртып китте, - тип хәйләләне.

- Оҙаҡланың, әллә һыйырҙары һауҙырмай мазаһыҙланымы? - ҡәйнәһенең тап шулай һорарын белә ине инде ул.

- Юҡсы. Башым үтмәҫме тип саҡ ҡына ятып торғайным... - Алдашыуҙан бите ут булып янды үҙенең.

- Температураң юҡмы? Сикәләрең ҡып-ҡыҙыл, - ҡәйнәһе килә һалып маңлайын тотоп ҡараны. - Бар шул. Һеҙ ни, йәштәр, ҡупшыланып, тышта йоҡаҡ йөрөйһөгөҙ. Хәҙер мәтрүш ҡайнатырмын. Баллап эсеп, юрғанға төрөнөп ятһаң, үтеп китә ул.

- Ыҙалама, ҡәйнәм, былай ҙа үтә ул, - тиһә лә, ҡәйнәһе соланға йүгереп сығып та китте. Унан быйыл ғына йыйып киптерелгән үләндәрен ҡосаҡлап инде.

Әммә Резеда нимәнән ауырығанын яҡшы белә - ҡурҡыу, оят, хурлыҡ - бына нимә ҡәйефен төшөрҙө, ҡайғыға һалды уны. Алай ҙа Илһам өйҙә юҡ. Улар бөгөн урманға китергә тейеш ине, Резеданы көтөп тормаған.

Сәй эскәндә лә, һауыт-һаба йыуғанда, өй йыйыштырғанда ла бер ауыҙ һүҙ өндәшмәне. Ҡәйнәһенең ятырға ҡушыуына ла ҡолаҡ һалманы. Ауырымаған килеш нисек яҫтыҡ ҡосаҡлап ятмаҡ кәрәк? Ул ваҡытта башы ысынлап та шартлаясаҡ ауыр уйҙарҙан. Ҡыбырлап йөрөһә, нисектер, онотолғандай. Башынан Сәйет сыҡманы. Күҙ алдынан кинотаҫмалағы кеүек бер-бер артлы тормош юлы йыбырлап уҙҙы.

1991-1992 йылдар. Илдә үҙгәреш бара. Магазин кәштәләрендә шар тәгәрәтергә мөмкин. Булғаны ла талонға ғына бирелә. Әммә студент кешегә нимә инде? Улар, тормош шауҡымына эйәреп, күңелле итеп йәшәй бирә. Резеданың яратып йөрөгән егете - Ирғәлеһе - янында, уға шунан башҡа бер нәмә лә кәрәкмәй. Ирғәле инде уҡыуын тамамлап эшләп йөрөй, ҡыҙыҡай II-се курста уҡый. Хоҙай насип итһә, уҡытыусы буласаҡ! Уның да тиҙерәк диплом алғыһы килә, Ирғәле өйләнешәйек, тип ҡабаландыра. Иләҫ-миләҫ хистәргә бирелеп, аңҡы-тиңке йөрөгән ҡыҙ йәйгеләккә туй яһарға ризалашып та ҡуйҙы. Әммә бәхетенән башы күккә ашып йөрөгән бер көндө ҡанаттары һынды ҡыҙҙың. Ярай әле алдан ата-әсәһенә был турала һәйләп өлгөрмәгән. Уларға күпме күңел яраһы һалыр ине. Ирғәлеһе селпәрәмә килтерҙе уның хыялдарын! Үҙен ситлеккә ташланы.

**(Дауамы. Башы 20-22-се, 24-се һандарҙа).**

**✓ *Бәләкәйҙәр өлкәндәр менән таныш булһа ла, булмаһа ла, һаулыҡ һораша ине. Был һәйбәт ғәҙәттең нимәһе оҡшаманы икән хәҙергеләргә, әйтеүе ҡыйын. Был яҡшы йола ауыл ерендә лә онотолоп бара, ғәжәп хәл!***

ҺАБАҠТАР

# ЯБАЙ КЕШЕНЕҢ... ҡатмарлы фекерҙәре...

## Турһайып йөрөп, тигеҙ ерҙә түм булма...



**Яҡшылыҡ яҡшылыҡтан ғына тыуа - был мәслихәт! Кешегә иғтибарлы, ихтирамлы мөнәсәбәттә, яғымлы йөҙлө булған кеше генә үҙенә лә шундай йөҙ, мөнәсәбәт күрһәтеүҙәренә өмөтләнә ала. Әлбиттә, ундай үҙ-ара йылы, яғымлы бәйләнешкә аралашыуҙың ҡәҙерен баһалай белгән шәхестәр генә һәләтле. Һәр кемдең күңелендә үҙенә генә хас йә бөтөнләй ят хистәр ҡойоно бер туҡтауһыҙ уйнай, һәр йән эйәһе өҙлөкһөҙ хисиәттәр солғанышында, тойғолар ҡапма-ҡаршылығында, кисерештәр донъяһында әсирлектә йәшәй. Кешенең тышҡы күренеше, тышҡы кәйефе, ҡиәфәте эске донъяһына һирәк тура киләлер. Тыштан ябай, тыныс, итәғәтле күренгән кеше лә күңеле менән үҙе лә аңламаған хистәр ҡойононда, тойғолар өйөрмәһендә йәшәргә мәжбүр булалыр.**

Турһайып йөрөп, кемдер тигеҙ ерҙә түм булып ҡылана: әллә юҡ дәрәжәһен бар итеп күрһәтергә теләй, әллә, ябай күренһәм, бар ғына абруйымды ла юғалтырмын, тип ҡурҡа. Етди күренәм тигәне, кешеләр менән яғымлы, мөләйем мөнәсәбәттә аралашыуҙан үҙен үҙе тыя. Ҡырыҫ ҡарашы, һөмһөрө ҡойолған йөҙө менән кешене үҙенә яҡын ебәрмәҫкә тырышыусылар ҙа байтаҡ арабыҙҙа. Улар башҡаларҙың аңғармаҫтан уның эске донъяһы хәләтен һиҙеп ҡуйыуынан ҡурҡа, ахыры. Ни булһа ла, был - күңелдең тәбиғи торошо түгел, ә көсләп үҙләштерелгән яһалма ғәҙәте. Үҙен яһалма тотҡан кеше, әллә кем булып ҡыланһа ла, ситтән ҡарап тороусыла йәлләү тойғоһонан башҡа бер ниндәй ҙә ыңғай хистәр тыуҙырмай. Ул үҙен үҙе башҡалар менән алсаҡ, ихлас аралашыуҙан мәхрүм итә. Әлбиттә, уның ҡырыҫлығын, тупаҫлығын, мин-минлеген үҙендә тойған кеше ниһәйәт унан шикләнә, һаҡлана, ахыр сиктә, ситләшә.

Уйлап ҡараһаң, бер-беребеҙгә мөләйем йөҙ, алсаҡ ҡараш күрһәтер, яғымлы һүҙ өндәшер өсөн матди сығымдар, ҡиммәтле йыһаз, кейем, фатирға эйә булыу кәрәкмәй бит, күңел йылыһы ғына кәрәк. Үҙебеҙҙең бер заттан, бер милләттән, ҡәрҙәштәр, туғандар булыуыбыҙҙы танып, бер-беребеҙҙе хөрмәтләп, берҙәм рухлы, бер-беребеҙгә терәк булып йәшәргә өйрәнһәк, күңел йылыбыҙҙы ла үҙебеҙгә йәлләмәҫ инек, яттарға ярайбыҙ, тип тәләфләмәҫ тә инек. Ә беҙ күп осраҡта киреһенсә эшләйбеҙ: үҙебеҙҙекеләргә үтә ҡырыҫ, талапсан, ә инде яттар алдында йылмайып, бейеп кенә торабыҙ, түшәк кеүек түшәләбеҙ. Халҡыбыҙ ҡанына хас яғымлылыҡты, йәнебеҙгә тыумыштан бирелгән күңел йылыһын ғүмер буйына һаҡлау урынына, ни сәбәптәндер, ни ғәжәптәндер, әллә ҡайһы арала һүрелдерәбеҙ. Әллә шул яғымлылығыбыҙҙы, итәғәтлегебеҙҙе йомшаҡлыҡ итеп күрһәтеүҙән ҡурҡабыҙмы, әллә башҡа халыҡтарға оҡшарға тырышып, яттарҙың ғәҙәттәрен көсләп йәнебеҙгә һеңдереп маташабыҙмы икән? Шулай тип уйларға дәлилдәр күп. Кемдәрҙеңдер йөрәк йылыһы бәлиғ булғансаға ла етмәй һүрелә бит, ғәжәп! Көсләп һүрелдерелмәһә, улай иртә исраф ителеүгә ни сәбәп бар? Тар күңеллеләрҙән таш йылғалар ғына ҡалыр...

Йән йылыһын оло йәшенә хәтлем имен һаҡлағандар - бәхетлеләр! Ундай олатай, өләсәй, инәйҙәрҙең йөҙөнә ҡарауы ҡыуаныс: уларҙың яҡты йөҙҙәренән шатлыҡ, ҡәнәғәтлек, итәғәтлек сырайы бер ваҡытта ла юғалмай, йәндәре кеүек, йөҙҙәре лә һәр ваҡыт ҡояштай балҡып, йылыһын бөркөп тора! Саф күңелле кешенең эске донъяһы ла, йөҙ-ҡарашы ла, буй-һыны ла күркәм. Үҙҙәре яғымлы, донъялары теүәл, балалары һау-сәләмәт, бер-береһенә игелекле, алсаҡ, инсафлы мөғәмәләле кешеләрҙең йән йылыһы һәр кемде үҙенә ылыҡтырып тора. Улар үҙ тормошо менән дә, тәбиғәт торошо менән дә, йәмғиәт ҡоролошо менән дә, төрлө холоҡло туған-тыумаһы, дуҫ-иштәре, таныштары, күрше-күләне менән дә ҡәнәғәт һәм дуҫлыҡта, татыулыҡта кинәнеп донъя көтә. Ундай кешеләрҙән әллә нимәләр өмөт итмәһәң дә, күрешкән һайын күрешке, һөйләшкән һайын һөйләшке килеп тора, әҙ генә булһа ла уның күңел йылыһын тойғо килә. Үҙ аңы, үҙ асылы, үҙ йәне менән гармонияла, татыулыҡта йәшәгән кешенең эске камил донъяһына ҡағылғы килә. Ундай кешеләрҙе һәр беребеҙ беләбеҙ - бер ниндәй ҙә сер асманым!

Үҙеңә таныш түгел кеше йылмайып йылы һүҙ ҡушһа, тәүҙә ҡаушап ҡалһаң да, күңелгә рәхәт булып китеүен һәр кемебеҙ үҙендә тойғаны, йылы һүҙҙең тәмен татығаныбыҙ бар.

Кешенән башҡа бер йән эйәһенең дә кешенең кешелеген баһаларлыҡ һәләте юҡ. Хоҙай Тәғәлә ул һәләтте әҙәменә генә биргән! Шулай булғас, беҙ үҙебеҙгә баһаны ла, яғымлы, кешелекле мөнәсәбәттәрҙе лә тик үҙебеҙ кеүектәрҙән генә көҫәй алабыҙ. Һин кешегә ниндәй, һиңә лә шулай йөҙ күрһәтерҙәр. Танышыңды осратҡанда ла йылмайып һаулыҡ һораш, хәл-әхүәлен белеш. Быны өсөн кеше икәнеңде генә иҫтә тотоу кәрәк! Ни бары тыумыштан йәнеңә бирелгән тәбиғи тойғоларҙың уяу булыуы, аң, йөрәгеңдең аяулы, ҡыйыу булыуы кәрәк. Танышың һинең был ҡылығыңа аптырап, ҡаушап ҡалһа ла, ҡыуаныр, ҡырыҫыраҡ холоҡло кеше булһа, сараһыҙҙан йылмайырға мәжбүр булыр. Икенсе осрашҡанда, үткән хәлде иҫенә төшөрөп, яңынан уңайһыҙ хәлгә ҡалмаҫ өсөн, иң алдан йылмайып, йылы һүҙ ҡушып, әллә ҡайҙан ике ҡулын һуҙып күрешергә килер. Моғайын, шулай итер. Мин быға ысын күңелдән ышанам, сөнки кеше тышҡы ҡиәфәтендә әллә кем булып күренеп маташһа ла, бер кемдең дә күңеле йылы һүҙгә, йылы ҡарашҡа битараф ҡала алмай.

Элегерәк ата-әсә балаһын үҙ өлгөһөндә өлкәндәргә иғтибарлы, ихтирамлы булырға өйрәтә ине. Бәләкәйҙәр өлкәндәр менән таныш булһа ла, булмаһа ла, һаулыҡ һораша ине. Был һәйбәт ғәҙәттең нимәһе оҡшаманы икән хәҙергеләргә, әйтеүе ҡыйын. Был яҡшы йола бер-береһенә ят күп халыҡ йәшәгән ҡалаларҙа ғына түгел, ауыл ерендә лә онотолоп бара, ғәжәп хәл! Балалар кемдән өйрәнә? Әлбиттә, өлкәндәрҙән. Тимәк, өлкәндәр үҙ-ара мөнәсәбәтен бер-береһенә иғтибар, ихтирам нигеҙендә ҡора белмәй. Әллә теләмәйме?

Шул хәтлем дә еңел холоҡло, аумаҡай булмаған бит борон беҙҙең атай-олатайҙар! Үҙ иле, үҙ ере өсөн йәнен, тәнен аямай көрәшкәндәр. Яуҙан һуң бер быуынын ҡырып бөтөрһәләр, икенсе быуын, өҙәңгегә баҫа алырлыҡ, ҡулына һөңгө, ҡылыс тоторлоҡ йәшенә еткәс тә, азатлығы өсөн баш күтәргән. Шулай булмаһа, беҙ үҙ телебеҙҙә һөйләшеп, үҙ еребеҙгә хужа булып, үҙ илебеҙҙә йәшәү хоҡуғынан күптән яҙыр инек. Борондан ғорур халҡыбыҙҙың ҡан түгеп яулаған дәрәжәһен һаҡлайбыҙ тиһәк, теләһә кем алдында ҡомдай ҡойолоп, түшәктәй түшәлеп бармаһаҡ ине. Ныҡышмалығыбыҙҙы һиҙһәләр, ҡыҫым, тыйыуҙарға бирешмәгәнебеҙҙе тойһалар, баҫып алыу теләктәренән төңөлөр ине башҡалар.

Әҙәм балаһы үҙ асылында тәбиғи холоҡ-ғәҙәттәренә таянып йәшәһә, бөгөнгө көнитмеше лә, киләсәге лә күпкә уңышлыраҡ, бәхетлерәк булыр, тип уйлайым. Ата-бабаларыбыҙҙың быуындан-быуынға васыят итеп тапшырған тормош, йәшәйеш, үҙ-ара мөнәсәбәт тәжрибәһе үҙен уларҙан күпкә аҡыллыға һанаған быуын вәкилдәре тарафынан һанға һуғылмай килде. Хәҙер бына яңы быуын уларҙы кире ҡайтарып маташа. Юғалтыуы ап-анһат, ә бына кире тергеҙеүе... Тәбиғәттә бөтәһе лә ябай, хәйләһеҙ, әммә камил ҡоролған. Төрлө шарттарға яраҡлашып, һынауҙарына бирешмәй түҙеп йәшәгәндәр йәшәй, үҫкәндәр - үҫә, тоҡомон дауам итә. Ләкин яраҡлашыу урынына самаһыҙ ярамһаҡланыу - үҙеңде һаҡлау түгел, киреһенсә, юғалтыуға килтерә. Үткән быуындар тәбиғәт ҡануындарын өйрәнеп, үҙ ғүмерҙәрендә һынап, иң һәйбәттәрен беҙгә васыят иткән: йомарт аҡылдан, һыналған тәжрибәнән күрәләтә баш тартыу - ахмаҡлыҡ. Шул уҡ мәлдә, арттағыға ярайыҡ, тип, артҡа китеп бармайыҡ!

Һәр кешенең йәненә яҡшылыҡ та, яманлыҡ та тигеҙ өлөштә бирелгән, бөтә хикмәт уларҙы өләшә белеүҙә генә. Ниңә тәбиғәттән бер ғүмергә етерлек бирелгән күңел йылыһын туғандарыбыҙ, дуҫтарыбыҙ, таныштарыбыҙға йомарт өләшеп, бер-беребеҙҙе шатландырып йәшәмәйбеҙ? Ниңә яҡшылыҡ өләшеп, яҡындарыбыҙҙы ҡыуандырыуҙан үҙебеҙҙе мәхрүм итәбеҙ? Шул уҡ ваҡытта беҙҙең өсөн ят, яһалма ғәҙәттәрҙе ғүмеребеҙ буйы көсөргәнә-көсөргәнә, зиһенебеҙҙе ҡаҡшата-ҡаҡшата үҙләштерәбеҙ. Асылыбыҙҙы инҡар итеп, былай ҙа ҡатмарлы тормошобоҙға үҙебеҙ үк яһалма ҡаршылыҡтар тыуҙырабыҙ. Аҡыллы кешеләр шулай йәшәйме икән? Беҙ аҡыллы кешеләрме? Йәнебеҙҙә бар йылыны һүндереп, сафлыҡты туҙанландырып, шатлыҡты ҡоромландырып, күңелебеҙҙе сүп-сар, бысраҡ, аламалыҡ, әшәкелеккә көсләп күндерәбеҙ. Үҙ йәнебеҙгә зәхмәт, бәлә-ҡазалар көҫәйбеҙ түгелме? Нисек түҙһен ғәзиз йән был хәтлем көсләүҙәргә? Әлбиттә, ул яйлап керләнә, туңа, ҡата, ҡырыҫлана. Шатлыҡ-ҡыуаныс, бәлә-ҡазаларға ла битараф булырға өйрәнә, бер нәмәне лә һиҙмәҫ ташҡа әүерелә. Был ғәҙелһеҙлеккә түҙә алмай, йәндең ғүмере ҡыҫҡара. Эскерһеҙлек, көр күңеллелек - йән, тән сәләмәтлегенең төп сығанағы. Йән менән аң татыу йәшәһә генә уларҙың эйәһе - әҙәм - бәхетле! Эске донъяһы менән тышҡы донъяһы тап килгән саф күңелле кешеләр үҙ тормошонан, ғүмеренән ҡәнәғәт. Мин уларға һоҡланам, көнләшәм: йән өсөн үҙ асылына тура килеп йәшәүҙән дә рәхәте, үҙ-үҙе булып ҡалыуҙан да һәйбәте юҡтыр, биллаһи, юҡтыр!

Ҡайһы берәүҙәр хатта үҙҙәренә кәрәк ерҙә йәһәт кенә түбәтәй кейә һалып алалар - был хәҙер ғәҙәти күренеш. Түбәтәй кейеп, Алланың изге бәндәһе, йә муйынға галстук тағып, иң әҙәпле, итәғәтле кешегә әүерелеп булһа, бөгөн үк хәлемдән килгәнсә түбәтәй, галстук алып, яҡындарыма таратыр инем. Түбәтәй кеймәгән, галстук таҡмаған кешенең әллә ҡайҙан кем икәне беленер ине. Үкенескә күрә, затлы түбәтәй кейеп, галстук тағып та яҡындарын рәнйетеп йәшәгәндәр әҙ түгел. Тышҡы ҡиәфәтте матурлап, биҙәп кенә эске донъяны үҙгәртеп булһа ине! "Яҡты йән көнгә үрелер, ҡараңғы йән тиҙ һүрелер", тигәндәр борон. Яһалма ҡыланып йәнеңде йәберләгәнсе, аңыңды талағансы, бар булмышыңа тап килеп йәшәү - үҙеңде хөрмәт итеүҙер, йән, тән биргән атай-әсәйеңә, аң биргән Хоҙай Тәғәләгә рәхмәттер.

Аҡыл өйрәтә, тип уйламағыҙ, мин үҙем дә осраған берәүгә йылмайып бара торған кеше түгелмен, күңелем дә йылыһына һаран, холҡом ҡырыҫ. Шуны аңлап та, үҙемде үҙемә яҡшы мөнәсәбәттән мәхрүм итеп йәшәгәнемә үкенеп, үҙгәрергә теләп, әсенеп яҙам был уй-кисерештәремде. Йәшелкенсәк нәсихәттәремә ҡолаҡ һалһын, йән йылыларын йәлләмәй өләшеп яҡындарын ҡыуандырһын, яҡшылыҡ эшләп үҙҙәре кинәнһен, тыумыштан мул бирелгән тәбиғи һәләттәренең мәнфәғәтен күрһен ине. Олоғайғас, үкенес килә, әммә ғүмер буйы тыйылып кәмһетелгән күңелде яҡшылыҡҡа өндәүе, өмөтләндереүе бик ҡыйын. Ваҡытында көсләп һүрелдергән йән йылыһын яңынан дөрләтеү өсөн дәрт осҡоно өҫтәүе лә ауыр, әгәр мөмкин булһа әле...

Нимә беҙгә ҡиммәт, нимә осһоҙ?
Әйҙә шуны белеп ҡарайыҡ.
Осһоҙ менән ҡиммәт араһында
Күпме икән бөгөн арауыҡ?
Ғүмерендә кемдәр үлсәй алды
Ҡиммәт менән осһоҙ араһын?
Йәшәү ҡәҙерҙәрен белмәгәндәр
Ниңә уны үлсәп ҡараһын?

Үҙ телебеҙ ҡиммәт - Әсә теле!
Пафос менән ғорур әйтәбеҙ.
Әйтәбеҙ ҙә, тыуған бер баланы
Үҙ теленән мәхрүм итәбеҙ.
Ғүмеребеҙ ҡиммәт, тимәксемен...
Ҡиммәт микән беҙҙең йәнебеҙ?
Ҡиммәт булһа, бөгөн үҙ-үҙенә
Ҡул һалыусы - кемдәр?
Йәнә - беҙ!

Үҙ йәнебеҙ ҡиммәт, үҙ еребеҙ,
Үҙ телебеҙ беҙгә ҡәҙерле!
Ысынмы шул, әллә бөгөн беҙҙән
Нимә уңай, шуға - ҡәҙерме?
Донъя көтөр өсөн аҡса кәрәк!
Йола түгел, аҡса - мәнфәғәт!
Ғәзиз тигән йән, тән, ил, телебеҙ
Осһоҙ икән. Осһоҙ, йәмәғәт!
Ысынбарлыҡ менән асылыбыҙ
Тура килмәй икән арыу уҡ:
Ҡиммәт менән осһоҙ араһында
Яҡын ғына икән арауыҡ!..

**Урал МОСТАФИН.**

# САЛАУАТ ЙЫЙЫНЫНЫҢ...

## Торатауҙа үткәне



### Үҙенсәлекле булды тамаша

**Быйылғы "Салауат йыйыны" айырыуса күтәренке рухта үтте. Бының төп сәбәбе - йыйындың башҡорттар өсөн изге һаналған Торатау буйында ойошторолоуылыр, моғайын. Торатау быуаттар буйы үҙ итәгендә барған әллә күпме тарихи ваҡиғаларға шаһит булған, йөҙәрләгән оло йыйын күргән. Бына нисәмә быуат үткәс, бөтә донъя башҡорттары тағы ла уның янында йыйылды...**

Төп тамашаға килгәндә, уның яңылығы - сценарий авторы, шағирә Зөлфиә Ханнанованың батырыбыҙ Салауат тарихына һәм Ҡоролтайға үҙенсәлекле ҡарашы. Кескәй Салауаттың башҡорт биҙәктәре аша донъяны таныуы, изге тауҙан төшкән Ете әүлиә образдары, Аҙнабикә фатихаһы, Ҡоролтайға йыйылған батырҙар һәм күренекле шәхестәребеҙ әрүахтарының килеүе... Бик көслө һәм сағыу образдарға ҡоролған был сценарий. Ул үткән йылдарҙағы "Салауат йыйыны" сценарийҙарынан да ҡырҡа айырыла. Үкенескә ҡаршы, ваҡыт аҙ булғанғамы, әллә башҡа сәбәптәнме, ижади төркөм барыбер ҙә ныҡлап аса алманы уның төп идеяһын, биш йыл эсендә ҡалыплашҡан алымдарҙан китергә теләмәне, тип һанайым. Бындай көслө әҫәргә эпик яңғыраш, яңы алымдар, яңы көй биҙәлеше, үҙенсәлекле бейеүҙәр кәрәк ине лә бит... Һәләтле шағирә Зөлфиә Ханнанованың йөрәгенән урғылған образдар Торатау кеүек мөһабәт яңғырарға тейеш ине...

Әлбиттә, бындай байрамдарҙы тәүгә күргән Ҡоролтай делегаттарына ла, йыйылған тамашасыларға ла барыһы ла оҡшаны. Тик беҙ бит был байрамды алтынсы йыл күрәбеҙ, яңы ҡараш, яңылыҡ көтәбеҙ...

Тамашаны биҙәгән рәссам Нестеровтың эше күңелгә хуш килде. Ҡусҡар биҙәктәр, сәхнәләге "Салауат" тигән яҙыу Торатау ҡаяһының дауамы кеүек булды. Рәссам эше уңышлы булды, тип һанайым.

Тағы шул. Элекке байрамдарҙа майҙанды биҙәгән тирмәләр үҙҙәрен ҡараған комиссия китеү менән йыйып алына ине, был юлы улар кискә тиклем ултырҙы, уларҙың күплеге һәм матурлығы һоҡландырҙы. Тирмәләр янынан ҡунаҡтар өҙөлмәне, тирмә хужалары ла ихлас булды.

Ошо урында тәҡдимемде әйтеп китмәксемен. Көнө буйы оло яланда йөрөгән халыҡ, әлбиттә, асығып китә, балаларҙың ял иткеһе, сәй эскеһе килә. Халыҡ ниндәйҙер алыпһатарҙарҙан йөҙ грамм итте етмешәр һумға һатып алып, туйынырға мәжбүр булды. Пластик өҫтәлдәр, ултырғыстар... Оло йыйын, башҡорт йыйыны өсөн был матур күренеш түгел, әлбиттә. Әгәр ҙә һәр тирмәгә урынды киңерәк бүлеп, уның янында лапаҫ ябып, таҡтанан өҫтәлһикеләр яһап ҡуйылһа, райондан ашнаҡсыларҙы йәлеп итеп, һалма ашы бешерелеп, алдан әҙерләнгән бәлештәр, сәк-сәк һәм бауырһаҡтар һатылһа, ҡунаҡтарға шажлап торған самауырҙарҙан сәй, ҡымыҙ-буҙа эсереү ойошторолһа, ер аяғы ер башынан килгән тирмә хужалары аҡса ла эшләй алыр ине, байрамдың да күрке мең артыр ине, тип уйлайым. Ошо лапаҫ янында кескәй балаларға балаҫ йәйеп тороп ашатһалар, балаларҙың да күңелендә боронғолоҡ менән һуғарылған бик матур иҫтәлек ҡалыр ине!

Ҡунаҡтарға башҡорт аштарын боронғоса, йолалар буйынса ашатыу яйға һалынһа, Салауат йыйындары тағы ла үҙенсәлекле төҫ алыр ине, киләсәктә туристарҙы, сит-яҡ ҡунаҡтарҙы йәлеп итерлек байрамға әүерелер ине, тип уйлайым.

Нимәһе ҡыуаныслы: кискә тиклем йөрөһәк тә, эсеп, һүгенеп йөрөгән әҙәмдәр кәйефте ҡырманы, эскелек бөтөнләй һиҙелмәне...

**Зөһрә БУРАҠАЕВА.**

### Сая ҡыҙҙар бәйгелә һынатманы

**"Салауат йыйыны"ның матур конкурстарының береһе "Сая ҡыҙҙар"ҙа был юлы төрлө райондарҙан йыйылған 19 ҡыҙ һүҙ һөйләү, йырлау, бейеү, уҡтан атышыу, һөңгө сөйөү, һыу менән тулы биҙрәләр көйәнтәләп йүгереү буйынса көс һынашты. Әлбиттә, был һөнәрҙәрҙең күбеһе уларға тормошта кәрәк тә булмаҫ. Ә шулай ҙа ошо бәйгенең шарттарын еренә еткереп үтәргә тырышыу барыбер ҙә ҡыҙҙарҙа ниндәйҙер характер, маҡсатҡа ынтылыусанлыҡ тәрбиәләмәй ҡалмағандыр, тип уйланыла. Һәр хәлдә, үҙҙәренең тормоштағы ҡатын-ҡыҙ бурысын яҡшы аңлаған ҡыҙҙар йыйылғайны был конкурсҡа.**

"Сая ҡыҙҙар" конкурсында Мәләүез районы ҡыҙы Гөлнара Мөхәмәтшина еңеүсе тип табылды. Беренсе урынды лайыҡлы рәүештә Сибай һылыуы Рәзилә Әбделғәзина яуланы. Икенсе урынға Ишембай районы ҡыҙы Резеда Хәсәнова менән Учалы районы гүзәле Резеда Жамалова сыҡты. Өсөнсө урынды Баймаҡ районынан Нурсилә Фәхретдинова, Стәрлетамаҡтан Юлиә Шаһиева һәм Стәрлебаш районынан Айһылыу Хөбөтдинова уртаҡлашты. Әлбиттә, баһалама ағзаларының ҡарары менән риза булмағандар ҙа булды. Быныһы ла аңлашыла. Туғыҙынсы синыфта уҡыған ҡыҙ бала менән Өфө сәнғәт академияһының өсөнсө курс студенты ярышыуын нисек баһаламаҡ кәрәк - бындай хәл баһалама ағзаларын да ауыр хәлгә ҡуйҙы. Ойоштороусылар барыбер ҙә конкурстың шарттарына төҙәтмә индерергә тейеш киләсәктә. Һәүәҫкәрҙәр икән, әйҙә, һәүәҫкәрҙәр генә ярышһын. Бына-бына профессиональ артист булам тип торғандарҙы ҡыҫтырмаҫҡа ла була. Унан һуң, ҡыҙҙарҙың йәш айырмаһы тигеҙ булмауы ла дөрөҫ түгел бит. Бына шундай уйҙар ҙа уйлатты "Сая ҡыҙҙар" конкурсы.

**Гөлнара МӨХӘМӘТШИНА, Мәләүез районы Иштуған ауылы:** Саялыҡ тигәндән, был төшөнсә ҡатын-ҡыҙҙарҙағы сифаттарҙы һәр яҡлап та үҙендә сағылдыралыр, тип уйлайым. Башҡорт ҡыҙҙары элек-электән батыр, ҡыйыу, шул уҡ ваҡытта һылыу, нәҙәкәтле, нескә күңелле булған. Улар һынауҙарға бирешмәйенсә, ирҙәренә терәк, йорт-ҡураларына күҙ-ҡолаҡ булып, тыуған ерен һаҡлап ҡалыуҙа үҙ өлөшөн индергән. Ошо сифаттар заман ҡатын-ҡыҙҙарында ла һаҡланһын ине, тигән теләктәмен. Иренде көслө итеп күрһәтә белеү, уның абруйын, дәрәжәһен үҫтереү, халҡыңа тәүфиҡлы, иманлы күп балалар тәрбиәләү - был да саялыҡ.

**Рәзилә ӘБДЕЛҒАЗИНА, Сибай ҡалаһы:** Заман башҡорт ҡыҙының саялығы ат менеп сабыуҙа, йә булмаһа уҡтан атыуҙа түгел, ә үҙ һүҙен ваҡытында әйтә белеүҙә, ҡыйыулығында, көслө ихтыярында, төплө фекер йөрөтөүендә һәм дә тыйнаҡлығында сағыла. Ул шулай уҡ матур итеп йырлай ҙа, бейей ҙә белергә тейеш. Миңә был сифаттар әсәйемдән күскәндер, тим. Мин үҙем әле Башҡорт дәүләт аграр университетының энергетика факультетында өсөнсө курста уҡып йөрөйөм.

**Юлиә ШАҺИЕВА, Стәрлетамаҡ ҡалаһы:** Элек-электән башҡорт ҡыҙҙары баҫалҡы, нескә күңелле, сабыр холоҡло тигән фекер йөрөй. Шуға өҫтәп, ул ҡыйыу фекер йөрөткән, үҙенең әйтер һүҙе булған, ире менән ҡуша яуға ла сапҡан сая икәнен дә беләбеҙ. Башҡорт ҡыҙҙарының ошондай сифаттарын сағылдырыусы был сараның ойошторолоуы бик һәйбәт. Был беҙҙәге милли рухты уятыуға, саялығыбыҙҙы арттырыуға булышлыҡ итә. Башҡорт ҡыҙҙары ут кеүек янып торорға, шул уҡ ваҡытта тыйнаҡлыҡ та һаҡларға тейеш. Заман ҡатын-ҡыҙын мин ғаиләһендә хәстәрлекле хужабикә, һөйөклө әсәй, эшендә бүтәндәргә өлгө булырҙай хеҙмәткәр итеп күрәм.

### Батыр егеттәр майҙан тотто

**"Салауатҡа тиң батыр егеттәребеҙҙең йөрәге һәр ваҡыт "илем" тип тибергә тейеш", тигәйне Баймаҡ районы Түбә ҡасабаһынан байрамға тамаша ҡылырға килеүсе Таңһылыу апай Сөнәғәтова. "Салауат йыйыны" батыры" бәйгеһендә ҡатнашыусылар менән аралашҡанда ла, уларҙың сығышын тыңлағанда ла, көс һынашыуҙарын күҙәткәндә лә быны тойорға мөмкин ине. Илһөйәрлек, милли рух төшөнсәһе кемеһендәлер үткер фекерҙәре аша сағылды, кемеһендәлер һын-торошо, ҡарашы аша тойомланды, кемдер уны ҡурай моңо, йырбейеү аша еткерҙе.**

Шуныһы ҡыуаныслы: бөгөн ил киләсәген үҙ иңенә алырҙай, милләт яҙмышына битараф булмаған аңлы, аҡыллы, белемле, иманлы йәштәребеҙ күбәйгәндән-күбәйә һәм уларҙың артыуына ошондай сараларҙа әүҙем ҡатнашҡан, үҙе артынан эйәртә алған алдынғы ҡарашлы егет-ҡыҙҙарыбыҙ булышлыҡ итә. Был йыйынға килгән күпме малай-шалай, егет-елкенсәк тә әлеге бәйгеселәргә ҡарап өлгө алғандыр, тим. Мәҫәлән, кемдер, бәлки, Илшат Ғазин кеүек оҫта көрәшсе, кемдер Иҙел Аралбаев кеүек ҡурайсы, йә йырсы булыуҙы, кемдер Азамат Һөйәрғолов кеүек юрист һөнәрен үҙләштереүҙе маҡсат итеп ҡуйғандыр. Тимәк, был бәйгене үҙенә күрә лидерҙар әҙерләүсе мәктәп тип атаһаҡ та булалыр.

Шулай итеп, был бәйгелә 14 ҡатнашыусы араһынан Сибай ҡалаһынан сығыш яһаусы бөрйән егете Илшат Ғазин "Салауат йыйыны" батыры" исеменә лайыҡ булды. Беренсе урынды Баймаҡ районының Буранбай ауылынан Иҙел Аралбаев яуланы. Икенсе урынды Ишембай районынан Айсыуаҡ Ғөбәйҙуллин менән Бөрйәндән Илнур Ҡолдобаев бүлеште. Өсөнсө урын Стәрлетамаҡтан Азамат Һөйәрғолов менән Әбйәлилдән Фәнис Мусинға бирелде.

**Илшат ҒАЗИН, Сибай ҡалаһы:** Башҡортмон, тигән ир аҫылы үҙенең ырыуын, тамғаһын, оранын, ағасын, ҡошон, халҡы тарихын, батырҙарын яҡшы белергә тейеш. Ул үҙенең милли рухын, ҡыйыулығын, ярыш сәмен, үҙендәге бөтә һәләттәрен бәйге майҙанында ғына түгел, тормош майҙанында ла ҡулланып, гел алға бара. Салауат батыр ерен, телен, динен һаҡлар өсөн ат менеп яуға сапһа, беҙ бөгөн еребеҙҙе һәм халҡыбыҙҙы ғилем, аҡыл, иман менән һаҡларға тейешбеҙ.



**Азамат ҺӨЙӘРҒОЛОВ, Стәрлетамаҡ ҡалаһы:** Бөгөнгө байрам барыбыҙ өсөн дә бик мөһим сара. Милли геройыбыҙға бағышланған йыйында беҙ уға арнап ярыштар үткәрәбеҙ, көс һынашабыҙ, мәргәнлегебеҙҙе күрһәтәбеҙ, йыр-моңдарыбыҙҙы яңғыратабыҙ. Бөгөн рухи яҡтан да, физик яҡтан да ысын батырға тиң булған егеттәребеҙ бихисап. Уларҙың кемеһелер сәсән телле йор һүҙгә оҫта, кемеһелер йыр-моңға маһир, ҡайһылары майҙанда бил бирмәҫ көрәшсе, ә ҡайһылары үҙен фән өлкәһендә таныта. Иң мөһиме, беҙ ошо һәләттәребеҙҙе илебеҙ, телебеҙ, еребеҙ киләсәге өсөн хеҙмәт итеүгә бағышларға тейешбеҙ.

**Алмаз РӘЖӘПОВ, Ишембай ҡалаһы:** Башҡорт егете үҙенең халҡын яратырға, йолаларын күҙәтергә, милли уйын ҡоралдарында уйнарға, иң мөһиме, көрәшә белергә тейеш. Боронғо башҡорт егетен шулай уҡ атһыҙ, уҡ-һаҙаҡһыҙ күҙ алдына килтереп булмаған. Бер кемгә лә баш эймәгән башҡорт физик яҡтан да, рухи яҡтан да көслө булған һәм әле лә беҙ шулай булып ҡалырға тейешбеҙ.

**Ырыҫбикә ЙӘНСУРИНА.**





## Тирмәләр - тере музей һымаҡ

**"Салауат йыйыны"нда үткәрелгән тирмәләр конкурсы ла байрамға сағыу биҙәктәр өҫтәне. Һәр район, һәр ҡала үҙенең тирмәһен ҡорғас, йыйын үтә торған майҙан бәләкәй бер ауылды хасил итте һәм башҡорт тормошо, башҡорт көнкүреше, йолаларын сағылдырыусы тере музейға әүерелде. Быйыл был конкурста 47 тирмә ҡатнашты, бынан тыш байрам хужалары - ишембайҙар үҙҙәре бер нисә тирмә ҡороп, ҡунаҡтар ҡабул итте.**

Тирмәләр араһында төрлөһө булды: исем өсөн генә ҡуйылғаны ла, башҡалар араһында һыр бирмәҫлек итеп ҡоролғаны ла. Шулай ҙа икенселәре күпселекте тәшкил итте һәм уларҙа һәр районға, ырыуға ғына хас үҙенсәлекле йолаларҙы күрергә, кәсеп-шөғөлдәре менән танышырға, аш-һыуынан ауыҙ итергә мөмкин ине. Бөрйәндәрҙең сигеүле мендәрҙәренә, ҡорамаларына етеүсе булмаһа, Әлшәй, Ғафури районы тирмәләре был төбәк ҡатын-ҡыҙҙары һуҡҡан аҫалы балаҫтары менән мең төҫлө балҡыш алды. Ишембайҙарҙың йүкә ҡабығынан яһалған лапаҫтары, көнкүреш әйберҙәре лә халыҡҡа бик оҡшаны. Кейеҙ һуғыу оҫталары булараҡ, әбйәлилдәр тирмәһендә төрлө кейеҙҙәр урын алғайны. Шуныһы ҡыуаныслы: бер аҙ онотола төшкән был шөғөлдө хәҙер башҡа районда ла бик әүҙем рәүештә кире тергеҙеү башланды. Мәҫәлән, Благовещен ҡалаһы тирмәһендә кейеҙгә һүрәт төшөрөү менән мауыҡҡан ҡала рәссамдарының эштәренән торған күргәҙмә ойошторолғайны. Нуриман районынан килгән Зөһрә Аҡдәүләтова ла кейеҙ һуғыу эшенең тергеҙелә башлауын һөйөнөп телгә алды. Миәкә районы ла быйыл жюри иғтибарына кейеҙ тирмә тәҡдим итте. Ғәлинур Зарипов яһаған был тирмә кейеҙ һәм ағастан ғына тороуы менән үҙенсәлекле ине.

Халыҡ ҡул ҡаушырып ултырмай бөгөн ауылдарҙа, элекке кәсептәрҙе тергеҙеп, ҡул эше менән булышып, йорт-ихатаһын да биҙәй, уны һатып, аҡса эшләргә өйрәнә - тирмәләр конкурсына ҡуйылған бай күргәҙмәләр ошоноң асыҡ миҫалы булып тора. "Хөкүмәт хеҙмәт хаҡы түләмәгәндә лә беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙар шәл бәйләп һатып, ҡулаҡса эшләй торғайны, - тигәйне Ейәнсура районы тирмәһе хужабикәһе Ғәлимә Гүләйева. - Борон-борондан башҡорт үҙенә кәрәк нәмәне үҙе етештергән. Бөгөн дә районда тире иләү, септә һуғыу, быйма баҫыу кеүек шөғөлдәр ярҙамында көн күреүселәр бихисап". Шул уҡ ваҡытта, тере мал, малдың ағын һатыу мал ҡотоноң китеүенә килтерә, тип, был эштәрҙе тыйыр булған боронғолар. Был турала Әбйәлил районы сәсәниәһе Хәнифә апай Әбүбәкерова ла иҫкәртә бирепп ҡуйғайны: "Әре малдың баш һөйәге йорттағы мал ҡотон һаҡлаусы булып тора. Элек малды һатҡан осраҡта ла уны хужа ихатаһында һуйып һатҡандар, ә баш-тояғын алып ҡалғандар. Бөгөн бөтөн кеше май-ҡаймаҡ һатып йәшәй, был да малдың ҡото китеүенә килтерә. Ямғыр яумай, ҡоролоҡ булыуы ла ана шул мал ҡотоноң китеүе менән бәйле".

Башҡа йылдарҙан айырмалы рәүештә, быйыл Ҡалтасы районы тирмәһе бик үҙенсәлекле итеп, боронғо башҡорт биҙәктәре төшөрөлгән шаршау һәм таҫтамалдар менән биҙәлгәйне. Был ҡомартҡылар райондың төрлө ауылдарынан йыйылған һәм "Ватан" мәҙәни үҙәге ағзаһы Рәшиҙә Шәймөхәмәтова әйтеүенсә, ошоға тиклем татар ауылдары тип иҫәпләнеп йөрөгән ауылдарҙың башҡорт ауылдары икәнлеген ошо биҙәктамғалар ҙа асыҡ һөйләй. Ерле халыҡ үҙенең тамырҙарын белһен өсөн милли йолаларҙы тергеҙеү, йәштәрҙе тәрбиәләү менән дә булыша "Ватан" үҙәге.

Эйе, бындай йыйындар йыйыу, конкурстар үткәреү халыҡтың рухын күтәреп кенә ҡалмай, уларҙың тәрбиәүи әһәмиәте лә баһалап бөткөһөҙ. Башҡорт халҡының оҫта һөнәрсе икәнлеге, фантазияға бай һәм иҫ киткес зауыҡҡа эйә булыуы ла ошондай урындарҙа күренә лә инде. "Донъяңды ҡотайтам, аҡса табам, тиһәң, ҡул ҡаушырып ултырмай, ҡыбырларға ғына кәрәк, - тигәйне беҙҙең менән һөйләшкәндә Ишембай районы Аҙнай ауылы клубы мөдире Әлфиә Насирова. - Шуға ла беҙ халҡыбыҙҙың йолаларын, боронғо кәсептәрен тергеҙеп, йәштәргә аманат итеп ҡалдырырға тейешбеҙ".

**Конкурстың гран-прийы Ейәнсура районы тирмәһенә тапшырылды. Беренсе урынды Ишембай, Хәйбулла, Әбйәлил райондары бүлеште. Икенсе урынға биш тирмә лайыҡ булды, тағы ла туғыҙ тирмә өсөнсө урын менән баһаланды.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**





УҢЫШ ҠАҘАН

# ТОРМОШ ҠАНУНДАРЫ

## Ыңғай фекер йөрөт

Һинең фекерләү рәүешенә ҡарап, тормошоң төрлө яҡҡа үҙгәрә ала. Мәҫәлән, әгәр һин үҙеңдә һөйөүгә һәм бәхеткә лайыҡ түгел, тип иҫәпләйһең икән, күңел кителеү, юғалып ҡалыу, һыҙланыу кеүек тойғоларҙы тыуҙырыусы хәл-ваҡиғаларҙы йәлеп итәсәкһең. Ә бына үҙ баһаңды тейешенсә белеү ыңғай һөҙөмтәләр бирә. Барыһы ла үҙеңдән тора. Әйтәйек, һинең фекерләүең - ул проектор, ҡарашың - кинотаҫма, ә тормош тәжрибәң - экранда сағылыш тапҡан кинофильм тип ҡарайыҡ. Әгәр унда эскерһеҙ, яҡшы тойғоларҙың өлгөһөн күрәһең икән, был үҙеңә һәм башҡаларға ҡарата сәләмәт мөнәсәбәттә булыуың тураһында һөйләй. Әгәр ҙә инде йыш ҡына һыҙланыу һәм күңел төшөнкөлөгө кисерәһең икән, тимәк, был һинең кире фекерләүең һәм эске инаныслы үҙеңә ҡарата түбән булыуы тураһында һөйләй.

Миҫалға ҡатын-ҡыҙҙың кире фекерләүен килтерәйек: "Мин үҙемдең пессимист булыуымды һәм күп нәмәнән ҡурҡыуымды беләм. Барыһы ла минең менән аралашыуы ауыр, тип әйтә һәм быға аптырарға ла кәрәкмәй! Күрәһең, минән өҫтөнлөк алырға уңайлы осраҡты көтөп кенә йөрөүселәр бар. Бер кемгә лә ышанмайым: миңә насарлыҡ эшләүҙәре бар. Кешеләр шул тиклем иттибарһыҙ, тик үҙҙәре менән генә мәшғүлдәр. Бынан тыш, мин үҙемдең сибәр түгеллегемде беләм, шулай булғас, ни өсөн кемдер миңә иғтибар итергә тейеш?"Һин, моғайын да, ниндәй холоҡло кеше тураһында һүҙ барғанын аңлағанһыңдыр. Бындай ҡатындар менән аралашыуы ысынлап та ауыр.

Бынан нисек ҡотолорға? Әлбиттә, бары тик фекерләү образын үҙгәртеү аша. Быға көндән-көн үҙ өҫтөңдә эшләп өлгәшелә. Һин үҙгәрергә ҡарар ит, яныса фекер йөрөтә, үҙеңдә һәм башҡаларҙа тик яҡшыны ғына күрергә өйрәнә башлай алаһың. Иң мөһиме, теләк кәрәк. Һинең аңың шул тиклем ҡеүәтле үҫеш көсөнә эйә, ул хатта һин күҙ алдына ла килтермәгән юғары фекерләү кимәленә етергә һәләтле. Һинән башҡа бер кем дә аңың таянған ҡараш менән идара итә алмай. Ул һинең проекторың да, кинофильмың да.

Үҙгәреү процесы кире уйҙарға бирелеп китмәҫ өсөн һәр ваҡыт үҙеңдең фекерҙәреңде контролдә тотоуҙы талап итә. Үҙеңдең кире уйҙарың менән аңлы һәм ғәҙел рәүештә күҙмә-күҙ осрашыр өсөн ҡыйыулыҡ та кәрәк. Шулай уҡ бүтәндәрҙән бер ерең дә кәм булмауынан ныҡлы ышаныс талап итеүлә. Буйһоноусанлыҡ һәм кемдәндер өҫтөн булыу тойғоһо икеһе лә бер кимәлдә булған осраҡта бөтә яҡшылыҡтар һинән ситләп үтеүе ихтимал. Әгәр һин үҙеңде юғары баһалап, бүтәндәргә ҡарата түбән фекерҙәһең икән, был кешеләргә оҡшамай. Бүтәндәрҙе тикшереп ҡарау һинә кешеләрҙең яҡшы сифаттарын баһаларға ҡамасаулаясаҡ.

Фекерләүеңдә үҙгәрт, һәм һин тормоштоң сикһеҙ рәхәтлектәрен табырһың. Был һинең тормошоңдо ғына түгел, уратып алған бөтә донъяңды үҙгәртәсәк.

**Джон Макс ТЕМПЛТОН.**



## 21 ИЮНЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Ермоловы", 24-я серия
22.30 "Московская сага". Сериал
23.30 "Большая американская дырка-2"
00.10 "Ночные новости"
00.30 Дневник 32-го Московского международного кинофестиваля "Городские пижоны"
00.40 "Калифрения". Сериал
01.10 "Американская семейка"
01.40, 03.05 "Гладиатор"
03.00 Новости
03.30 "Полиция нового Орлеана"
04.20 "Детективы"

### РОССИЯ 1

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 77-я серия
18.05 "Ефросинья", 86-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Логово змея", 1-я и 2-я серии
22.45 "Гибель адмиралов. Тайна одной авиакатастрофы"
23.35 "Кулагин и партнеры"
00.05 "Вести+"
00.25 Футбол. Чемпионат мира. Испания - Гондурас. Прямая трансляция из ЮАР
02.35 "Синяя борода"
03.40 "Третья война подполковника Твардовского"
04.30 "Городок"

### НТВ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 15.30**

15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Учитель в законе. Продолжение". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.15 "Роковой день"
01.45 "Юлий Цезарь"
04.20 "Особо опасен!"
05.05 "Скорая помощь"

### БСТ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Художественый фильм**
**16.50 "Судьба"**
**17.15 "Виктория"**
**18.10 "Я помню..." А. Галанов**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Они видели Победу". Передача 2-я**
**29.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Формула успеха"**
**21.00 "Деловой форум"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Легенды спорта"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 22 ИЮНЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Ермоловы", 25-я серия. Сериал
22.30 "Московская сага", 9-я серия
23.30 "Большая американская дырка-2"
00.10 "Ночные новости"
00.30 Дневник 32-го Московского международного кинофестиваля "Городские пижоны"
00.40 "Калифрения". Сериал
01.10 "Американская семейка"
01.40, 03.05 "Это могло случиться с тобой"
03.00 Новости
03.40 "Полиция нового Орлеана"
04.30 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Богатая и любимая"
12.45 "Путейцы-2"
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.35 "Дворик", 78-я серия
18.05 "Ефросинья", 87-я серия. Сериал
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Логово змея", 3-я и 4-я серии
22.50 "Генерал звездных войн"
23.35 "Кулагин и партнеры"
00.05 "Вести+"
00.25 Футбол. Чемпионат мира. Греция - Аргентина. Прямая трансляция из ЮАР
02.35 "Честный детектив"
03.40 "Девушка-сплетница". Сериал

### НТВ

06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Агент национальной безопасности". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Учитель в законе. Продолжение". Сериал
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Кто "прошляпил" начало войны". Док. фильм
00.35 "Главная дорога"
01.10 "Королевская свадьба". Комедия
03.15 "Особо опасен!"
03.55 "Чужие в Америке". Сериал
05.05 "Скорая помощь"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 "Виктория"**
**10.20 "Знаменосец Победы"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 "Фильм-детям"**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**13.30 "Историческая среда"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск.яз.)**
**15.15 "Они отстояли Родину"**
**16.20 "Музыка войны. Музыка Победы". Концерт Национально-симфонического оркестра РБ**
**17.15 "Виктория"**
**18.00 "Узаман". С. Мажитов**
**18.20 "Любимые мелодии"**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Точка зрения"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.35 "Песни огненных лет"**
**21.30 Новости (на русск.яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Криминальный спектр"**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 23 ИЮНЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Пусть говорят"
20.00 Чемпионат мира по футболу-2010. Сборная Словения - сборная Англии. Прямая трансляция из ЮАР (в перерыве - Вечерние новости)
22.00 "Время"
22.30 "Ермоловы", 26-я серия
23.20 "Большая американская дырка-2"
23.30 "Среда обитания"
00.10 "Ночные новости"
00.20 Дневник 32-го Московского международного кинофестиваля "Городские пижоны"
00.30 Чемпионат мира по футболу-2010. Сборная Ганы - сборная Германии. Прямая трансляция из ЮАР
02.30, 03.05 "Мужья". Драма
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Натурщица для гения"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Богатая и любимая"
12.45 "Путейцы-2". Сериал
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.35 "Дворик", 79-я серия
18.05 "Ефросинья", 88-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Логово змея", 5-я и 6-я серии
22.50 "Вольф Мессинг. Первый советский экстрасенс"
23.35 "Кулагин и партнеры"
00.05 "Вести+"
00.25 Футбол. Чемпионат мира. Австралия - Сербия. Прямая трансляция из ЮАР
02.30 "Старший сын"
03.55 "Девушка-сплетница"

### НТВ

06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Агент национальной безопасности"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Учитель в законе. Продолжение"
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Поздний разговор"
00.20 "Гангстер"
03.25 "Особо опасен!"
03.55 "Чужие в Америке"
05.10 "Скорая помощь"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00, 13.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.30 "Виктория"**
**10.20 Мультфильм**
**10.30 "Действующие лица"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 Фильм-детям**
**13.15 "Музыка на канале"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 "Байык"**
**16.10 "Млечный путь". Н. Сабитов**
**17.15 "Виктория"**
**17.55 "И тогда придут другие..." 1-я серия**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.30 "Личность"**
**20.05 "Полезные новости"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Историческая среда"**
**21.00 "В центре внимания"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Тай-тулак"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Хрустальный соловей-2010"**
**00.05 Художественный фильм". По окончании: погода**

## 24 ИЮНЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.30 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым"
20.00 Чемпионат мира по футболу-2010. Сборная Словакии - сборная Италии ( в перерыве - Вечерние новости)
22.00 Время
22.30 "Ермоловы", 27-я серия
23.20 "Человек и закон"
00.30 "Ночные новости"
00.50 Дневник 32-го Московского международного кинофестиваля"
01.00 "Калифрения"
01.30 "Американская семейка". Сериал
02.00, 03.05 "Братья Блюз". Комедия
03.00 Новости
04.30 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Богатая и любимая"
12.45 "Путейцы-2". Сериал
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30, 17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры"
17.35 "Дворик", 80-я серия
18.05 "Ефросинья", 89-я серия. Сериал
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Логово змея", 7-я и 8-я серии
22.50 "Место встречи. Иван Бортник"
23.35 "Кулагин и партнеры"
00.05 "Вести+"
00.25 Футбол. Чемпионат мира. Камерун - Нидерланды. Прямая трансляция из ЮАР
02.30 "Старший сын"
04.00 "Девушка-сплетница"

### НТВ

06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Первая кровь"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Агент национальной безопасности"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Учитель в законе"
21.30 "Глухарь". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Алтарь Победы. Парад победителей". Док. фильм
00.25 "Один из нас". Боевик
02.35 "Особо опасен!"
03.55 "Чужие в Америке"
05.05 "Скорая помощь"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.25 "Полезные новости"**
**09.35 "Виктория"**
**10.30 "Тай-тулак"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 "Фильм-детям"**
**13.00, 19.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 "Жизнь после смерти". Л. Абдуллин**
**16.00 "Хрустальный соловей-2010"**
**17.00 "Виктория"**
**17.50 "И тогда придут другие..." 2-я серия**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.30 "Сокращая расстояния". Пермский край**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Крестьянский двор"**
**21.00 "Формула успеха"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Действующие лица"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "От Ика до Яика"**
**23.40 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 25 ИЮНЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Малахов+"
10.20 "Модный приговор"
11.20 "Контрольная закупка"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.30 "Хочу знать"
16.00 "Обручальное кольцо". Сериал
17.00 "Федеральный судья"
17.30 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 Чемпионат мира по футболу-2010. Сборная Португалии - сборная Бразилии. Прямая трансляция из ЮАР (в перерыве - Вечерние новости)
22.00 Время
22.25 "Розыгрыш"
23.40 "Обмани меня". Сериал
00.40 Чемпионат мира по футболу-2010. Сборная Чили - сборная Испании
02.40 "Дом с приколами". Комедия
04.20 "Я видел тот свет"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мой серебряный шар"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Богатая и любимая"
12.45 "Путейцы-2"
13.40 "Вести. Дежурная часть"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Тайны следствия". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 81-я серия
18.05 "Ефросинья", 90-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Логово змея", 9-я и 10-я, закл. серии
22.50 "Девчата"
23.45 "Точка возврата". Детектив
02.20 "Смертельная битва: истребление"
04.05 "Смертельная битва: путешествие начинается"
04.50 "Городок. Дайджест"

### НТВ

06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "И снова здравствуйте!"
09.30 "Особо опасен!"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.20 "Средний класс"
11.00 "Агент национальной безопасности"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Адвокат". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Улицы разбитых фонарей". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Чрезвычайное происшествие. Расследование"
20.55 "Красота. История всероссийского обмана"
22.55 "Женский взгляд" Оксаны Пушкиной"
23.45 "Урок выживания". Боевик
01.45 "Амнезия". Триллер
0345 "Чужие в Америке"
04.55 "Скорая помощь"

### БСТ

**07.00 "Салям"**
**09.00 Новости (на башк. яз.)**
**09.35 "Виктория"**
**10.20 Мультфильм**
**10.30 "Артылыш"**
**11.00 Новости (на русск. яз.)**
**11.15 "Фильм-детям"**
**12.40 Мультфильм**
**13.00 Новости (на башк. яз.)**
**13.15 "Музыка на канале"**
**14.00 "Хорошее настроение"**
**15.00 Новости (на русск. яз.)**
**15.15 Финал Школьной баскетбольной лиги "КЭС-баскет-2010"**
**16.25 Мультфильм**
**16.45 "Виктория"**
**17.30 "Йома"**
**17.50 "И тогда придут другие..." 3-я серия**
**18.40 "Родословная малой Родины"**
**19.00 "Новости" (на башк. яз)**
**19.30 "Парламентский вестник"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.30 "Историческая среда"**
**21.00 "Райхан"**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Уфимское "Времечко"**
**22.30 Новости (на башк. яз.)**
**23.05 "Криминальный спектр"**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 26 ИЮНЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.40, 06.10 "Завтра была война"
06.00 Новости
07.30 "Играй, гармонь любимая!"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Умницы и умники"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Смак"
11.00 "Александр Твардовский. Один в поле воин"
12.10 "Индеец, прячущий свое имя"
13.10 "Светлана Крючкова. Я научилась просто, мудро жить..."
14.10 "Большая перемена", 4 серии. Комедийный сериал
18.50 "Среда обитания"
20.00 Чемпионат мира по футболу-2010. 1/8 финала. Прямая трансляция из ЮАР
22.00 "Время"
22.15 "Майкл Джексон: Вот и все". Док. фильм-концерт
00.10 Дневник 32-го Московского Международного кинофестиваля
00.20 "Палата № 6". Драма
02.00 "Агент Джонни Инглиш". Комедия
03.40 "Миссия спасения: точка удара"
05.10 "Дети Дианы"

### РОССИЯ 1

05.20 "Одинокий игрок"
07.10 "Вся Россия"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
08.20 "Субботник"
09.00 "В некотором царстве"
09.230 "Тристан и Изольда"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.20 "Дела и люди"
11.45 "Рецепты здоровья"
11.55 "Формула совершенства"
12.15 "Комната смеха"
13.10 "Сто к одному"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.30 "Последний звонок Нестора Петровича"
15.20 "Кто хочет стать Максимом Галкиным"
16.20 "Субботний вечер"
18.15 "Веское основание для убийства". Драма
20.00 "Вести в субботу"
20.40 "Веское основание для убийства". Продолжение
22.20 "Выбор судьбы". Комедия
00.25 Футбол. Чемпионат мира. 1/8 финала. Прямая трансляция из ЮАР
02.35 "Возврата нет". Боевик
04.50" Последний звонок Нестора Петровича. Михаил Кононов"

### НТВ

05.50 "Рублевка. Live"
06.45 "Люди Икс: эволюция"
07.30 "Сказки Баженова"
08.00, 10.00, 13.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.50 "Без рецепта"
09.25 "Смотр"
10.20 "Главная дорога"
10.55 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.00 "Лучший город земли. Москва военная"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Суд присяжных: главное дело"
17.55 "Очная ставка"
18.40 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Профессия - репортер"
19.55 "Программа максимум"
21.00 "Русские сенсации"
21.50 "Ты не поверишь!"
22.40 "Легенды видео: "Смертельное оружие-3". Боевик
01.00 "Новичок". Боевик
03.35 "Чужие в Америке"
04.50 "Скорая помощь"

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.05 "Доброе утро!"**
**08.55 Погода**
**09.00 Мультфильм**
**10.35 "Советы садоводам"**
**11.10 "Волшебный курай"**
**11.10 Впервые на экране ТВ. Н. Гаитбаев. "Откройте, милиция. Спектакль Башкирского Государственного академического театра драмы им. М. Гафури**
**13.30 "На своей земле"**
**14.00 Новости (на башк. яз.)**
**14.20 "Сулпылар"**
**14.40 "Дарю песню"**
**15.50 "Черный плащ"**
**15.20 "Sашмау"**
**16.00 "Позитив"**
**16.25 "Противостояние"**
**16.50 "Октябрьский - город спорта"**
**17.15 "Любовью дорожить умейте..." Концерт В. Яруллина**
**18.40 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"**
**19.00 Новости (на башк. яз.)**
**19.20 "Дарю песню"**
**20.15 "Сэнгелдэк"**
**20.35 "Заметки хирурга". Э. Мулдашев**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**22.00 "Судьбы радужные нити"**
**22.40 "На сон грядущий"**
**23.25 Художественный фильм. По окончании: погода**

## 27 ИЮНЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 Мультфильм
07.50 "Армейский магазин"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00, 12.00 Новости
10.20 "Пока все дома"
11.10 "Счастье есть!"
12.10 "Фазенда"
12.40 "Севастопольские рассказы"
13.30 "Борис Хмельницкий. Стрела в сердце Робин Гуда"
14.30 "Стрелы Робин Гуда". Приключенческий фильм
16.00 "КВН". Премьер-лига
17.40 "Большая разница"
18.40 "Сумерки. Сага. Новолуние". Мистическая драма
21.00 Воскресное "Время"
22.00 Чемпионат мира по футболу-2010. 1/8 финала. Прямая трансляция из ЮАР
00.00 Церемония закрытия 32-го Московского международного кинофестиваля
01.00 "Форсаж". Боевик
03.00 "Иностранец". Приключения

### РОССИЯ 1

05.50 "До свидания, мальчики!"
07.20 "Звезда"
09.20 "Новые приключения капитана Врунгеля"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести - Башкортостан". Неделя в городе"
11.50 "Городок"
12.20 "Молодые". Мелодрама
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.30 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Честный детектив"
15.35 "Аншлаг и Компания"
17.25 "Лабиринты лжи". Драма
20.00 "Вести недели"
21.05 "Лабиринты лжи". Продолжение фильма
22.20 "От колыбели до могилы". Боевик
00.25 Футбол. Чемпионат мира. 1/8 финала. Прямая трансляция из ЮАР
02.35 "Волшебная сила". Комедия
04.00 "Комната смеха"

### НТВ

05.45 "Рублевка. Live"
06.45 "Люди Икс: эволюция"
07.30 "Дикий мир"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.20 "Спасатели"
11.00 "Кремлевские жены. Надежда Крупская. Замужем за революцией"
12.00 "Дачный ответ"
13.25 "Тонкая штучка". Иронический детектив
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.25 "И снова здравствуйте!"
17.25 "МАсквичи"
18.15 "Чрезвычайное происшествие. Обзор за неделю"
19.00 "Сегодня. Итоговая программа" с Кириллом Поздняковым"
19.55 "Чистосердечное признание"
20.45 "Бульдог-шоу"
21.30 "Во имя мести". Боевик
23.20 "Авиаторы"
23.55 "Округ Рэйнтри"
03.15 "Особо опасен!"
03.50 "Чужие в Америке"
05.05 "Скорая помощь"

### БСТ

**08.00 Новости (на русск. яз.)**
**08.10 "Для вас, ветераны!"**
**08.45 Погода**
**08.50 Мультфильм**
**10.00 "Ребятам о зверятах"**
**10.30 "Бабушкин сундучок"**
**11.00 "Тэмле"**
**11.30 "Сулпылар"**
**11.50 "Семер"**
**12.05 "Байтус"**
**12.25 "Телекомпас"**
**13.00 "Жизнь, отданная песне". К. Валеев**
**14.00 "Книжный дом"**
**14.25 "Дарю песню"**
**15.30 "Салям"**
**15.50 "Дорога к храму"**
**16.10 Художественный фильм**
**17.40 "КВН-2010"**
**18.50 "Дарю песню"**
**19.50 "В центре внимания"**
**20.10 "Байык"**
**21.10 "Урал Лото 6 из 40"**
**21.30 "Ватан". События недели"**
**22.45 Погода**
**22.50 "Вечер.com"**
**23.30 Художественный фильм. По окончании: погода**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫНҒЫРЫ

# КҮҢЕЛ БУШЛЫҒЫН...

## рух һәм иман менән тултырайыҡ



**Быйыл көҙ Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу үтәсәк. Шуға ла III Бөтөн донъя башҡорттар ҡоролтайында был мөһим сәйәси ваҡиғаға һәм башҡорт халҡының демография үҫеше проблемаларына арналған секция ултырышы үтте. Унда сығыш яһаусылар тарихи һәм бөгөнгө шарттарҙа башҡорт халҡының иҫәбе, тыуым, үлем, ғаилә-никах мөнәсәбәттәре һәм миграция мәсьәләләрен ҡараны. Төрлө райондарҙан килгән делегаттарҙың этнодемографик үҫешкә, халыҡ иҫәбен алыу эшенә әҙерлек процесына ҡарата фекерҙәрен белеү маҡсатынан секция ултырышында ҡатнашыусыларға мөрәжәғәт иттек:**

**Ғәзим УСМАНОВ, Әбйәлил районы:** 1990 йылдарҙа СССР менән бергә совет идеологияһы ла юҡҡа сыҡты. Милли идея булмағанлыҡтан, рух бушлығы хөкөм һөрә хәҙерге мәлдә. Кемдер уны аҡса менән тулыландырырға тырыша, әммә аҡса рух бушлығын мөлдөрәмә тултыра, күңел тыныслығы бирә торған әйбер түгел. Ул бушлыҡты башҡорт рухы менән генә түгел, ә берләштереүсе донъяуи тағы бер идея менән тултырыу мөһим. Миненсә, бөгөн йәмғиәтебеҙгә иман, әхлаҡ ҡайтһа ғына бәләләрҙән ҡотолоу юлдарын таба алаcаҡбыҙ. Шунда ғына ғаиләләребеҙ тулы буласаҡ, етем балалар булмаясаҡ. Ҡоролтайҙа йәштәр тәҡдим иткән 12 меңселәр идеяһы оҡшаны. Районда йәш ғаиләләрҙе, өйләнмәгән егеттәрҙе, кейәүгә сыҡмаған ҡыҙҙарҙы ошо программала ҡатнаштырға дәртләндерә башланыҡ та инде. Бөгөнгө көндә йәшәйешебеҙ насар түгел, биш бала табып тәрбиәләү артыҡ проблемалар тыуҙырмаясаҡ, тик йәштәребеҙ бала бағыуға етди һәм яуаплы ҡарап, аңлы рәүештә килһен ине. Шулай уҡ был идеяны республика етәкселәренең дә хуплауы, ошо хәрәкәттә ҡатнашыусыларҙы ниндәйҙер бер маҡсатлы программа буйынса матди дәртләндереү тураһында хәстәрләүе фарыз.

Бөгөн яҡшы кейенәбеҙ, берәү ҙә асыҡмай, телевизор ҡарайбыҙ, интернет менән ҡулланабыҙ, ҡыҫҡаһы - тормошобоҙ түңәрәк. Әммә шул уҡ ваҡытта кеше ни өсөндөр үҙенең тәбиғи булмышынан ситләшә. Тәбиғәт балаһы тәбиғәт менән гармонияла йәшәргә тейеш, ә беҙ әшмәкәрлегебеҙ ҙе тәбиғәтте юҡ итеүгә ҡорабыҙ, ағастарҙы ҡырҡабыҙ, һауаны бысратабыҙ. Тәбиғәт менән бер бөтөн булыуыбыҙҙы бер генә минутҡа ла иҫтән сығармаҫҡа кәрәк. Европа илдәре үткән быуаттың 70-80-се йылдарында тәбиғәтен тәләфләп, бысратып бөттө лә, бөгөн иманға килеп, уға һаҡсыл ҡараш булдырҙы. Уларҙың хатаһын ҡабатламаһаҡ ине, сөнки башҡорт халҡы улар кеүек һан яғынан күп түгел.

**Ғаян МӨХӘМӘТОВ, Учалы ҡалаһы:** Бөгөн йәштәр ни өсөндөр бала табырға ашыҡмай. Әлбиттә, быны үҙенең сәбәптәре лә бар, кемдер торлаҡ, кемдер эш юҡ, тип әйтер. Мәғариф өлкәһендә барған үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә аҙ комплектлы мәктәптәрҙе ябыу ҙа быға йоғонто яһамай ҡалмайҙыр. Нисек кенә булмаһын, ас-яланғас түгелбеҙ, унар бала тәрбиәләгән әсәй-өләсәйҙәребеҙгә еңел булған тип уйлайһығыҙмы әллә? Ошолар тураһында уйланып йөрөй торғас, был проблеманың төп сәбәбен дә асыҡлағандай булдым: йәштәребеҙгә дөрөҫ тәрбиә бирә белмәгәнбеҙ. Улар тормошҡа, ғаилә ҡороуға еңел ҡарай, тиҙ генә айырылышып бара. Ҡатын-ҡыҙға сабырлыҡ, түҙемлек кеүек сифаттар етешмәй. Ошо проблемалар ҡоролтайҙа ғына түгел, ҡатын-ҡыҙҙар һәм йәштәр йәмәғәт ойошмалары иғтибары үҙәгендә булырға тейеш.

Көҙөн уҙасаҡ халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы буйынса ла район-ҡалаларҙа эшләй торған эштәр байтаҡ. Мәҫәлән, ғалимдар "Учалы типтәрҙәре", тип яҙырға ярата. Әммә улар йәшәгән ауылдарҙың төп нигеҙен башҡорттар һалған. Был ауылдар халҡы башҡортса һөйләшә. Әлеге мәлдә аҡһаҡалдар менән тотош ауылдарҙың шәжәрәләрен төҙөп, аңлатыу эштәре алып барабыҙ.

Халҡыбыҙ бигерәк тура һүҙле. Тарихта беҙҙең кеүек 200 йыл буйы ирек өсөн көрәшкән милләт юҡ. Әгәр ҙә ошо ихтилалдар булмаһа, бәлки, беҙ бөгөн 15 миллион булыр инек. Һәр әйтелгән һүҙҙең ниндәй әҙемтәгә килтереren уйлап хәбәр һөйләргә өйрәнергә кәрәк. Башҡорт халҡына һығылмалыраҡ булыу етешмәй, ошоно йәштәргә аңлатырға кәрәк.

**Баязит МӨЛӨКОВ, Өфө ҡалаһы:** Бөгөнгө көндә башҡорт халҡының күпселеге, 50 проценттан ашыуы, ауылда йәшәй. Миненсә, быны бер ниндәй насарлығы юҡ, тап ауылдарҙа йәшәүсе халыҡ ошоға тиклем милләт тотҡаһы булып торҙо, балалар ҙа унда күберәк тыуҙы. Әммә бөгөнгө ауылдың проблемалары етелек. Мәҫәлән, үҙем Архангел районында тыуып-үҫтем. Мин уҡыған саҡта балалар күп, мәктәп юҡ ине, хәҙер мәктәп бар - уҡыусылар юҡ. Быны төп сәбәптәренең береһе -ауылда эш булмауы. Шунлыҡтан да йәштәр ситкә китеп бөткән, ауылда тороп ҡалғандары өйләнмәй, кейәүгә сыҡмай йөрөй бирә, ҡалала йәшәгәндәре икенсе милләткә бала үҫтерә. Ошондай шарттарҙа милләт нисек артһын инде? Шуға ла бөгөн ауылдарҙы торғонлоҡтан сығарыу, унда эш урындары булдырыу өҫтөндә эшләргә кәрәк.

Ләйсән ДАЯНОВА
яҙып алды.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**28 июнд**ә театр үҙенең юбилей миҙгелен Салауат Әбүзәрҙең **"Хыялый"** лирик комедияһы премьераһы менән ябасаҡ.

"Хыялый" - билдәле шағир Салауат Әбүзәрҙең тәүге пьесаһы, драма әҫәрҙәре яҙыусыларҙың республика конкурсында еңеүсе. Уны Арыҫлан Йәнбәков сәхнәләштерә, рәссамы - Руслан Мәғәлимов, композиторы - Юлай Үҙәнбаев. Төп ролдәрҙә - Илдар Сәйетов, Илдар Ғүмәров, Гүзәл Маликова, Шәүрә Дилмөхәмәтова, Рәүис Заһитов, Әхәт Хөсәйенов, Алһыу Ғәлина, Азамат Ғафаров, Рәзифә Динмөхәмәтова һәм башҡа сәхнә оҫталары.

**16 июнд**ә театрҙың бер төркөм артистары Сибай ҡалаһы, Йылайыр, Хәйбулла, Күгәрсен райондары буйлап гастролгә сыҡты. Был иждаи сәфәр театрҙың 90 йыллыҡ юбилейына, Республика йылына, бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына бағышлана. Гастролдәр 21 июнгә тиклем дауам итәсәк.

## "ЗДРАВЕНЬ ТУРБО"
### ашламаһы - яҡшы уңыш нигеҙе

**"ЗДРАВЕНЬ"** ашламаһы йәшелсә, баҡса һәм сәскә культураларын туҡландырыусы иң яҡшы саралрҙың береһе иҫәпләнә. Ул һыуҙа яҡшы ирей, уның туҡландырыусы элементтары үҫемлектең тамырына еңел үтеп инә. **"ЗДРАВЕНЬ"** ашламаһы составындағы макро- һәм микро элементтар яҡшы уңыш алырға мөмкинлек бирә.

**"ЗДРАВЕНЬ"** үҫемлектәрҙең тамыр системаһын нығыта, үҫентеләр яҡшы үҫә, емеш биреүҙе арттыра. **"ЗРАВЕНЬ"** ашламаһы ярҙамында иртә өлгөрөүсе йәшелсәләр тағы ла иртәрәк өлгөрә, емеш һәм йәшелсәләрҙә шәкәр, витаминдар күберәк туплана, уларҙың тәме сифатлыраҡ була. **"ЗДРАВЕНЬ"** менән туҡландырылған кәбеҫтә тығыҙыраҡ, һуған эрерәк булып үҫә. Белгестәр күҙәтеүе буйынса, **"ЗРАВЕНЬ"** уңышты 17-20 процентҡа күтәрә. Баҡса сәскәләре лә, гөлдәр ҙә оҙағыраҡ сәскә ата, уларҙың япраҡтары һәм сәскәләре сағыуыраҡ төҫлө була.

**"ЗДРАВЕНЬ ТУРБО" - тиҙ һәм яҡшы һөҙөмтә!**

**Магазин һәм баҙарҙарҙа һорағыҙ!**
**Тауар сертификацияланған.**
**www.vhoz.ru**

ИҒЛАН

**Утерянный студенческий билет №03-001 выданный БГМУ 01.09.2003 года на имя Абсаламовой Гузелии Ахмеровны считать недействительным.**

ҺҮҘ АРАҺЫНДА...

### Дөрөҫ туҡланыу кәрәк

**Дөрөҫ туҡланыу тураһында бигерәк күп һөйләйҙәр, ә нисек була һуң ул?**

- Тимәк, был бер ҙә юҡтан түгел, ә тикшеренеүҙәрҙән сығып һөйләнә. Мәҫәлән, һөт һәм май ризыҡтарын беҙ, асыҡланыуынса, сәләмәт туҡланыу нормаларында ҡаралғандан 2-2,5 тапҡырға күберәк ҡулланабыҙ. Майҙарҙы ҡулланыуҙың тәҡдим ителгән кимәле рациондың дөйөм калориялығының 30 процентынан да күберәкте тәшкил итергә тейеш түгел. Ә беҙҙә, Рәсәйҙең Европа өлөшөндә, был 38-39 процент тәшкил итә. Шәкәр һәм кондитер изделиелары ла күп ҡулланыла: беҙ уны көнөнә 3 һәм унан да күберәк түгел, ә 1 тапҡыр ғына ашарға тейешбеҙ. 2008 йылда рәсәйлеләр кеше башына уртаса 32 кг тәм-том ҡулланһа, 2009 йылда был күрһәткес 33,5-34 килограмға барып еткән. Йәшелсә һәм емеш-еләк менән беҙ көнөнә 4-6 тапҡыр туҡланырға тейеш булһаҡ, уны көнөнә бер тапҡыр ашамаусылар ҙа бар. С витаминына ҡағылышлы хәл дә бик насар: илдең көньяғында ла хатта уға булған ихтыяж ярты-лаш ҡына ҡәнәғәтләндерелә.

### Майҙа эшкәртелгәне зыянлы

**Киптерелгән емеш-еләкте ниндәйҙер майҙар менән эшкәртәләр, тип ишеткәйнем, был зыянлымы?**

- Ысынлап та, ҡайһы бер намыҫһыҙ етештереүселәр өрөк, күрәгә, йөҙөм, ҡара емештәрҙе оҙаҡ һаҡланһын һәм матур күренһен өсөн көкөрт йә глицеринлы махсус майҙарҙа эшкәртеп ала, ә был, әлбиттә, һаулыҡ, айырыуса ашҡаҙан-эсәк юлдары өсөн бик зыянлы. Шуға күрә киптерелгән емеш-еләк һайлағанда иғтибарлыраҡ булығыҙ: уларҙың махсус майҙар менән эшкәртелеүе күренеп тора. Шуға күрә бөрөшөп кипкән, ҡоро һәм ялтырап тормаған емештәрҙе һатып алырға тырышығыҙ. Ҡояшта киптерелгән емештәр генә файҙалы. Ультранурҙар менән килтерелгән емештәр ҙә һаулыҡ өсөн зыянлы. Былдай технологиянан емештәрҙәге С һәм В витаминдары тарҡала. Өҫтәүенә, уларҙың ҡайһыларын ҡайнар һыуҙа бешекләп алалар, был иһә уларҙа А витамины юғалыуға килтерә. Был осраҡта емештәрҙең төҫөнә иғтибар итегеҙ. Күренһоро төҫкә ингән ҡара емеште һәм бөләнгерт күрәгәне алмағыҙ. Өрөк кеүек һөйәкле емештәрҙә витаминдар күберәк һаҡлана икәнлеген дә белеп ҡуйығыҙ.

### "Һаҡланғанды - һаҡлармын"

**Диета ярҙамында яман шеш ауырыуҙарынан һаҡланып буламы?**

- Туҡланыу ғәҙәттәрен үҙгәртеү менән генә тулыһынса яман шеш ауырыуҙарынан һаҡланып булмай, әлбиттә. Шулай ҙа "һаҡланғанды - һаҡлармын" тигәндә лә онотмаһаҡ, ғалимдар раҫлауынса, был йәһәттән дә сирҙән һаҡланыуға күпмелер өмөт бар. Мәҫәлән, ашҡаҙан һәм ҡыҙыл үңәс яман шешенән һаҡланыуҙа С витаминына бай аҙыҡ ярҙам итә ала: помидор, татлы борос, цитрустар. Һөт биҙҙәре яман шеше ихтималлығын иһә шпинат, брокколи кәбеҫтәһе, персик һәм кишер кеүек бета-каротинға бай аҙыҡ кәметә. Өҫтәлегеҙҙә һәр ваҡыт кәбеҫтәнең төрлө төрҙәренә түрҙән урын бирегеҙ: улар яман шеш сирҙәре үҫешен туҡтатыуға һәләтле матдәләргә бай. Шул уҡ ваҡытта ҡайһы бер аҙыҡ-түлек төрҙәрен ҡулланыуҙан, киреһенсә, тыйылыу фарыҙ. Мәҫәлән, бөтә төр ыҫланған аҙыҡ-түлектә ашҡаҙан-эсәк юлдары яман шешенә килтереүсе матдәләр туплаған була. Шулай уҡ майлы һөт аҙыҡтары, суҫҡа, һыйыр ите, майҙарҙы ҡулланыуҙа ла һаҡлыҡ һәм сама кәрәк.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА
әҙерләне.

✓ *Рәдиф Аҡсурин абсолют чемпион исеменә лайыҡ булды. Уға Мортаза Рәхимов елән, ҡамсат бүрек һәм үҙенең көсөн көрәш балаҫында ғына түгел, ә ат ярыштарында ла күрһәтеүен теләп, арғымаҡ бүләк итте.*



ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# "АЙГӨЛ ИЛЕ" ТИГӘН...

## мәҙәни үҙәк

**Өфөлә "Айгөл иле" барлыҡҡа килде. Октябрь Революцияһы урамында М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты корпустары араһында ҡасандыр ташландыҡ урын иҫәпләнгән мәҙәни үҙәк хәҙер шулай атала. Был уҡыу йортоноң уҡытыусылары һәм студенттары тырышлығы менән бында йәйге студия төҙөлгән.**

Асыҡ һауала урынлашҡан студияла башҡорт халҡының милли идеяһын бергә туплаусы скульптура эштәре ҡуйылған. Был уникаль композиция башҡорт халҡының тарихын һәм мәҙәниәтен сағылдырған образдарҙан ғибәрәт. "Айгөл иле"нә килеп инеү менән "Урал батыр", "Аҡбуҙат", "Шоңҡар"ҙы һынландырған композиция ҡаршы ала. Шундуҡ "Һомай" күҙгә ташлана. Бында шулай уҡ ил инәһен (Р.Хәсәнов "Көтөү"), Батырша Әлиевты (В.Лобанов "Идущий против ветра"), сәсәнде (Н.Байбурин) күрергә мөмкин. Бик күп эпостарҙан һәм әҙәби әҫәрҙән таныш "Ҡуңыр буға" ла, һәм әлбиттә, беҙҙең милли уйын ҡоралыбыҙға бағышланған "Ҡыҙ-ҡурай" ҙа урын алған.

"Был ижади эшкә тотонор алдынан "Урал батыр" эпосын ҡат-ҡат уҡып сыҡтым һәм һәр ваҡыт был образды күҙ алдында тоторға тырыштым. Шуныһыҙ уны һынландырып булмай, - тип һөйләп китте авторҙарҙың береһе Мәүлетбай Хәлилов. - Урал батыр - беҙҙең ғорурлығыбыҙ. Шуға ла был скульптура эшенә ҡарап барыһы ла ғорурланырға тейеш. Мин Урал батырҙың атаһы арыҫланға атландырып, үлем үлтерергә ебәргән йәш сағын һынландырҙым. Бында әле батырлыҡ эшләргә өлгөрмәгән, бөйөк эштәре алда әле уның".

**Шулай итеп, III Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы алдынан асылған йәйге студияла Өфө халҡы һәм ҡунаҡтар рәхәтләнеп ял итеп, башҡорт халҡының үткәне һәм мәҙәниәте менән таныша ала. Яҡын киләсәктә бында ижади һәм мәҙәни кисәләр ойоштороласаҡ, студенттарҙың уҡыу-ғәмәли дәрестәре лә үтәсәк.**



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!



# БАТЫР КӨСӨ...

## көрәштә беленә

**Торатау янында үткән "Салауат йыйыны" байрамы сиктәрендә төрлө спорт ярыштары ла үтте.**

Бигерәк тә милли көрәш буйынса барған финал ярыштары байрам ҡунаҡтарының иғтибарын йәлеп итте. Унда республиканың төрлө төбәктәренән 170-кә яҡын көрәшсе ҡатнашты. Сығышы менән Федоровка районынан булған Рәдиф Аҡсурин абсолют чемпион исеменә лайыҡ булды. Уға республика Президенты Мортаза Рәхимов елән, ҡамсат бүрек һәм үҙенең көсөн көрәш балаҫында ғына түгел, ә ат ярыштарында ла күрһәтеүен теләп, арғымаҡ бүләк итте.

Бынан тыш, йыйында юниорҙар араһында Ишембай районының беренселеге үтте. Унда райондың йәш батырҙары - 1-се балалар-үҫмерҙәр мәктәбендә милли көрәш менән шөғөлләнеүсе 7-15 йәшлек малайҙар бил һынашты. Унда Ҡарағай ауылынан Айнур Вәлиев, Урман-Бишҡаҙаҡтан Рөстәм Ишкинин, Илнур Сәфәрғолов, Илдар Ишембаев еңеүсе булды.

АТЫҢ КЕМ?

# ИЛГӘҘӘК ҮҘҘӘРЕ

Бөгөн йәштәрҙең балаларына исем һайлауға етди ҡарауына шатланып бөтә алмайым. Минең дә ейән-ейәнсәрҙәрем матур яңғырашлы, мәғәнәле башҡорт исемдәрен йөрөтә. Айназа - "ай" һәм "наҙ" һүҙҙәренән ҡушып яһалған, бигерәк наҙлы, иркә, матур күңелле бала. Наилә ейәнсәрем маҡсатына ирешеүсән, аҡыллы, ул атаәсәһенә лә, беҙгә лә оло бүләк. Ғәлиәбеҙҙең исеме "бөйөк, юғары" тип тәржемә ителә, илгәҙәк бала, кеше менән еңел генә уртаҡ тел таба белә. Ә Рәсүл ейәнем әлегә улар араһында берҙәнбер ир заты, апай-һеңлеләренә яҡлаусы. Рәсүл исеме "илсе" тигәнде аңлата.



**Миңлегөл УСМАНОВА,**
**Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылы.**

ИҒЛАН



Затон биҫтәһендә (СНТ "Озерный") 6х9 үлсәмле ике ҡатлы йорт һатыла йәки фатирға алыштырыла. Участка майҙаны 10 сотый, мунсаһы, емеш-еләкле баҡсаһы бар.

**8-919-159-01-71,**
**Римма Яруллина.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЕР МЕНӘН КҮКТЕҢ...

## һөйләшкәнен аңла

Һәр бәндә күрәһене күрмәй ҡалмаҫ, кәрәк солтан булһын, кәрәк император...

**(Аҡмулла).**

Талантлылар һәм талантһыҙҙар бәйгеһендә уртаҡулдар уҙып киткән һәммәһен дә.

**(Рәшит Шәкүр).**

Ишәк ауырығанын, ир ҡартайғанын белмәҫ.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ҡыҙҙың ҡанаттары бар ине. Ә егет быны күрмәмешкә һалышты. Ҡыҙ оса белә ине. Ә егет был хаҡта ишетергә лә теләмәне. Таң менән уны алһыу болоттарҙан төшөрә лә: "Ҡуй, юҡты, иҫәрләнмә. Һин бит оса белмәйһең", - тип көлә генә ине. Ә ҡыҙ үпкәләмәне. Һаман да оса бирҙе. Яңғыҙы болоттар буйлап йөрөнө, әҙәм балаларының хыялдарын күҙәтте, шул хыялдарҙы нәҙәкәтле бармаҡтары аша ҡом кеүек ҡойоп уйнаны.**

**Ҡыҙ ямғыр яратты. Ҡойондоң иң уртаһына барып, ул күк менән ерҙең шыбырҙап аралашҡанын тыңланы. Ә ямғыр туҡтағас, ул офоҡтан бейек тауҙарға тиклем йәйғор төшөрә ине. "Ҡуй, юҡты. Табылған рәссам..." - тип мыҫҡыллай ине егете.**

**Ә тағы ҡыҙ ысын шағир кеүек, һәр нәмәнең йәнен тоя ине. Урманға барһалар, үләндәр менән ағастар көлөшкәнен, ҡырмыҫҡа менән бөжәк талашҡанын, сәскә менән бал ҡорто иркәләшкәнен сәғәттәр буйы һөйләр ине лә... "Ҡуй, бушты. Шағир, имеш..." - егетенең шулай тигәненән тағы күңеле ҡайта ине. Ә иң мөһиме - ҡыҙ ошо егетте ярата ине. Алһыу болоттар наҙын да, ямғыр йырҙарын да, йәйғорҙоң ете төҫөн дә тик уға ғына бағышлай ине. "Ҡуй, бушты, баш ҡатырма", - тип ҡул һелтәп кенә ҡуя ине егете.**

**Бер ваҡыт ҡыҙ түҙмәне, йондоҙҙарға табан осто ла осто, осто ла осто, осто ла осто... Һәм башҡаса егет янына ҡайтманы.**

**Ямғыр яуғанда егет тышҡа сыҡты, ер менән күктең һөйләшкәнен тыңлап, һөйгәне тураһында берәй хәбәр булмаҫмы, тип өмөтләнде, тик уларҙың бер һүҙен дә аңлай алманы. Ҡыҙҙың ете төҫ ҡәләмен алып, йәйғор төшөрҙө - тик бер нимә лә килеп сыҡманы. "Мин рәссам түгел шул", - тип ҡуйҙы шунан. Урманға сығып ҡараны, әммә ағастар менән үләндәр ҙә, ҡырмыҫҡа менән бөжәктәр ҙә, сәскә менән бал ҡорто ла бер нимә лә өндәшмәне уға. "Мин шағир түгел шул", - тип бошондо егет. Шунан ул ҡанаттар тағып, алһыу болоттарға үрмәләне. Иң бейек болотҡа баҫып, аҫҡа ҡарай һикерҙе. "Мин оса белмәйем шул", - тине һуңынан..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Динара ЯҠШЫБАЕВА,
Таһир ИШКИНИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6167
Заказ 2396